*Ринат КАМАЛ*

# АҒАЙ-ЭНЕЛӘР

***Роман***



*А.Вәсилов һүрәте*

## ДҮРТЕНСЕ БҮЛЕК

### I

Көтөп алған мәле тыуҙы — ҡарсыҡ урынында. Ҡыйғыр ҡоштоң күҙе үткер, тәхете бейек. Донъяла ниҙәр бар, ҡая аҫтында тормош именме? Ҡаршыһынан берәйһе генә үтеп барһа ла, күҙәтеүсегә — табыш.

Ҡуянсыҡ урамы — ҡотлоярҙар төйәге. Ҡотлояр, Фәхретдин, Ғайнан, Харис, Аҙнабай, Һаҙый — барыһы ла бер тамырҙан. Ҡотлояр ҡарт 1926 йылда баш балаһы Сабирйәнгә емеш баҡсаһы аша ғына өй һалды. Ә Һаҙый туғаны — һул ҡулда. Миңдеямал менән Хәмиҙә — килендәштәр.

Илленсе йылдар башында Зөлҡәрнәй, урыҫтарҙан бура алып, төп йортҡа ҡаршы өй һалды. Ҡарт шунан күп тә торманы… Оҙаҡ йәшәргә ине иҫәбе, үҙен яҡын туғандары, ян-яҡтан уландары уратып алғайны. Ә Камил, Хәмиҙәнең үҙенең баш балаһы, Мәғҙәндә төпләнмәне. Йәштән ситтә уҡыны, ситкә өйрәнде, әллә ҡайҙағы Биләнгә барып еректе… Бәләкәйҙән уҡырға шәп ине. Ҡарт Зөлҡәрнәйен Дыуан техникумына урынлаштырып ҡайтҡас, Хәмиҙә көнләшә лә биреп ҡуйғайны бит. Әлфирә көндәшенең улы киләсәктә ҙур кеше булыр! Әлфирә үҙе лә шәп ине, балалары ла кеше була… Ә Хәмиҙәнекеләр ултырып ҡалмаҫмы? Ҡотлояр бисә өҫтөнә йәш кәләш алып мең хаҡлы булған!

Хәмиҙә яңыраҡ Биләнгә улына барып ҡайтты. Эскән сәйенең тәме, ейгән икмәге таты теле осонда ғына. Биләндә күргәндәрен күрше-күләнгә һөйләй башлаһа… Ул Камил менән Рәйсә килене етеш йәшәй икән, әллә ожмахтың үҙенә барып юлыҡҡандар? Эштәре лә уң, дәрәжәләре юғары, һәр кем үҙҙәрен оло күреп тора. Һөйләп бөтөрлөк түгел ул сәфәр хаҡында — уныһына Хәмиҙәнең тел аҫҡысы ла етмәҫ.

Камил да, Рәйсә килен дә көнө буйы эштә, ҡарсыҡ олоғара өйҙә бойоғоп ултыра, ялҡып та китә. Шулай ун көн, ярты ай үтә, Мәғҙәнен һағына. Ашарына — алдында. Ниндәй генә ниғмәттәр юҡ: ул емештәр, һутлы һыуҙары! Ейәндәре лә ”өләсәй” тип өлтөрәп тора. Олоһо уҡырға китһә, уртансыһы ҡайта; төпсөгө гел уның менән — һис артынан ҡалмай. Шул кинйә бала менән ҡарсыҡ икәүҙән-икәү донъя көтә.

Рәйсә килен ни үҙе бешереп-төшөрөп, ҡәйнәһенә күрһәтеп китә, ә ҡарсыҡтың бер үҙенең тамағына аш бармай (ейәне иҫәпкә һанмы), көнө буйы төңөлөп ултыра, радио тыңлай. Ярай, бәләкәс өҙлөкһөҙ тытылдай, тегене-быны һорай. Камил үҙе күҙгә лә эленмәй… Ахыр ҡарсыҡтың аҡтыҡ түҙеме һына: ул ҡайта, төйөнсөгөн төйнәй ҙә — Мәғҙәненә! Ул шулай улының да, килененең дә ай-вайына ҡарамай иленә ҡайтып төштө.

Нәҡ шул сәфәрҙән һуң емерелде лә инде донъяһы: Гөлбәҙәр килене Ғәтиәтте ташлап ҡайтып китте. Хәмиҙә ҡарсыҡтың ярты ҡояшы һүнде, тамағы аштан яҙҙы, йән тыныслыҡтары юғалды. Көйөнә, ҡулына алғаны төшөп бара. Күҙ алдына баҫтыра: имеш, Миңзада уның килене булып киткән! Хәҙер ни, Гөлбәҙәр урыны бушағас, әрһеҙ алабай, рәхим ит әҙер донъяға — ҡотлоярҙарҙың төп нигеҙенә! Уйнаштан тыуған балаһын эйәртеп, тупһаны аша атлай, имеш, алабарман. Һис

---

*(Аҙағы. Башы 11-се һанда)*

тә ҡыҙармай, ”ыһ” та итмәй: түрбашҡа уҙып, әйберҙәрен теҙә, шул яҡты бөтөнләй биләп ала. Хәмиҙә ҡәйнәһе хәҙер ҡашығаяҡҡа күскән. Килен төп йортҡа хужа булды, ҡулы — бөйөрҙә, Ғәтиәт мәжнүнде бейетеп тота, ә әсәһенә бойороҡтар яуҙыра. Бармаҡ осо менән генә ымлай! Балаһын да ҡарата, әстәғәфирулла. Ҡарсыҡ был мәсхәрәне күтәрә алмай түшәккә йығыла. Теге кинәнә: мораҙына өлгәште, уланды эләктерҙе, ҡәйнәне гүргә тыҡты. Хәҙер үҙе — ҡотлоярҙар күсенең инә ҡорто, был тармаҡлы нәҫелдең хакимәһе!

— Әстәғәфирулла, әстәғәфирулла… — тип ҡарсыҡ белгән сүрәләрен уҡып, ятлаған доғаларын ҡылып ҡуя. — Күрһәтмә, Хоҙай, ундай көндө, ысынға түгел, ғибрәткә күҙ алдына килтермә! Ҡөҙрәтең киң, игелектәрең сикһеҙ. Әйҙә, ул дыуамал үҙенең Күльяҡ урамында ғына йөрөп ятһын, Ҡуянсыҡ урамына һис баҫмаһын! Эй, Аллам, яуыз бәндәләреңдән һаҡла, уларҙың юлын беҙҙән ары йөрөт!

Хәмиҙә йәштән динсел булды, ә көндәше көфөр ине, ни Алланы, ни мулланы бар тип белмәне. Өҫтәүенә, большевик ҡарт уға ишкә — ҡуш: оло башына бисәне үҙе ҡотортоп, аҙҙырып тора, ә Хәмиҙә дәһриҙәр араһында йәшәһә лә, шөкөр, иманынан яҙманы. Шул Хоҙайға һыйыныуы бәләләрҙән һаҡланы, гонаһтан араланы бит. Шуға шөкөрана ҡылып йәшәй. Дөрөҫ йәшәне, хаҡ юлдан тайпылманы — Хоҙай ҙа, аяп, һәр даим рухын хозурлап торҙо. Әсләмен дә уйланы. Улар ҙа эш кешеләре, иртүк тораларҙыр. Баныубикә килен менән башҡа сығып, Арҡҡы урамға өй һалдылар. Әсләм, Гөлбәҙәр килен ҡайтып киткәс, килеп еткән. Йөҙө көл, ни ҡылырға, ни тиергә белмәй. Ғәтиәт тә ҡаушаған, ҡулын ҡаушырып ултыра. Туғандар нимәгә тотонорға, нимәгә таянырға белмәй.

Урамда Фәтих Шаҙра балалары күҙгә салынып ҡала. Эш кешеләре. Олоһо — бригадир. Ә Сәғҙей ҡарт гел ат еккән була. Конюх булып эшләп ҡартайҙы инде. Ҡарсығы Хәмиҙә кеүек өйөнән сыҡмай, күҙгә башҡа салынмай.

Тыҡрыҡ башындағы имсе Файзаданы иһә Хәмиҙә йыш күрә. Файзада ныҡ баҫып йөрөй әле, Хәмиҙәгә лә инә. Һаман имләй, сихырын да ташламай. Ҡарсыҡ уны эсенән генә әрләп тә ҡуя, тағы, үҙенә көһөрө төшмәгәс, ғәфү итә. Күрше-күлән хәҙер ҡарсыҡҡа туған кеүек. Бер ғаилә ағзалары. Ошо йылдар эсендә бөтә Ҡуянсыҡ урамы бер ғаиләгә әүерелеп бөттө. Көн дә бергәләр бит! Нисәмә йыл иңгәиң терәшеп йәшәйҙәр. Кем керә, кем сыға, ни бар, ни юҡ — күрше белеп тора, арала бер сер ҙә юҡ. Шатлыҡ килһә, бергә һөйөнәләр, ҡайғыла тағы…

## II

Ғәтиәт Мәғҙән почтаһы мөдире вазифаһынан төшөрөлгәс, Әсләм килеп ултырҙы.

— Абзый, әйт әле: ҡотлоярҙарҙың бәләһе нимәлә? Ниңә улар тигеҙ ерҙә абына? Нишләп мине почтала оҙаҡ тотманылар, ә Зөлкәрнәй абзыйым…

— Төкөр шул бәлә юллауыңа, ҡотлоярҙар, ҡотлоярҙар, тип лаф ороуыңа! — Әсләм дә ҡыҙҙы. — Үҙеңде бел: нишләп эшләй алманың? Күпме артыңдан йөрөнөм…

— Абзый…

— Киләсәк тураһында уйла! Киленде ҡайтарып ебәрҙең…

— Абзый, Мәрҙәндә власты ҡабат ҡулға алырбыҙ микән? — Ғәтиәт еңеште, фәлсәфә һатты.

— Энем, власть әлегә беҙҙең ҡулда: ауыл советы, партком… Почта… Эх, һин, бешмәгән! Ауыҙыңа ҡаптырғанды…

— Мофассаловтар этләште…

— Ярай, ҡайҙа бараһың? Монтер бул да йөрө!

— Мин — Мофассаловтар батрагы түгел!

— Ҡайҙа бараһың? Тәк, почта, сельпо… Колхоз ҡала. Әйҙә, Зөлҡәрнәй абзыйыма барабыҙ! Ниндәй кәңәш бирер?

Зөлҡәрнәй менән һөйләшеү килеп сыҡманы.

— Бригадир? Башыңа тай типкәнме? Бригадирҙың эшен күҙ алдыңа килтерәһеңме? Үҙе көтөүсе, үҙе тәрбиәсе, үҙе начальник… Председатель булып эшләүҙән дә былайыраҡ! Председатель булып эшләгән кеше илгә етәкселек итә ала. Министр ҙа, директор ҙа, завхоз да була. Тик шул министр, шул завод директоры колхоз менән етәкселек итә алмаҫка мөмкин! Ә бригадир председатель дә, министр ҙа була ала! Хатта бөтә председателдәр ҙә бригадир була алмай!

— Абзый, ул саҡта Ғәтиәтте завферма итәйек! Ул заманында "Ҡоҙаса"ла…

Ағаһы әйтеп бөтөрөргә ирек бирмәне.

— Ә ниндәй завферма булды ул, Әсләм, шуны беләһеңме? — Зөлҡәрнәй урынынан тороп уҡ китте. — Артыңда түгел, алдыңда әйтәм: булдыҡһыҙ завферма булдың һин, энем, кешеләрҙе эшләтә белмәнең, бисәләрең иртән һауынға һуңлай, көтөүселәрең сәсеүлекте тапата! Арьяҡтан бирьяҡҡа сыҡҡансы һөтөң әсей!

— Һөттө был яҡҡа Сәйфелмөлөк ташыны…

— Ә завферма ни ҡарай? Ул — командир, Сәйфелмөлөк түгел, ул әсетә һөттө! — Зөлҡәрнәй күнмәне, һүҙенән кире дүнмәне, ҡустыларын тыңламаны ла.

— Почталағыса мәсхәрәгә ҡалырға йөрөйһөңмө, энем? Әҙерәк ҡотлоярҙарҙың бәсе, намыҫы тураһында уйла!

— Зөлҡәрнәй абзый, ә әтейем беҙгә икенсе төрлөрәк тылҡыны түгелме: "Мәрҙәндә власть дилбегәһен ҡулығыҙҙан ысҡындырмағыҙ"…

— Ай, шаҡай! — Зөлҡәрнәй көлдө. — Власты шулай тоталармы? Власть тотор өсөн, энем, аҡыл кәрәк, баш кәрәк, көнө-төнө эшләргә кәрәк. Ә уныһы һиндә — юҡ, Хоҙай бирмәгән! Завферма тигәс тә, елкәңдә — күпме мал, шуға һин башың менән яуап бирәһең, мал үлһә, кеҫәңдән сығарып түләйһең. Хәҙер ҡыш уртаһы, һыйыр һыуала, яҙға мал күтәртә башлаясаҡ… Былай башың һау, ҡолағың тыныс. Әсләм, һин дә ағай була бел — бушҡа ҡотортма Ғәтиәтте! Ана, сельсоветыңда ултыр, башҡаһына ҡыҫылма! Һалым жый, отчетыңды иплә — теймәҫкә тейеп, ҡыҫылмаҫҡа тығылып йөрөһәң, һиңә лә сират етер. Һүҙ сығып ҡуя: эсәһең дә икән, халыҡтан ялыу күп, Әбхалиҡ та беҙҙе өнәп бөтмәй — абай бул, итәгеңде жыйып йөрө! Ә, Ғәтиәт, һин ҡайт! Элекке эшеңде ҡабул итеп ал!

Туғандар партком секретары кабинетынан баштарын һәлендереп килеп сыкты. Икеһе лә туҡмалған кешене хәтерләтә ине. Мәрҙән урамдары буйлап аяҡтарын һөйрәп атлай ағай-энеләр.

## III

Һибәтов ҡыш буйы аҡ тунын һалмай. Ауырыңҡырай шул, ә күңел тигәнең ҡартаймай... Шулай ҙа ялан ҡул йөрөргә ярата — усын оҙон ең осона йәшереп, көмрәйеңкерәп баҫып, магазиндарҙы байҡай.

Туны һуғыш заманында уҡ һалдаттарға тип тегелгән... Һуғыштан һуң уларҙы хәрби келәттәрҙән сығарып халыҡҡа күпләп һаттылар. Шунда эләктереп ҡалғайны был шәп тунды. 1953 йылдар булғандыр. Нәҡ шул осорҙа сельпо рәйесе итеп һайланғайны. Шул ваҡыттан бирле — сауҙа өлкәһендә. Уйламаған ерҙән килеп ҡапты — үҙенә ярап төштө. Мәсәғүттә уҡытыусылар институтын тамамланы, шиғырҙар яҙҙы, ҡыҙҙар артынан сапты. Телгә шәп, тауышы көр — тап шундайҙар ҡыҙҙар күңелен биләй ҙә инде.

Ауылдың дан егеттәре менән ишкә-күш ине Һибәтов. Йәш саҡта Зөлҡәрнәй менән ҡушаға булды, аҙаҡ Камил менән дә ҡатышып алды. Бергә һунарға йөрөнөләр. Тәлғәт менән дә дуҫлашты Һибәтов. Тик был тарих хәҙер онотолоп та бөтөп бара. Тәлғәт китте лә юғалды. Миңзаданы күрһә, үткәндәр иҫенә төшә. Тәлғәт — Баныубикәнең еҙнәһе... Миңзада ла, Баныубикә лә, Нәҡиә лә хәҙер Һибәтовтың ҡулы аҫтында эшләй.

Баныубикә сиған бисәһеләй ҡатлы-ҡатлы кейенгән. Мейесе йүнләп йылытмайҙыр... Һүҙ ҙә шунан башланды.

— Сей утын ни, шыжлап-пыжлап тик ята... — һатыусы бармаҡтарына өрә. — Бирсәткә кейеп, шәкәр, ярма үлсәп булмай.

— Утынды кистән мейес араһына тултырығыҙ.

— Шулай итәбеҙ.

— Кеше нимә ала?

— Ҡарабойҙай һорайҙар...

— Ә араҡы?

— Араҡынан — төп выручка.

— Ә Нәҡиә килендәшең әйтә ине...

— Ул әйтер... Шәп булғас, араҡы һатырға бында күсһен, мин — ”Селмаг”ҡа!

— Нәҡиә ризалашһа, пожалыста.

— Ысынлап та!

— ”Селмаг”та планың тулмаһа...

— Һибәтов иптәш, күрерһегеҙ — мин...

— Баныубикә, һин хәтәр кеше... Һине сельпо башлығы итергә кәрәк!

— Кәрәк! — Баныубикә рәхәтләнеп көлдө. — Һеҙҙе — бында, мине — контораға!

”Продмаг”тан Һибәтовтың күңеле күтәрелеп сыҡты. Улар Баныубикә менән гел фекерҙәш булды. Һуңынан ул ”Продмаг”тан ”Селмаг”ҡа ла инде.

— Эштәр нисек, Нәҡиә?

— Товаровед Нәжипкә Сүлейә базаһынан простыня-покрывалдар апҡайт, тип күпме әйтәм — ҡымшанмай ҙа! Халыҡ мендәр тышы, клеенка-эскәтер дауайлай.

— Был айҙа планығыҙ туламы?

— Белмәйем, тауар ҡайтмағас, ул план ни менән тулыр икән? Баныубикәләр ише араҡы һатып тултырмаһаң... Беҙҙә кем план тултыра? Нәжибе лә Сүлейәнән араҡы тейәй ҙә ҡайта.

— Нәҡиә, әллә Баныубикә менән алмашаһығыҙмы: ул — "Селмаг"ҡа, һин — "Продмаг"ҡа!

— Шул ғына етмәгәйне! План тултырам тип... План нимә ул? План үтәйем, грамота алам, маҡталам тип... Ана, Баныубикә маҡталһын, грамота алһын!

Һибәтов бер ҡасан да Зөлҡәрнәй алдында ла, Әбхалиҡҡа ла баш эймәне, уйлағанын әйтте, теләгәнен ҡылды. Түрә бисәләре алдында ла ташлама яһай белмәне.

— Нәҡиә, беҙ эшләгән кешене күрәбеҙ, күтәрәбеҙ, Почет грамотаһын да бирәбеҙ...

— Ә мин эшләмәйемме? Мәғҙән сельпоһында бер Баныубикә генә эшләйме?

— Баныубикә, значит, шәберәк эшләй: халыҡты ылыҡтыра белә, эске резервтарҙы таба.

— Беҙ белмәйбеҙме? З-на-чит...

— Значит, шулай килеп сыға, Ҡотлоярова иптәш! — Һибәтов ары борғаланып торманы.

— Был сельпола бер Баныубикә генә, ул ғына!

— Ул ғына кеше менән яҡшы мөғәмәлә, магазины үҙенә тартып тора! Ә һеҙгә, Ҡотлоярова иптәш, керге килмәй, кеше һеҙҙе урап үтә. Һеҙ уларға артығыҙҙы ҡуйып тораһығыҙ!

— Кем әйтә? Кем башырышты? — Нәҡиә сығырынан сыҡты.

— Мин былай ҙа күреп торам. Сельпо председателе менән шулай һөйләшкәс...

— Мин нисек һөйләшәм?

— Һеҙ һөйләшмәйһегеҙ, ә аҡыраһығыҙ, кешенең ҡотон алаһығыҙ! Шуға халыҡ һеҙҙе урап үтә — һеҙ уларҙы өркөтөп, ҡоттарын алып бөткәнһегеҙ!

Һибәтов бүтәндәргә инеп торманы, барлау шуның менән осланды. Кәйефе ҡырылып, контораға керһә, төпкө яҡта Миңзада ултыра.

— Ни йомош? — тине башлыҡ ҡоро ғына.

— Ҡотлоярова Нәҡиәгә "Совет потребкооперацияһы отличнигы" исеме биреү мәсьәләһе менән ингәйнем... — Миңзада тотлоҡто, бите нығыраҡ буҙарҙы. Күренеп тора, тулҡынлана. — Райпотребсоюз беҙҙең сельпоға Совет потребкооперацияһы көнө айҡанлы ошо исемгә бер квота бүлә.

— Нишләп уны — Нәҡиә Ҡотлояроваға?..

— Нәҡиә апай ауыр эштә эшләй, өлкән һатыусы...

— Ә "Продмаг"та ауырыраҡ түгелме? Мин әле генә Нәҡиә Ҡотлояроваға шунда күсергә тәкдим яһаным, ул — теләмәй. Ниңә беҙ был исемде Баныубикә Ҡотлояроваға бирмәйбеҙ?

— Ҡотлояров Зөлҡәрнәй ағай ҙа шылтыратҡайны...

Һибәтов әлегәсә Зөлҡәрнәй Ҡотлояровты тоғро, һатмаç-һатылмаç коммунист тип һананы.

— Миңзада туғаным, беләһеңме, яҙ отличник исемен Баныубикә Ҡотлояроваға!

— Һибәтов ағай...

— Яҙ!

— Баныубикә Ҡотлоярова планын араҡы менән тултыра бит. Халыҡты эсереп...

— Эсерһен! Әле берәү ҙә араҡы һатыуҙы тыймаған! Бер сельпо ла, магазин да, совет хөкүмәте лә! Ул да араҡы һатып выручка эшләй, халыҡты эсереп араҡынан ғына табыш ала булып сығамы?

Сибәр бисә ишеткәнен түкмәй-сәсмәй әхирәтенә, тегеһе түрә иренә еткерәсәген белһә лә, Һибәтов шыртламаны. Ҡурҡыу күлдәге күптән туҙғайны.

## IV

Ғәтиәт ҡаңғырып йөрөнө-йөрөнө лә, эш юҡтан, ваҡыты күплектән бүгеп, Биләнгә сығып китте. Туғандар йәнә осрашты, фәлсәфә һатты. Ҡусты ағаһын ауыл хәлдәре менән таныштырҙы.

— Килмешәк Мәғҙәнгә баш булып алды, тиһең, ә Әсләм ауыл советы рәйесе түгелме?

— Рәйес тә ул, абзый… Хәҙер колхоздар көсәйҙе бит, МТС-тарҙы бөтөргәс, техника үҙҙәрендә, он, ашлыҡ, аҡса, һалам да уларҙа, ә ауыл советының ҡара айғырынан башҡа нимәһе бар?

— Шулай. — Камил да килеште.

— Күпкәк тә ауыл советы менән иҫәпләшмәй, райком уны яҡлай… Әсләм абзыйым: ”Хәҙер Әбхалиҡты ауыл советы сессияһына саҡыртыуы — бер бәлә”, — тип һөйләй.

— Һанлашмай маташа…

— Улай ғынамы, Зөлҡәрнәй абзыйым өсөн беҙгә, уның бар туғандарына, үс һаҡлай. Мәғҙәндә бөтә власты ҡулына төшөрә, ҡотлоярҙарҙы ҡыҫырыҡлай.

— Дә… — тип һуҙҙы Камил. — Райкомда таныштар ҙа юҡ, әйтеп китер инем.

— Зөлҡәрнәй абзыйым ғәйепле!

— Дә... Колхозға практикаға ҡайтҡанда бонитировканы йүнләп белмәгән көйө өйрәтә. Фән, сәсеү әйләнеше тураһында әйтһәң, ене туҙа. Үҙ фекереңде яҡлаһаң да, оҡшатмай. Ул кемде ярата? — Камил сырайын һытты, Ғәтиәт тынманы.

— Йәнәһе, туғандар уға ҡамасау, уның абруйын төшөрәләр. Хәҙер шуның гөрөсөн күрә.

— Ярай, Ғәтиәт… Юғарынан ҡолауы ла ҡыйыныраҡ.

— Абзыйымдың политикаһы буйынса ул — донъя кендеге, бар ғаләм уның тирәләй өйөрөлә, бөтә браттар уға хеҙмәт итә.

— Ғәтиәт…

— Кисә ул кем ине лә, бөгөн кем? ”Миңә трактор бир”, ”Миңә он яҙ, ағай”, ”Аҡса бөтөп китте, Зөлҡәрнәй…” — бөтәһе лә кәпәс һалып килә…

Көлөштөләр. Ҡотлоярҙар етди халыҡ, һирәк көләләр.

— Ҡарлыхандан ҡайтҡанда прицеп менән ауғанды хәтерләйһеңдер, абзый?

— Хәтерләмәй.

— Шунда абзыйыма ныҡ хәтер ҡалғайны. Браттар әжәлдән көскә ҡалды, ҡайтһаҡ, үҙебеҙҙе ғәйеплегә сығарып, эттән алып эткә һалып һүкте. Бөтә рәхмәте шул булды. Йәлләү ҙә, көйөү ҙә юҡ.

— Нисек ”әжәлдән ҡалдыҡ”?.. — Камил төпсөндө. — Мин ул ваҡытта институтта инем. Ә браттар тигәнең — кемдәр ул?

— Нейә, Зөлҡәрнәй абзыйым — Шиҙәле МТС-ында директор. Мәғҙәнгә ҡайтты ла браттарҙы жыйҙы: мин, Әсләм абзыйым, Хажиғәли абзыйым… Мәғҙән МТС-ынан, туғаным тип, Хажиғәлиҙе һораған… Йәнәһе, ул туғандары менән генә эш бөтөрә, Ҡарлыхандан ағас апҡайтыуын ауылға бик белдермәй! Эшен эшләткәндә, ярҙамға уға беҙ — браттары кәрәк…

Ҡарлыхандың юлдарын беләһең бит: тау менәһең дә тау төшәһең. ЗИС-ҡа өҫтәп, оҙон прицеп тағып алғанбыҙ. Беҙ Әсләм абзыйым менән нишләп шул прицеп өҫтөнә ултырып алғанбыҙҙыр, хәҙер ҙә шуға баш етмәй! ”Ҡоҙаса” фермаһына етәрәк Арылағастан төшөп киләбеҙ. Бейек арҡа бит ул! Бер заман прицеп ысҡынып китмәһенме!.. ЗИС үҙе алдан елә, ә беҙҙең прицеп — арттан… Прицеп менән машина уҙыша! Ҡот китте. Прицеп тәртәһе хәҙер ергә һөйрәлеп бара, алда берәй түмһәгә төртөлһә, түңкәрелә… Шулай булды ла: теге ергә ҡаҙалып, прицеп айҙанып та китте, беҙ Әсләм абзыйым менән икебеҙ ике яҡҡа осоҡ.

Ярай, прицеп аҫтында ҡалмағанбыҙ — икебеҙ ҙә имен. Хажиғәли абзыйым икенсе тау башына күтәрелгәндә прицебы юҡлығын шәйләп ҡала. Ул әйләнеп килгәндә беҙ аяғөҫтө инек инде.

— Дә… — тип һуҙҙы тағы Камил. Йөҙө ағарынып киткән.

— Эйе, абзый… шунда, ҡайтҡас, Зөлҡәрнәй абзыйым нимә ти? ”МТС-та әрләшәләр, прицепты әрәм иткәнһегеҙ! Алдығыҙҙы-артығыҙҙы ҡарамай йөрөйһөгөҙ! Эскәнһегеҙҙер?”, ти. Шулай игелекһеҙ ул! Күпме ярҙам итһәң дә, ул тип, үлә яҙһаң да, рәхмәт әйтә белмәй.

Камил һөйләгәнде һушы китеп тыңлап ултырҙы, ә Ғәтиәт артабан дауам итте.

— Ә Нәҡиә еңгәм? Ул шунда рәхмәт әйтте тип беләһеңме? Ҡарлыхан ағасынан лапаҫ бурап ҡуйҙылар. Текә баҫа, тарбағай мөгөҙлө болан шикелле түшен кирә. — Ғәтиәт еңгәһе булып атлап та күрһәтте.

— Ха-ха-ха… — Камил ғүмерендә беренсе ҡат ҡысҡырып көлдө. — Ғәтиәт, валлаһи, һин еңгәмдән үс алаһың! Теге өсөн… Бөттө, бөттө! Мунсаға, мунсаға!

…Юлы уңды был егеттең Биләндә. Бирәм тигән ҡолона, сығарып ҡуйған юлына: Рәйсә еңгәһе ишһеҙ егеткә, үҙ иткән ҡәйнешенә, күрше ҡыҙын димләп ташланы. Йылмы-йыл ярыммы тормошланып йәшәп ҡалған Әнүзә. Йоҡа һынлы, баҫалҡы. Уның да өнө-төнө сыҡмай, ауыҙынан һүҙен тартып алырға кәрәк. Гөлбәҙәрҙән бары буйға ҡайтышыраҡ булыр ҙа, өҫ-кейеме шау ҡыҙылдан булмаҫ. Кофтаһы түшен белендереп, юбкаһы нескә биленә һылашып торор.

— Ҡыҙҙарыңа биргеһеҙ әле ул, тик бәхете булманы. Аҡыллы бала, — тип маҡтап китте еңгә; шат ине, ҡәйнешен башлы-күҙле итергә ул да ниндәйҙер өлөш индерә бит — туған туғанға шундай мәлдә кәрәк. Рәйсә килен дә туғанды туған тип белә, ана, ҡайҙан-ҡайҙа ире туғандарын ҡайғыртып ята. — Әнүзәнең ире лә арыу ине, мотоциклы менән түңкәрелде…

Камил ағаһы ла хупланы. Эште ҡыҫҡа тоттолар биләндәр: боронғоса мулла саҡыртып, ижап уҡытып, бәләкәй генә ҡор йыйҙылар. Килештеләр ҙә ҡуйҙылар йәштәр — нисек тә йәшәргә кәрәк кешегә. Кеше ишле булырға тейеш, ҡоштар ҙа парлы була.

Ғәтиәт тә Әнүзәгә оҡшағандыр, күрәһең. Ғәҙәттә, ҡыҫҡа буйлылар һонторҙарға ҡараусан, уларҙы үҙҙәренең идеалы итеп күреүсән. Ғәтиәт шыма битле, ҡабарынҡы иренле. Артистарыңдан һис кәм түгел, өҫтәүенә, совхоз директорының туғаны. Раҫ, арыу нәҫел-нәсәптәндер, ата-әсәһе иплелер. Алма ағасынан алыҫ төшмәй. Камил Ҡотлояров Биләндә ҙур түрә, бөтәһе лә уның ауыҙына ҡарап тора. Шул кеше менән туғанлашыу зат-зәүергә лә уңай булмаҫмы?

Туғандар эште оҙаҡҡа һуҙманы: ижап мәжлесенән һуң кәләштең әйберен тейәнеләр ҙә йәштәрҙе Мәғҙәнгә оҙаттылар. Ҡыҙ яғы ла, егет яғы ла олонан ҡубып туй үткәреү хаҡында һүҙ ҡуҙғатманы. Килен дә, кейәү ҙә донъя күргән кешеләр. Ғәтиәт Биләнгә яңғыҙы киткәйне, Мәғҙәнгә ишле булып ҡайтып төштө. Йөҙө асылды, рухы нығынды, үҙ-үҙенә ышанысы артты. Хәҙер ул тауҙарҙы урынынан шыуҙырыр, урмандарҙы икенсе урынға күсереп ултыртыр!

Хәмиҙә ҡарсыҡ та, Әсләм менән Зөлҡәрнәй ағалары ла һөйөндө: ниһайәт, кесе ҡустылары башлы-күҙле булды, хәҙер кешесә үҙаллы донъя көтөп алып китер. Аҡылға ултырыр, ауырыраҡ булыр, инде лә бисә, вазифа алмаштырып йөҙәтмәҫ! Хәмиҙә ҡарсыҡ Рәйсә килененә рәхмәттәр уҡып туйманы: өҫтөнән оло йөк, өй тирәһе хәстәре төштө. Был килен дә тегеһе һымаҡ, тегеһенең игеҙәге кеүек. Был — тәҡдир билгеһе, маңлайға яҙылғаны.

Ағайҙар тағы шәбәйҙе: Әсләм менән Ғәтиәт тағы элеккене ҡыуҙы. Әүәлге көс-ғәйрәт ҡайтты, әүәлге дыуамаллыҡ йөрәкте солғап алды. Ҡабат Мәғҙәндә власть башында ҡотлоярҙар ултырырға тейешлеге хаҡында һүҙ ҡалҡып сыҡты.

Ише — йәш кәләше булғас, Ғәтиәт үҙен тағы ҡанатлы ҡоштай хис итте. Иргә ише көс бирә, уны рухлы, ҡанатлы итә шул.

Иртәгеһен теге сая бисә килде лә ҡотлоярҙарҙың бәхетле донъяһын — яңынан һипләп үргән ояһын туҙҙырып ташланы. Бер кем көтмәгән саҡта! Ғәтиәт — эштә, өйҙә — ҡәйнә менән килен генә. Икәү генә ҡотлоярҙар донъяһына ябырылған яуға ҡаршы баҫты.

Кис ир ҡайтһа, донъя боларған, ҡотлоярҙар йорто баштүбән... Ғәтиәт, эҫе мәлендә, тимерҙе ҡыҙыуында һуғырға тип, ҡабат өй баҫыусыны юллап китте. Был юлы ла икәү иргә ышанып ҡалды.

...Ишек асылыуы булды, ир түшенә тегенең ҡуныуы булды. Өҙәйолҡа, ҡайнар тыны менән бешерә.

Ир быуынһыҙ, теге өҙгөләй...

— Йәнем... — Ҡайнар бышылдай ирендәре, бармаҡтары дерелдәй. — Килдеңме? Көттөм, зарығып бөттөм!

Ир ҙә көнө буйы ҡаңғырып йөрөүен, ас ҡарын сабыулауын онотто, фермаһына ла, өйҙәгеләренә лә, өйҙәге мәхшәргә лә төкөрҙө, ҡаршыһында бары ул ғына... Әллә ниндәй әкиәт донъяһына тарыны, тағы ғүмерҙә татылмағандай тойолған ләззәт кисерҙе, йөрәге бер усына, бер табанына күсте — наҙ иркендә тибрәнде генә. Имеш, әкиәт иле ап-аҡ, алма ағасымы, муйылмы ҡотороп сәскә атҡан... Әллә ниндәй ят ил, болоттарғаса олғашҡан ағастар! Ул уларҙы бер һинд киноһында ла күргәйне.

Ир иҫһеҙ-һушһыҙ булды. Ихтыярын ҡабат һындырҙылар. Башы эйелде ғорурҙың. Тамам бирелде, хәс тә һабантуйҙа көрәш майҙанында салҡатан ята! Бейектә, бейектә — аҡһыл зәңгәрлек эсендә йәне осоп йөрөй, сырамыта. Һирәк селтәр болоттар ағылып үтә. Кем, кем уның

йәнен урлап ҡасты? Кәүҙәһен ер битенә һеңдереп киттеләр, ә үҙен ниңә ташланылар? Ағайҙары ниңә унан баш тартты? Әсәһенең дә йөҙө аҡһыл болоттар араһында юғала.

— Миңзада, әйберҙәрҙе ҡарға бәргәнһең...

— Уйымда ла юҡ ине... Ҡаңғырып, Ҡуянсыҡ урамына барып сыҡҡанмын! Ихатағыҙҙа — яҫтыҡ, мендәрҙәр! Утынлыҡта — ят әйберҙәр! Иҫемә төштө: Ғәтиәт яңынан өйләнгән, имеш, туғандары уға яңы кәләш тапҡан! Мейемә һуҡты: мәхшәр ҡуптарырға, әйберҙәрҙе ҡарға бутарға!..

— Тәҙрә яраһың...

— Ғәтиәт, үртәмә мине! Мин һин тип йән атам, ә һин... Ниңә ҡабат өйләнә һалдың?

— Миңзада...

— Ғәтиәт, һинең аҡылың бармы? Нишләп һин өйләнешеүгә еңел генә ҡарайһың, бисәләрҙе бирсәткә урынына алмаштыраһың... Һин — еңел кеше.

— Ағайымдар һиңә ҡаршы...

— Ҡаршы... — Сая асырғанды. — Ә һин, һин ни уйлайһың, ни ҡылаһың? Мин һиңә кем? Һөйәркәме? Мин һине көтәм, ә һин... Кәңәштөңәш итмәй. Почтаға мөдир булып барҙың, хәҙер — завферма... — Теге өҙлөктө. — Өс көндә! Ҡунаҡҡа барған ерҙән өйләнеп ҡайтаһың. Хәҙер мин дә үкенә башланым, ышанысым ҡаҡшаны: Ғәтиәт — ышаныс-һыҙ бәндә, уға таянғансы һыуға таян!

— Миңзада, мин — ике ут араһында, мин нишләргә белмәйем...

— Ғәтиәт, мин дә арыным. Йә һин никахлы бисәң менән йәшәйһең, йә мине алаһың. Һайла!

— Мин ике ҡайын араһында аҙаштым, Миңзада.

— Һайла! — Бисә буҫлығып илай башланы. Күңеленән был мөхәббәт тарихының аҙағы, беҙҙең һуңғы осрашыуыбыҙҙыр, тип юраны. — Раббым, ниңә мин бәхетһеҙ?

Ир урынынан ҡымшанманы, ише аяғөҫтө ине инде.

— Тор! Был хәл шулай оҙаҡ дауам итә алмай, һин дә икегә ярылып йәшәй алмаҫһың. Ниндәйҙер бер ҡәтғи ҡарарға килергә ваҡыт.

— Миңзада...

— Әйтмә! Бүтән бер һүҙеңә лә ышанмайым. — Сая һулышын тыйҙы. — Яҙмышым шулдыр.

— Миңзада, һин үҙең бит...

— Нимә? Һинең тормошоңдо боҙам, бисәләреңде өркөтөп, ауылдан ҡыуалап йөрөйөммө? Ғәфү ит, бүтән бынығы булмаҫ...

— Үҙең мине саҡыраһың, үҙең...

— Эйе, шундай гонаһым да бар, таныйым, әммә бел: бынан кире бынығына ла сик ҡуйырға тырышырмын. Ышан, төҙәлермен! Әлегәсә мин дә ике ҡайын араһында аҙаштым — йәнем урталайға ярыла: аҡылым тыя, йөрәгем һиңә тартыла. Бүтән улай итмәм, ант!

Ғәтиәт ләм-мим.

— Хәҙер һин һайлайһың, үҙеңдең дә, минең дә яҙмышты һин хәл итәһең! Бүтән кеше ирен һөйгөм, яттың бәхетен бүлешкем, көндәштең өлөшөн урлап, уртаҡ иткем килмәй! Бәхетем булһа, бөтөн булһын. Шулай килешәйек, Ғәтиәт.

Шулай айырылыштылар. Ир сараһыҙ көйө фуфайкаһына үрелде, хужабикә уны ары тотманы.

## V

Ғәтиәт фермаға ашыға. Эше ауыр, икенсе ауылдан Әй йылғаһы аша йөрөп эшләй. Һауынсылар сәғәт алтынан торһа, ул таң һарыһынан аяғөҫтө. Ул хәҙер генә оло ағаһы киҫәтеүен аңланы. Ферманы бик ауыр мәлдә ҡабул итте. Ҡыш уртаһы, аҙыҡ наҡыҫ. Һауым да төштө, ваҡ мал күтәртә башланы. Яңы быҙаулағаны ла аяныс: йә үлә, йә ҡала. Яҙға табан гел шулай була, тиҙәр. Быға яңы мөдир генә ғәйепләме? Һәр йыл шул хәл ҡабатлана. Быны ғәҙәти күренеш тип атаһаң да була, ә колхоз рәйесе Әбхалиҡҡа аңлатып булмай. Ул юғары һауым, фермала тәртип талап итеүҙән башҡаны белмәй, үҙенең бер ярҙамы юҡ тиерлек. Идара ултырыштарында ла Ғәтиәткә эләгеп тора: ҡара һыйыр бәләһе — аҡ һыйырға! Әбхалиҡ бер Ғәтиәт Ҡотлояровты белеп алды, теленән төшөрмәй. Ултырышта элеп ала, һелкеп һала, Ғәтиәткә таяҡтың иң йыуан башы төшә. Әбхалиҡ елкәнән төшмәй! Зөлҡәрнәй белеп киҫәткән туғанын. Миңзада ла хаҡлы... Әсләм ағаһы менән икеһе, ҡотлоярҙар уйын бойомға ашырабыҙ тип, ҡабат шул тырмаға баҫтылармы әллә? Хыялыйҙар хыяллана, аҡыллылар әҙерләй, ә авантюристар революция яһай. Үткенселәр шул боларыштың файҙаһын күрә, халыҡ ыҙа сигә, ә берәҙәккә иһә барыбер: ул ситтән тороп кәмит күҙәтә.

Ғәтиәт Биләндән яңы кәләш алып ҡайтҡас, ағайҙар тағы төп йортта осраштылар. Башта күршелә йәшәгән Зөлҡәрнәй инеп сыҡты. Килен күрергә була! Шунан атай нигеҙенә Әсләм һуғылды. Туғандар тағы ҡыҙҙы: Әбхалиҡты әрләнеләр. Ул ҡотлоярҙарға тын алырға мөрхәт бирмәй, уларҙы үрләтмәй! Ағай-эне тағы шәбәйҙе: Мәғҙәндә беҙ власты тоторға тейешбеҙ! Үҙ илебеҙҙә беҙ — солтан! Олтораҡ хәлендә йәшәргә ни...

Шунда яңы план тыуҙы: икенсе ҡабат Мәғҙән Бастилияһын ауларға! Ғәтиәт Ҡотлояров та урында ултырырға тейеш! Уның ише егеттәр ерҙә аунап ятмай — Ғәтиәт тә вазифалы урын биләһен!

— Ҡабат ”Коҙаса” фермаһы ҡаламы? — Ғәтиәт шып туҡтаны.

— Беләһеңме, энем... — тине Әсләм, һәр һүҙенә айырым мәғәнә һалып. — Әйҙә, үс итеп, тура Әбхалиҡтың үҙенә барабыҙ!

— Ә Зөлҡәрнәй абзыйым?..

— Ну, Ғәтиәт! — Әсләм йөҙөн йыйырҙы. — Һин абзыйымдың холҡон белмәйһеңме: гел көнсөл булды, туғандарын тирәһенә яҡын юллатманы. Хәҙер ҙә, партком булып алғайны... — Әсләм ҡустыһына эйелде. — Хәҙер Әбхалиҡ беҙҙе яҡлаясаҡ! Абзыйымдың ҡаршы булыуын әйтербеҙ — ул, абзыйыма үс итеп, һине күтәрер! Мин әйтте, тиерһең.

— Киттек! — Ғәтиәт аҫҡы иренен ныҕыраҡ ҡымтыны. — Бөткән баш бөткән, — тине Мәғҙән наполеоны, сәмләнеп. Уның, йәш баштың, әлбиттә, тағы бер бәхетен һынап ҡарағыһы килә, ярһыу йөрәге батырлыҡҡа атлығып тора ине.

Мәғҙән колхозының яңы рәйесе, ысынлап та, уларҙы ҡояштай балҡып ҡаршыланы. Әйтерһең дә, ҡотлоярҙар баш осонда ап-аяҙ күк бите асылды, улар юлдары уңырына инанды.

— Әйҙүк, Ҡотлояровтар! — тип ҡаршы алды түрә.

Халыҡ элекке колхоз рәйесе Зөлҡәрнәй Ҡотлояровты ҡаты ҡуллы, ағас телле булғаны өсөн яратманы. Зөлҡәрнәй командир колхозсылар менән ҡаты етәкселек итте: йәнәһе, уларҙы бер сафҡа теҙеп ҡуя ла бойороҡтарҙы яуҙыра, һәр береһенә эш йөкмәтеп, иңбаштарына күмгес аҫтырып, сөгөлдөр күмергә ебәрә. Баҫыуҙан да бер сафта, һалдаттарса дәртле совет йырҙарын йырлатып алып ҡайта... Ә Әбхалиҡ кеше менән йомшаҡ һөйләшә, йылмая, мең вәғәҙә яуҙыра. Кеше алдында бер төрлө һөйләй, артында икенсе төрлө эшләй. Хәҙер әүәлге заман түгел, колхозсыны бойороҡ һуғып ҡына эшләтермен, ҡол күреп егермен, тимә. Шуға колхозсылар яңы заман етәксеһе Әбхалиҡты башлыҡ итеп һайланы, иҫке заман түрәһе Зөлҡәрнәйҙән баш тартты.

Әбхалиҡ ҡотлоярҙар менән дә эс-бауырҙарына инерлек итеп һөйләште, гел ыңғай торҙо. Күңелдәре күтәрелеп, түбәләре күккә етеп сыҡты туғандар яңы башлыҡ кабинетынан.

— Ҡотлайым! — Әсләм ҡустыһы ҡулын ҡыҫты.

— Тағы ”Ҡоҙаса”...

— Бәхетең шунандыр...

Ғәтиәт ҡаушап та ҡуйҙы, тик сигенәһе ҡалмағайны.

Мәғҙән наполеондары Ҡуянсыҡ урамына табан атланы.

Яланда ел ҡотора. Кистән башлағайны. Ғәтиәт йәһәтерәк фермаға етергә ашҡына. Тураты ла тырыша, ауыҙлығын арҡыры сәйнәпсәйнәй.

Был яҡта аҡман-тоҡманды ”Насый бураны” тип йөрөтәләр. Имеш, Насый нәҡ шул буранда аҙашҡан. Ҡаңғырып йөрөгән-йөрөгән дә һаҙға сумған, ә буран тағы аҙна тирәһе тынмаған. Ер менән күк тоташа, донъя ҡар ҡойонона йотола. Насый бураны ҡупһа, кеше өйөнән сыҡмаҫҡа тырыша. Ә Ғәтиәт Ҡотлояров нисек өйөндә бикләнеп ултырһын? Һыйырҙар быҙаулай башланы. Уларға күҙ-ҡолаҡ кәрәк! Ғәтиәт иртүк бара, кис һуң ғына ҡайта. Башмаҡтар ҡураһы ла хөрт кенә — хан заманынан бирле йүнәтелгәне юҡ. Тишек-тошоҡтан ел өрә, тамсы йылы тормай. Башы ҡатты яңы мөдирҙең: ал-ялды онотто, рәтле йоҡо күргәне юҡ. Һарыҡ бәрәстәре ята ла үлә, быҙауҙар ауырый, Әбхалиҡ ”зыянды елкәңә күтәртәбеҙ”, тип туҡып тора. Көнөн-төнөн йүгергән Ғәтиәт зыянды үҙ кеҫәһенән түләргә тейеш!

Әйләнә-тирә ҡойон эсенә күмелде, турат та, ахыры, аҡрынайҙы. Әллә юлынан яҙҙымы? Аҙашып ҡына ҡуймағайы. Ферма мөдире атаһы ҡарттан ҡалған толопҡа нығыраҡ бөркәнде. Ул да тураттай иренен тешләй: күңелендә лә — ҡойон, был ҡойондарҙан ҡайҙа ғына ҡасып ҡотолорға? Бара ла бара. Ахыр юлдан тайпылғанын аңғарҙы, ә турат сер бирмәгән була. Әллә ҡайһы яҡҡа йөҙ тотто? Ҡаршыла кәртә түгелме? Һай, ауыл зыяраты лабаһа! Бөтөнләй кире яҡ.

Бригада йортонда әҙерәк йылынғас, тағы ҡуҙғалды. Уны тыйҙылар, ебәрмәҫ булып бөттөләр. Күңелендә лә — буран. Насый буранында аҙашһа ла, илап ҡалыр балаһы юҡ, берәү ҙә күҙ йәше түкмәҫ. Уңмаған бәндә булды. Ир азаматы донъяһына ла, яҙмышына ла ҡул һелтәгәндәй итте.

Һарысалар кирегә бөткән халыҡ. Ҡотлояровҡа йәйәү генә бар, тип өйрәтмәне. Үҙҙәре ”Ҡоҙаса”ға буранда урман ситләтеп кенә бара —

ағас һыртынан атлай ҙа атлай — бер юл. Хәйләне үҙҙәре беләәтеү, яттарҙан йәшерәләр. Мәғҙәндәрҙе яратмайҙармы? Күҙ йомоп, баш баҫып ултырып ҡалдылар тип тә булмай — тыйҙылар. Теге үҙе еңмешләнде. Насый буранына ҡаршы китте.

Әсә күңеле — балала, бала күңеле — далала. Был ваҡытта Хәмиҙә ҡарсыҡ Насый буранын йылы өйҙән генә күҙәтә, ләкин йәне тыныс түгел. Ә килене түрьяҡта мыштым йөрөп ята. Ҡыштыр-ҡыштыр, баяғынан бирле әллә нимәһен йыйыштыра.

Башта ҡарсыҡ ишетмәмешкә һалышты. Ул килендәренең береһен дә иркәләтмәне. Тегеләрҙе сөңкөлдәтмәне, өпәкәй-сөпәкәй итмәне. Бисәсәсә илай ҙа бөтә. Килен баҫылманы. Үҙ-үҙенә йәл ине ул. Кешеләр алдында һаман үҙенең ғәйебен аңлап бөтөрә алманы: ирҙән ҡалған бисә булһа ни! Ул айырылып йә ҡыуылып ҡайтмаған. Бәхете әллә тәүге кейәүе менән түңкәрелдеме? Быныһы һүҙ ҙә ҡушмай, өйҙә гел әсәһе менән кәңәшләшә, төндә генә йәнәшенә килеп ята. Хәҙер саҡ ҡына зиһене асылғандай итте: Ғәтиәт уға ят! Был асышы уны иҫәңгерәтте. Теге сая бисә бар донъяһын туҙҙырҙы: "Ғәтиәт мине ярата, ағалары көсләгәнгә генә һиңә өйләнде. Ҡайтып кит!" Күҙ алдары ҡараңғыланды, донъяһы баштүбән әйләнде. Ҡаялар онтала, болоттар ҡабара, елдәр ҡотора, хәтәр өндәр ҡолаҡ төбөндә яңғырап тора. Тормош аяуһыҙ битен асты, оят шаршауҙарын һыпырып ташланы: яп-яланғас булып ҡалды алдында. Ниһайәт, ысын хәлен аңланы, ят бисә хәлен төшөндөрөп бирҙе: ире уны яратмай, Әнүзә үҙе бында көсләшеп кенә тора! Тауыш сығармаҫҡа, ҡәйнәһенә ишеттермәҫкә! Һығыла, йәшенә буҫлыға. Ни эшләргә, ни генә ҡылып ҡарарға? Туғандары ҡайҙа, кейәүе сит, яҙмышы арҡыс-торҡос… Уны ҡабат яҙмыш ҡосағына аттылар. Берәүҙең дә эше юҡ. Күҙ төптәре шешенде, ирендәре күпсеп бөттө, тәне сәнсеште.

Килен өйрәнгән эшен белде, әле бер ҡарарға ла килә алманы: иртүк мал-тыуарҙы ашатты, мейескә яҡты — өйрәнелгән эш, күнегелгән донъя ағышы… Ул — килен, башын баҫа, был өйҙә бүтән хоҡуғы ла юҡ.

…Килен һандыҡ, карауатты шығырҙатты, ҡатыраҡ баҫты.

— Килен, тим, ятып тор, буран да баҫылмай. Шул күңелеңде уйнаталыр…

— Тышта — буран, эсемдә — дауыл!

— Нимә, килен?

— Ҡәйнәм, улығыҙ мине тиңһенмәй бит. Яратмай! — Килен йәш тулы күҙен ҡәйнәһенә төбәне. — Яратмағас, ниңә өйләнде икән? Һаман ҡарт егет булып йөрөр ине; теге бисәһе менән дә йүнләп йәшәмәгән…

— И-и, балаҡай, түҙгәнгә — түш, тиҙәр…

— Ә һөйәркәһе дөрөҫ ҡыуҙы мине, хаҡ киҫәтте.

— Ғәтиәт бер йомшарыр, ыңғайына килер. Мин дә…

— Ғәтиәт боҙ кеүек, уға теге бисәһе ҡәҙерле…

— Килен, Миңзадаға һыуыныр ул, фермала эше лә ауыр — шуға ла йөҙө ҡараялыр…

— Йәне теләгән — йылан ите ашаған, тиҙәр. Күрше Рәйсә апай ғына башымды ашаны, шуның һүҙенә алдандым: йәнәһе, Ғәтиәт — Камил ағайыңдың ҡаны… Аҡыллы, ихлас! Әйҙә, һөйәркәһенә өйләнһен, балаһы ла әҙер… Мин ҡыҫыр ҙа, шай.

— Мин дә, килен, көндәш менән йәшәнем. Ирем, балаң юҡ, тип, йәш бисә алды, күндем. Ҡарт үҙе һуғышҡа китте, ә көндәшем өйөмдән ҡыуҙы, түҙҙем… Түҙгәнгә — түш, килен, сабырлыҡтың төбө — һары алтын. Көндәшем тайҙы, ә мин түргә мендем, мәртәбәләргә ирештем. Шулай ул бисә яҙмышы: түҙгәнде генә яҡлай, сабырһыҙҙы тормош тапай.

— Ҡәйнәм, Ғәтиәттең күңеле — бүтәндә!

— Сеү, килен! Йүгәнен шыпырып ҡасҡан тай-тулаҡҡа оҡшама, уңмаçһың!

— Иртә уңмаған кис уңмаç, кис уңмаған һис уңмаç!

”Ҡалай, бынығының теле сиселгән”, тип уйлап алды ҡәйнә. Ҡарсыҡ үҙенекен уйланы, килен үҙенекен тылҡыны. Ҡәйнә үҙ һүҙенән ҡайтманы, килен ахыр, оло кешене аяп, тынды, ҡаршы әйтмәне. Икәү хәсрәтләнеп ултырҙы, ә тышта һаман Насый бураны тынманы, нығыраҡ ҡоторҙо.

Был ваҡытта өйҙәгеләрҙең хәле шундай ине, ә тыштағылар ыжғыр буранда йәндәрен баçа алдымы, барыр юлдарын таптымы, күңел аймылыштары ҡоллоғонан ҡотолдомо? Улар Хоҙай иркендәме хәҙер, әллә буран менән мәғәнәһеҙ был алышта үҙ йәндәрен үҙҙәре үк ҡыйырға ашҡынамы? Бәндә, ниңә һин үҙ-үҙеңә баш түгел? Аҡылыңдан хисең алда йөрөй. Һине ярһыуҙар бөтөрә, хистәрең яндыра, һин — йөрәк ҡоло, хыялый зат. Шағир. Хыялда ғына һин үҙеңде көслө, матур, батыр итеп тояһыңмы? Ерҙә бәхет юҡмы ул, әллә һин уны күрмәйһеңме? Ысын бәхет — танау осонда, ә һин — бер ҡатлы: алыçтағы ҡояш нығыраҡ йылыта төçлө… Буйың етмәгән бәхет тә һиммәтлерәк; әйҙә, алданып йәшә! Ерҙә — төçһөҙлөк, ғәҙәтилек, күктә генә мөғжизә, йондоҙҙар баҙлай, тип уйла!

## VI

Уны һаҙҙан барып таптылар: сана төбөндә бөгәрләнеп кенә ятҡан. Ҡайтҡас, Хәмиҙә ҡарсыҡ һүҙ башланы.

— Баш-күҙ алдың, уйланырға ла ваҡытың булғандыр, улым? — Ҡарсыҡ, ғәҙәтенсә, бер тубығын юғары сәнсеп, табанын яçтыҡҡа уҡ баçтырып ултырҙы. — Килендең күҙ йәше кипмәй ҙә…

— Уға ни булған?

— Туҡта, кеше әйткәнде лә тыңла! Әтү, һин генә хаҡ, ә бүтәндәр — нахаҡ, ҡатын-ҡыҙ — сепрәк баш, сәсе генә оҙон… Былай йәшәүең, улым, миңә оҡшамай. Һуҡыр түгелмен, күрәм: был килен баланы ла бер ҙә ек итмәйһең — һиңә тағы ни кәрәк? Килен ихлас, нисек ярарға белмәй, донъя көтөргә тырышып ята… Ә һин уны үҙеңә тиң күрмәйһең… Ул да берәүҙең ғәзизе, исем күтәреп, һиңә барған. Бисә бейәләйме — уны әйләнгән һайын алмаштырып торалармы? Ҡарт та: ”Котлоярҙар бисә айырмай”, — тиер ине.

— Мин Әнүзәне айырырға жыйынмайым!

— Һин айырмаһаң, ул ҡайтып китә… Көн дә жыйына, мин генә тотоп торам. Ҡарт көнөмдә көй табаммы, тиһәм… Тораһың да тегендә китәһең — Сатан ихатаһына сәсеп ҡуйғандармы?

— Мин бүтән унда аяҡ баçмаясаҡмын! Миңзада үҙе ҡыуҙы.

— Ул — иблис, һине сихырлаған. Бәхетеңде емерергә, донъяңды түңкәрергә итә. Мин иçән саҡта был тупһаны ашатламаç, шуны бел!

Уйы барып сыҡмаç! Әле был — минең донъям, ҡарт менән бөртөкләп жыйғанбыҙ.

Хәмиҙә ҡарсыҡ бер башлағас, ҡайтманы.

— Өй баçышып йөрөй, киленде ҡыуа — һинең арҡала шәбәйә. Хәләл бисәңде һанламағас…

— Инәй…

— Кеше кәзә бәрәсе түгел, йәрәшкәс, йәшә! Еләк кеүек, бер һүҙе юҡ. Үҙеңә лә шундайҙар осрап тора. Гөлбәҙәр кеүек, был да нимә алайым, нимә бирәйем, тип күҙеңә ҡарап тора.

Ҡарсыҡ өҙмәне лә ҡуйманы.

— Оят! Ул бисә — үтеп сыҡҡан, балаһы — абзыйыңдың бажаһынан! Тәлғәт, тиме? Әсләмгә — бажа, ә һиңә кем була? Ҡоҙа. Был — ҡоҙаңдың ҡалдығы! Алһа, шул ҡоҙа алыр ине. Арыу булһа… Һиңә ни етмәй, ҡасан аҡылыңа ултыраһың? Әйт!

Ғәтиәт бер һүҙ ҙә ҡата алманы, һаман бер нөктәгә төбәлеп ятыуын белде. Әсә һүҙҙәре уны ҡаҡ диуарға һырыҡтырғайны.

— Бел, кәнтәй менән рәхәт бите күрмәçһең, мин әйтте, тиерһең. Бәхиллегем дә, фатихам да юҡ. Әйҙә, инәй һүҙен ек күрмәһәң, ҡылан, йәнеңде иблискә һат! Әйҙә, ҡылан: инәйеңде ҡарт көнөндә ер олотоп, урам буйлатып сығарып ебәр! Зат та килешмәйәсәкмен, бер өйгә һыйышмаясаҡбыҙ! Йә ул, йә мин — һайла!

Уттар һүнде, хәрәкәт тынды, ваҡыт ағышы туҡтап ҡалды. Инде фанилыҡта бөтә нәмә ойоған һымаҡ тойолдо. Һулыштар өҙөлдө, аҡыл юйылды.

Шул уҡ хәл тағы бер нисә көндән идара ултырышында ҡабатланды. Көн тәртибендә — ”Ҡоҙаса” фермаһында мал ҡышлатыу торошо мәсьәләһе.

Зөлҡәрнәй Ҡотлояровтың күрәҙәлеге дөрөçкә сыҡты. Ул һүҙҙәр, ул киçәтеүҙәр, ҡыңғырау һымаҡ, һаман баш осонда яңғырап-зыңғырлап торҙо: ”Мин һиңә әйттем, хур ғына итерҙәр, бөтә ғәйепте башыңа япһарырҙар… Ҡыш, мал үлә — өçтөңә йөкмәтерҙәр… Үҙең ташлап ҡасырҙай булырһың… Әбхалиҡ ҡотлоярҙарҙан юрый көлә…”

— Беренсе кварталда ғына нисә баш мал?!. — Колхоз рәйесе ҡыҙҙы. — Был хәлгә, иптәштәр, ары түҙеп буламы?

Йыйылыусыларҙың тыны ла сыҡманы.

— Фермала — антисанитария; малсылар ҡасан теләй — шунда ҡайтып китә, тәртип тигәндең ”т” хәрефе лә юҡ! — Әбхалиҡ ҡоторҙо. — Ҡотлояров иптәште беҙ фермала эште юлға һалыр, йәш кеше тырышыр, тип ҡуйҙыҡ, ул үҙе лә етәкселектә эшләргә теләне… Дөрөçмө, Ҡотлояров иптәш?

— Дөрөç, — тине Ғәтиәт, тешен ҡыçып.

— Ауыл советы рәйесе Әсләм Ҡотлояров үҙе тәҡдим итте ненһен… — Әбхалиҡ дауам итте. — Эшләр, тине, йәш кеше, көсө ташып тора. Фермала һауым кәмене…

— Хәҙер һыйырҙар һыуала…

— Ә ниңә мал ятып үлә?

— Ҡуралар иçке, тишек-тошоҡ — үҙегеҙ күрҙегеҙ, үтәнән-үтә ел өрә. Жәйгеһен йүнләп ремонтланмаған! — Ғәтиәт аҡланды.

— Ҡара эт бәләһе — аҡ эткә! Ферма ҡышҡа әҙер булмаған, Ҡотлояров ғәйепле түгел килеп сығамы?

— Ғәйепле, тик…

— Һин миңә, Ғәтиәт ҡустым, шуны әйт: падежға нисек сик ҡуйырға? Беҙгә артабан нишләргә?

— Фермаға өҫтәп фураж бүлегеҙ, төнгө ҡарауылға тағы бер кешене өҫтәйек! Ул быҙауҙарға өйрәне күберәк бешерһен!

— Родильныйға, әйҙә, ике кеше өҫтә! Быҙауҙарҙан күҙ яҙҙырмағыҙ! Көнө-төнө янынан китмәгеҙ! Аҫтарын ҡоро тоторға кәрәк! Тағы кем ни әйтер?

Һөйләүсе күп булманы. Зоотехник та, инженер ҙа үҙенсә аҡланды.

— Фермала тәртип яғы ла аҡһай, тигән хәбәр булды. Быға ни тиерһегеҙ, Ҡотлояров? Ярай, ферма иҫке, тишек-тошоҡ та, ти, ә тәртип яғын ғына ҡайғыртып була бит. Үҙең эсәһеңме?

— Юҡ.

— Малсылар, һауынсылар?

— Юҡ.

Ултырыш һорау алыуға әйләнде, Ғәтиәт ғәрләнһә лә, түҙҙе. Бер килмешәк Ҡотлояр балаларын егеп эшләтә, усында бейетә. Ғәтиәт тә Мәғҙәндең яңы солтаны алдында, ана, аяғүрә… Шаҡайҙың шаҡайы! Бәләкәй генә булһа ла, түрә булырға атлыҡты.

Ферма мөдире башынан әллә нисә төрлө уй йүгерҙе. Кәмһенде, мәсхәрәләнде затлы нәҫел тармағы, сигенергә генә урын юҡ.

— Тәк, — тип ҡабатланы колхоз рәйесе, квартал йомғаҡтарын барлағас, — идараға шуны тәҡдим итәм: бер тиксегә Ғәтиәт Ҡотлояровты вазифаһында ҡалдырырға, дөрөҫө, иҫкәртеү яһарға! Ҡаршылар юҡмы?

Әлбиттә, берәү ҙә башлыҡҡа ҡаршы сыҡмай, бында берәүҙең һүҙе генә һүҙ, идара ултырышы тигәне лә рәйес суды ғына… Башлыҡ әйләнә-тирәһен һынсыл ҡараш менән байҡай: барыһы ла башын эйгән, идарала себен осҡаны ишетелерлек. Барыһы ла шымған, мине күрмәһендәр, тигәндәй баштарын эйгәндәр. Хөкөм итеүсе — түрҙә, язаға тарттырылыусы — билгеле. Хөкөм ҡаты булмаҡсы, хөкөмсө — рәхимһеҙ.

— Иптәштәр, тәүге кварталда килтерелгән зыянды ферма мөдире елкәһенә күтәртергә! Ҡаршылар юҡмы?

— Мин ҡаршы!

— Кем?

— Мин. — Ғәтиәт ҡалҡынды. — Малдарҙың зыянлауында, председатель иптәш, бер мин генә ғәйепле түгел. Зоотехник менән ветврач ни ҡараған? Улар, алыҫ тип, фермаға килеп урамай. Ветврач дарыуҙар бирһен, дауалаһын!

Малайҙарса килеп сыҡты. Ғәтиәт үҙе лә етди ҡыланмауын — ғәйебен бүтәндәргә япһарыуын аңлай ине. Ә ултырыштағылар рәйес яғына ауҙы: исем өсөн төнгө быҙау ҡараусыға ғына түләү һалдылар. Ғәтиәт Ҡотлояровтың эш хаҡының яртыһын тотоп ҡалырға ҡарар иттеләр. Йәш кешегә был үтә лә ҡаты яза һымаҡ тойолдо. Ғәтиәт Ҡотлояров быны Әбхалиҡтың нәҫел-нәсәбенә ҡаҙалыуы, юрый ҡотлоярҙарҙан үс алыуы тип ҡабул итте.

Ә өйҙә ваҡиғалар тағы ла нығыраҡ ҡуйырҙы. Тормош ирҙе ян-яҡтан килтереп һыҡты.

— Һөйәркәңдә йөрөйһөң — етте!

— Идара ултырышы булды... елкәгә йөкмәттеләр...
— Алдайһың! Мине төп башына ултыртаһың!
— Фермала эштәр мөшкөл...
— Яратмағас, ниңә урынымдан ҡуҙғаттың, әҙәм мәсхәрәһенә төшөрҙөң?
— Әнүзә...
— Һинең алдыңда ни ғәйебем бар ине? Йөҙөмдән көлдөң, тормошомдо боҙҙоң! — Теге эсендә йыйылғанды бер тынала бәреп әйтте. — Һөйәркәң булғас, унһыҙ йәшәй алмағас...
Был Гөлбәҙәр түгел, эсендәгеһен әйтмәй ҡалмаясаҡ.
— Эш тығыҙ, Әнүзә... Иғтибарым да етмәгәндер...
— Ихтирамың етмәне!
— Эш бит, Әнүзә...
— Һинең генә эш... Мин өйҙә ултырам шул, ә теге ҙур урында эшләй!
— Әнүзә, мин Миңзада менән араны өҙҙөм. Ул мине үҙе ҡыуҙы, тыңла! Үҙе миңә "тупһама бүтән баҫма" тине... Ышан, беҙ матур итеп йәшәп алып китербеҙ!
— Күп ышандым, күп алдандым.
— Әнүзә, мин өҙҙөм...
— Инәлеп, ялбарып йәшәгем килмәй! Кешене көсләп яраттырып булмай! Ниңә инәлеп йәшәргә, ирҙең муйынына аҫылынырға? Һөймәгәнгә һөйкәлмә, тиҙәр. Йәр тип ярҙан тарыма, тип тә әйтәләр.
— Әнүзә, үтенәм: тыңла! Мин бүтән Күльяҡҡа аяҡ баҫмайым!
— Хәҙер Биләнгә ниндәй йөҙ менән ҡайтам?
Килен күнмәне, киҫә генә бер ҡарарға ла килә алманы; көйһөҙ ир ҙә асырғанды, буш һүҙҙәрен ни менән нығытырға белмәне.
Һүҙҙәр, ысын-ялған ҡыңғырауҙар, баш осона эленгәндәр; өҙлөкһөҙ зыңлайҙар, тауыш ҡына алыштырмайҙар. Кем әйтә, һүҙҙәрҙең көсө бар, тип, кем тыңлай ул буш һүҙҙәрҙе? Барабан ҡаҡһалар ҙа, барыбер — ҡолаҡ ҡына тона, буш мискәне урам буйлап даңғыр-доңғор тәгәрәтһәләр ҙә, шул. Буш һүҙҙәр, буш ауаздар, буш донъя, буш күңелдәр... Йөрәк кенә тынмай, тибә, һыҡрай. Йөрәк башҡайҙарына ал ҡан һауа.

## БИШЕНСЕ БҮЛЕК

### I

Хәмиҙә хәтер дәфтәрен аҡтара. Ҡарты балаларының ҡайһыһын нығыраҡ яҡын күрҙе? Сабирйәндеме, Зөлҡәрнәйҙеме, әллә Әсләмдеме? Герман һуғышынан ҡайтҡас, тәүҙә Хәмиҙәне, аҙаҡ, уныһы түлһеҙ тип, Әлфирәне йәрәште. Германда ла бисәһе, балалары ҡалған, тип һөйләнеләр.
Әсләмде артынан һис ҡалдырманы. Атай менән уғлан — игеҙәктәр, малай — атайҙың шәүләһе... Ҡотлоярға һуйған да ҡаплаған: ҙур башлы, ялтас. Шул уҡ текә маңлай! Ҡарты танау аҫтында сыйырсыҡ ҡойроғолай төрткө мыйыҡ йөрөттө, ә Әсләм — юҡ.
Ҡотлояр әллә шул баланы йәлләп, үҙенсә ҡурсаланымы икән? Әлфирәһенән ҡалған бәпес ине бит Әсләм — ата менән әсә был хаҡта балаларға әйтеп торманы. Ҡарт, моғайын, көйәләнгәндер,

сабыйға йәтимлек тойҙормаҫҡа тырышҡандыр. Балалар әсәләре хаҡында дөрөҫөн белмәй үҫте — Хәмиҙә лә ир һүҙенән уҙманы. Бөтә был серҙәрҙе ҡарт үҙе менән ҡәбергә алып китте, Хәмиҙә ҡарсыҡ та шулай итер.

…Ҡарсыҡтың, Әнүзә килене лә ҡайтып киткәс, танауы төштө. Ашағаны аш, йоҡоһо йоҡо түгел, әйтерһең, килендәре был өйҙөң бар йәмен алып китте. Өй эсе көн дә йыйыштырыла ине. Килен тәҙрә төбөнә гөлдәр теҙә, бүлмә яҡтырып, түшәмдәр бейегәйеп китә. Ҡотлоярҙар нәҫеленең боронғо, ҡараңғы йорто йәмләнә. Гүйә, нисә йылдан һуң, яңынан йоҡоһонан уяна. Был йортҡа нисә килен төштө, шунан бирле нисә заман, нисә быуын алмашынды. Хәҙер, хәлһеҙ ҡанаттарын йыйған инә бөркөттәй, ҡарсыҡ тәҙрә төбөндә тынған. Ни уйлай, ни кисерә ул — Ҡуянсыҡ урамының иң оло кешеһе? Япа-яңғыҙы, балалары үҫтеләр ҙә, ояла ҡанат нығытҡан ҡошсоҡтарҙай, ҡайһы ҡайҙа таралышты. Ҡарсыҡ ҡалған ғүмерен ошо тәхетендә үткәрәсәк. Шул нигеҙҙе һыуытмаҫ, ни яҙһа ла, шунда күрер. Килендәре иш янына ҡуш ине, үҙенә алмаш булып ҡалыр хоҡуҡта инеләр.

Гөлбәҙәр килендең моңло ауазы ҡолаҡ осонда ғына, Әнүзә киленгә лә эҫенеп бөткәйне. Улар ҡарсыҡтың йән тыныслығын урланы. Ишетә, ауылда төрлө хәбәр йөрөй: теге алабарманды сельпо рәйесе Һибәтовҡа ла ҡушып һөйләйҙәр, ә Ғәтиәте үҙе ни уйлайҙыр, ни ҡылырға самалайҙыр? Өндәшһә: ”Инәй, уларҙы мин ҡыуманым, теге саҡта һин киҫәткәс, Әнүзә менән һөйләштем — үҙҙәренең йәшәгеһе килмәгәс, нишләйем?” — тип яуаплай. Хаҡ та кеүек.

Хәмиҙә ҡарсыҡ төрлөһөн уйлай. Балалар бергә йыйылһа, атай васыятын иҫләй, Мәғҙәндәге тәртиптәр тураһында сафсата һатырға керешә. Бигерәк тә Ғәтиәте туғарыла: имеш, ауылда власты ҡулыбыҙҙа тотабыҙмы? Йәнәһе, улар атай васыятына хыянат иткән, Әбхалиҡҡа бирешеп баралар. Хәмиҙә лә был хаҡта баш ватмай түгел. Ҡотлоярҙарҙың илдә солтан булып, кешегә аҡыл өйрәтеп, уларҙы көрәшкә күтәреп йөрөүенән ни фәтүә? Нәҫел ағасы эстән серей бит! Әгәр ғаиләләре тарҡалһа, уландар бисә йәрәшә, кәләш һайлай алмай йөрөһә… Ғәтиәт ике ҡат өйләнде, ике кәләше лә ташлап ҡасты. Ни мәғәнә ил дилбегәһен ҡулда тотоп, Мәғҙәнгә баш булыуҙа, әгәр ҙә үҙ өйөңдә тәртип урынлаштыра, үҙ ояңды ла үрә алмаһаң? Ғаиләне ҡайғыртыу — шул уҡ тоҡомдо нығытыу түгелме? Тәүҙә үҙ донъяң, үҙ ғаиләң имен булһын, шунан ғына ауыл, Мәғҙән иле хәлен тикшерергә мөмкин. Хәмиҙә ҡарсыҡ, бәлки, бөгөн ҡотлоярҙар заты өсөн иң яуаплы кешеләр? Ҡотлояр килендәре, бәлки, тотоп торалыр бөгөн нәҫел бәҫен? Ғәтиәт шуны аңламай. Ул ысынында ҡотлоярҙар нәҫелен дауам итеүсене, киләсәктә шул тоҡомдоң дилбегәһен ҡулына аласаҡ кешене һайлай.

Хәмиҙә ҡарсыҡ нәҫел тарихын барлай. Егерменсе йылдар урталарында Ҡотлоярҙы Мәғҙән волисполкомы башлығы итеп һайланылар, шул осорҙа уҡ ауылда артелдәр ойоша башлағайны, шәхси милекселекте бөтөрҙөләр. Аҙаҡ колхоздар төҙөлдө, бер-бер артлы балалары Ғәтиәт, Рәшиҙә, Мазһар тыуҙы, ҡарттың йәмәғәт эшенән башы сыҡманы, һуңғы һуғыш ҡупҡансы Ҡотлояр Мәғҙәндә власты ҡулында ныҡ тотто әле. Ә өйҙәге власть Хәмиҙә ҡулында ине, ҡотлоярҙарҙың төп йортондағы тәртиптәрҙе барыбер Хәмиҙә үҙе урынлаштырҙы.

...Ҡотлоярҙар ғаиләһендә оло һүҙе һүҙ, берәү ҙә атайға ҡаршы әйтмәй. Ҡотлоярҙың һәр әйткәне ҡаршылыҡһыҙ үтәлә — шуға ғаиләлә һәр кем үҙ урынын белә; был тәртипте Хәмиҙә лә ҡаты тота.

Ҡотлоярҙың үҙенең мир эшенән башы сыҡмай. Көн-төн идарала, колхоз йөгөн иңенә һалған. Йәненә яңы тормош ҡорабыҙ, яңыса йәшәй башлайбыҙ тигән уй инеп оялаған да — шуны ҡыуа. Шул ҡарт йөрәген ялҡынландыра. Өйҙә бөтә хәстәр — әсә, балалар елкәһендә. Балалар мал ҡарай, баҡса үҫтерә, кейек аулай, балыҡ ҡармаҡлай. Бөтәһе өйгә ҡайта, бөтә тапҡандары эшкә аша, тамаҡты йүнәтеүгә китә. Ә Ҡотлояр колхозынан нимә алып ҡайта? Колхоз үҙе бар тапҡан-таянғанын дәүләткә оҙатып тора. Коммунист шундай булырға, шулай эшләргә тейеш! Ил өсөн, социализм өсөн йәнен дә аямаясаҡ!

Ҡотлояр иртүк Әсләмде Әй төбәгенә тышалған атын алырға ебәрҙе. Идара конюхына ҡушһа ла була, әммә улы тик йөрөмәһен, урамда ел ҡыумаһын. Был еңел йомош әле: ҡайтҡанда һыбай ҡайтаһың. Был — Ҡотлоярҙың улын яҡын итеү, йәлләү билгеһе. Ә балаға нимә? Йәлләгән һайын йәлләтә, иркәләгән һайын иркәләтә.

Төш ауыша, малай илап ҡайта: аты юҡ. Ҡулындағы дуғаһын атып бәрмәһенме ярһыған атай малайға:

— Эт ялҡауы!

Ярай малай ҡаймығып өлгөрә, әләйһә дуға маңлайын яра ине.

— Турат тоттормай! — Малай сырылдап илай.

— Атаһы, ҡуй! — Хәмиҙәнең башы ҡайнап китә. Шул саҡта дуға тейһә, ата ятҡан улын йә үлтерә, йә имгәтә ине. Ҡанһыҙ. Хәмиҙә лә ауыҙын баҫты. Турат артынан Зөлҡәрнәй йүгерҙе...

Ҡарт бүтән улай ҡыланманы. Шулай ҙа, малайҙарына ҡаты ине, дилбегәне ҡыҫҡа тотто, тегеләрҙе ат урынына екте. Дөрөҫ эшләнеме икән? Эштән кеше үлмәй. Үлмәй, ә миктәмәйме? Балалар эшһөйәр булды, үҙ ғаиләләрен ҡорҙо. Хәмиҙә ҡарсыҡ барыбер, инә ҡаҙҙай, бөтәһен дә ҡанат аҫтына йыйып ултырмаясаҡ. Хәҙер Ғәтиәте генә ҡалды. Бауыр киҫәге. Шул бала әллә иркә, әллә уңмаған зат, әллә йомшаҡ бәндә булды: өйләнеп ҡыуандырмай. Ҡарсыҡтың уйы әйләнә лә шул улына килеп төртөлә. "Ғәтиәтем әллә баш таяуы ғына булдымы?" — тип әсенеп ҡуя. Ятҡан балаһы, төп йортта хужа урынында ҡалған ир — уңмаған кеше.

Хәмиҙә ҡарсыҡ йәненә толҡа тапмай. Тәүҙә килендәре өсөн һыҙланһа, хәҙер улы, үҙенең яңғыҙ көнө өсөн ҡайғырып ултыра. Башы эйелгән, ҡулбаштары һәленгән, танауы төшкән.

## II

Сельпо бухгалтерҙары көртлөктәргә оҡшаш. Улар ҙа шул конторяларында ултырып алалар ҙа күҙгә-башҡа күренмәйҙәр, көноҙоно, баш баҫып, счет төймәһе тарталар. Шуға биттәре, көн нурына күренмәгәс, ап-аҡ, ҡаштары емерек. Һүҙ ҡатһаң, йә ояларына яҡынлаһаң, екеренергә, тырт-мырт итергә тотоналар. Ә һатыусылар алсағыраҡ, улар — иркендә йөрөгән тауыҡтар, әтәстәре — сельпо рәйесе иһә күберәген шулар тирәһендә урала.

Экономист Миңзаданы ла Һибәтов хәҙер урап үтә, тегенең күҙҙәре менән осрашмаҫҡа мең сәбәп таба. Уның ҡарауы, экономист менән

”Селмаг” һатыусыһы Нәкиәнең араһы тағы яҡынайҙы. Тегеһе экономистың ҡайһы яғына сығып, ҡайҙан яйын табып алғандыр?

— Миңзада, ниңә балтаң һыуға төшкән кеүек йөрөйһөң? Мин шәп яңылыҡ килтерҙем…

— И-и… — Экономист ғәмһеҙ. — Ниндәй хәбәр?

— ”Ниндәй хәбәр” тип… — Нәкиә үпкәләгәндәй итте, эстән ”бындай һалҡынлыҡ ниндәй ирҙе лә өркөтөр”, тип уйланы. — Хәбәрҙең дә ниндәйе: Ғәтиәттең был бисәһе лә ҡайтып киткән…

— Ә-ә… — тине башта Миңзада, аҙаҡ ҡул ғына һелтәне.

— Һин нимә? — Нәкиәнең йәне көйҙө.

— Миңә барыбер, Ғәтиәтте ҡыуып ҡайтарҙым…

— Кит!

— Ысын! Мин уға ”бүтән тупһама баҫма, күҙемә күренмә”, тинем. Хәҙер ул баштүбән йөрөһә лә, миңә барыбер!

— Миңзада, һин мине аптыратаһың… — Нәкиәнең тыны ҡыҫылды. — Ғәтиәт бынамын тигән ир, ҡулынан килмәгән эше юҡ, завферма итеп үрләттеләр…

— Дояркалар батшаһы!

— Булһын. Эштең ояты юҡ. Ғәтиәт тә һин, тип өҙөлә…

— Нисек? — Миңзада аптыраған кеше булды.

— Шулай булмаһа, еләктәй кәләшен ҡайтарып ебәрмәҫ ине…

— Күрерһең, кире барып та алыр… Ир менән бисә иртән талаша, кисен яраша. Биләндәге еңгәһе лә ҡушылһа…

— Юҡ, Рәйсә, беләм, бүтән ҡыҫылмаҫ!

— Мин туйҙым унан, Нәкиә апай!

— Кем кәрәк һиңә?

— Берәү ҙә!

— Шулай йәшәйһеңме? Йәп-йәш, сибәр көйө ҡартаяһыңмы?

— Хоҙай ҡушһа…

— Шаҡай. Миңзада, ул һине ярата, быны күңелем менән тоям…

— Нәкиә апай, әйҙә, ул турала һөйләшмәйек.

— Шаҡай, ә нимә тураһында һөйләшәбеҙ? — Нәкиә кәмһенде.

— Һибәтовтың ”Баныубикә Ҡотлоярова исеменә документ тултырығыҙ”, тип ҡушыуын әйткәйнем бит әле…

— Әйткәйнең. Миңә биреләһе ”Совет потребкооперацияһы отличнигы” исемен Баныубикәгә бирергә тип, Һибәтовтың бойороҡ биреүен дә, һеҙҙең шул эште атҡарыуығыҙҙы ла әйткәйнең.

— Нәкиә апай, мин ғәйепле түгел бит… — Миңзада үпкәләне.

— Беләм, беләм, һинең остоҡ та ғәйебең юҡ!

— Мәскәүгә ебәргәйнек, Башпотребсоюздан шылтыраттылар: яуап килгән…

— Нисек?

— Баныубикә Ҡотлоярова — Совет потребкооперацияһы отличнигы!

— Уф, Алла, кинәндерҙең… — тип ләпелдәне Нәкиә. — Һибәтов тәки Баныубикә һөйәркәһенә исем таҡҡан икән! Ялыу ҙа яҙғайныҡ бит әле.

— Ул жалобабыҙ ҙа контораға килде, юғарынан бында, түбәнгә төшөргәндәр…

— Китсе!

— Ысын!

Әхирәттәр ҡайғырышты. Бынан һуң Нәҡиә Баныубикәне тағы ла нығыраҡ күрә алманы, һарыуы ҡайнаны килендәшенә.

Ә Миңзада менән араһы нығыраҡ яҡынайҙы. Ишкә ҡуш булдылар. Ишеккә — тотҡа, сапсағына күрә — ҡапҡасы... Миңзадаға ла әхирәтенең дошманы — дошман, көндәше — көндәш. Баныубикә — Тәлғәттең балдыҙы, Баныубикә — көндәше Раушанияның бер туған һеңлеһе!

Арала төйөн нығыраҡ сырмалды, әхирәттәр нығыраҡ берләште.

— Был икәү менән көрәштең бер генә әмәле ҡала, — тине Нәҡиә, оҙаҡ баш ватып йөрөгәс. — Һибәтовты урынынан осорорға! Һибәтов эсә, бисәләр менән сыуала...

Экономист та ризалашты.

— Һибәтовты төшөрәбеҙ ҙә, Миңзада, һине ултыртабыҙ!

— Юҡ!

— Һин — белгес, кооператив техникумын тамамлағанһың... — Нәҡиә шәбәйҙе, эшмәкәр ханымға әүерелде. — Мин Зөлҡәрнәй ағайың менән һөйләшәм...

— Һөйләш, Нәҡиә апай! — Миңзада ла хәҙер был фетнәне хупланы, әхирәте алдында Зөлҡәрнәй ағай тураһында гел яҡшы ғына итеп һөйләне.

Әхирәттәр үҙ-ара һүҙ ҡуйышты: икеһе ике яҡлап хәрәкәт итә!

— Һин, Миңзада, конторала ни булғанын хәбәр итеп тор, ә мин Зөлҡәрнәй ағайың аша эш итәм!

Әхирәттәр устарын ыуҙы, киләсәккә өмөт менән ҡараны. Нәҡиә ханым ире Зөлҡәрнәйҙең ғүмерҙә лә Һибәтов дуҫына ҡаршы бармаҫын белһә лә, шәп булып ҡыланды.

## III

Әсләм сәмле зат. Ғүмере буйы ағаһы ышығында булды. Зөлҡәрнәй — Мәғҙән МТС-ында директор, Әсләм — Мәғҙән ауыл советында секретарь, Зөлҡәрнәй — Мәғҙән колхозы рәйесе, Әсләм — Мәғҙән ауыл советы рәйесе. Бөтә кеше Зөлҡәрнәй Ҡотлояровҡа баш эйҙе, уны таныны, ә Әсләмде Зөлҡәрнәй Ҡотлояровтың туғаны тип кенә белделәр. Әсләмде ағаһы арҡаһында власть башында ултыра, тип һананылар. Әсләм быны һиҙеп-тойоп йөрөнө, кәмһенеп йәшәне — бер ни ҙә ҡыла алманы. Күнде, ҡаршы сыға алманы был ҡоллоҡҡа. Шулай йылдар уҙҙы, иң яҡшы тундары, офицер итектәре туҙҙы. Иллә мәгәр күңеле тынысланманы, күләгәлә ҡалыу һис йөрәгән йылытманы.

Ҡәнәғәтһеҙлек, май ҡатламы шикелле, йылдар буйы ҡалыная барҙы, шеш тулышты. Әсләмдең һәр ваҡыт ошо ҡоллоҡҡа, Зөлҡәрнәй ағаһының диктатураһына ҡаршы баш күтәргеһе килде. Бына әле әмәле тыуҙы түгелме? Хәҙер Зөлҡәрнәй Ҡотлояров колхоз башлығы ла түгел бит, башлыҡ — Әбхалиҡ, ә Зөлҡәрнәй — партком секретары ғына. Ғәтиәт ҡустыһын почта мөдире итеп ҡуйыу ошо диктатураға ҡаршы сығыуҙың тәүгеһе булһа, икенсеһе, ағаһы ихтыяры менән иҫәпләшмәй, Әбхалиҡ кабинетына барыу, кесе туғанын "Ҡоҙаса" фермаһы мөдире итеп тәғәйенләтеү ине. Әсләм дә Мәғҙәндә ҙур түрә, бер солтан, большевик Ҡотлояр ҡарттың улы бит! Ул да ниҙер хәл итә: ана, ҡустыһын кеше итте! Уның да башы йомро, ул ағаһына ҡарағанда ла атаһына нығыраҡ оҡшаған: шул уҡ текә маңлай, пеләш баш.

Әсләм бисәһе Баныубикәгә күңелһеҙ хәбәр еткерҙе.

— Был энекәшкә, ай-һай, бисә һайлап өлгөртөп булмай ҙа! Әнүзә килен дә ҡайтып киткән!

— Тағы шул Миңзадаһына йөрөй башлар микән Fәтиәт балдыҙ?

— Мин дә шунан ҡурҡам, Баныубикә, — тип уфтанды Әсләм.

Ир менән бисә икеһе лә бер төрлө уйлай ине. Икеһе лә ҡайғыра. Fәтиәттең йәп-йәш кәләше өҫтөнә шул сибәр бисәгә эйәләшеүе Баныубикәнең дә һарыуын ҡайната, сәменә тейә. Бигерәк тә апаһы өсөн кәмһенә. Гүйә, үҙ ире әүәл шул бисә менән йөрөгән, шул бисәнең хәләленән балаһы бар! Раушания апаһы дәрәжәле ханым. Уҡытыусы. Тәлғәт еҙнәһе лә билдәле кеше. Миңзада шул лайыҡлы кешеләрҙең йөҙөнән көлә.

Баныубикә әлегә хәтлем тыныс ҡына йәшәп ятҡан икән. Үҙ эшен белде, донъяһын көттө. Килендәше Нәҡиә өйҙә ятҡан еренән "Селмаг"ҡа урынлашҡас та, әллә ни үҙгәрмәне тормош ағымы: кем ҡайҙа эшләмәҫ! Ауылда бисә-сәсә өсөн арыу урын ни шул мәктәп тә колхоз бухгалтерияһы, магазин да сельпо конторaһы. Түрәләр ҡатындарын шунда урынлаштырырға тырышып ята. Баныубикә, ире ауыл советында эшләһә лә, магазинда һатыу итеүен үҙенең уңғанлығына, бөтмөрлөгөнә бәйләй: эшен белә, алдына алғанын гөл кеүек итеп ҡуя. Гел үҙ көсөнә таяна.

Әлегәсә тормошо шулай уң ғына барҙы. Бер аҙҙан килендәше ярыша башланы, пландарын айҙан-айға үтәп барыуына көнләште. Уның да алдынғы, маҡтаулы булғыһы килде. Килендәш булмаһа, Нәҡиә Баныубикәне белмәҫ тә, күрмәҫ тә ине.

Бәлә өҫтөнә — бәлә. Әллә ҡайҙан килеп сыҡты шул йылан аяғын киҫкән бисә, донъяһын түңкәрҙе. Бер Нәҡиә килендәше етмәгәйне Баныубикәгә... Билән килене лә ҡайтып киткән! Был хәл уны сығырынан сығарҙы, йән тыныслыҡтарын юйҙы. Артабан ни булыр? Fәтиәт ҡәйнеше шул бисәгә өйләнерме, ҡотлоярҙар араһына шул затты индерерме? Әгәр ысынлап та өйләнешеп ҡуйһалар? Әсләмдәр олонан ҡубып туй тип йөрөр, Баныубикә апаһының көндәшен килендәшем тип атар...

Шуларҙы күҙ алдына баҫтыра ла аҙарына Баныубикә. Хәтәр: апаһының көндәше туғанына әйләнә, уның ҡорона һыя, алдына килеп ултыра... Был мәсхәрәне ҡайһылай кисерергә? Баныубикә ғүмерҙә лә шундай хурлыҡҡа төшөрмөн, шундай әҙәм көлкөһөнә ҡалырмын тип уйламағайны. Шул бисә бухгалтерияла ултыра, йөҙөнә текәлә... Кем, ни өсөн шулай язалай уны? Хоҙай тәғәлә ҡайҙан шундай ҡаза ебәрҙе, Баныубикәнең ни ғәйебе бар? Миңзада шыйҡандаҡ артынан ул йөрөмәгән, ул уйнаш итмәгән! Ә язаһы — уға, ҡоһоро — уның башына. Әсләм дә ҡаршы.

— Кеше ҡалдығы бит ул! Fәтиәт энекәш нимә тапты икән шул бисәлә? Fәрлек! Буй тиһәң буй, һын тиһәң һын! — Әсләм үртәлде. — Тот та ҡыҙҙан йәрәш! Йәшә!

Баныубикә йоҡларға ятҡас та әйләнде-тулғанды, һис тынғы тапманы. Был яңылыҡ башына тимер таяҡ ҡына булды. Иртүк нисек тороп китә, эшен эшләй, бухгалтерияға инеп, тегенең йөҙөнә күтәрелеп ҡарай? Сыҙап ҡына йөрөй бит, түҙеп кенә. Берәй сыйыҡ сыҡһа, эсендәгеһен бөтә сығарып һалыр кеүек. Ике бисә әрләшеп китерҙәр. Ике көндәш,

ике буласаҡ килендәш! Конторала олоғара дау ҡубыр. Һыйыр тулаһа, аттан яман. Сәс-баштарына, үңәстәренә йәбешерҙәр... — шунда булыр тамаша. Ғәм халыҡ йыйылыр.

Өлкөндөнөкө артынан Билән килененең дә ҡайтып китеүе Мәғҙәндә дау сәбәбе булды. Бынан һуң был илдә — ҡотлоярҙарҙың төп йортонда ла, әсләмдәр өйөндә лә ваҡиғалар оторо ҡуйырҙы. Ә Ғәтиәт үҙе иһә һин дә мин йөрөп ятты, бер ни ҙә белмәмеш тә күрмәмеш булып ҡыланды.

## IV

Ҡотлоярҙар — ҡыҙыу баштар. Уларҙы ниндәйҙер тәҡдир йөрөтә, бер ярҙан икенсеһенә ташлай. Дыуамалдар, сәмселдәр, һис тына белмәйҙәр. Әллә ниндәй ут — йәндәрендә, бөтмәҫ-төкәнмәҫ ҡеүәт бар булмыштарында. Шул йөрәктәрендә бөтмәҫ дәрт булып ҡайнай, уттан алып һыуға ташлай, мәле-мәле вулкандай тышҡа урғыла ла аҙаҡ тотоп тыйғыһыҙ афәткә әүерелә.

Ферма дилбегәһе барыбер Ғәтиәт Ҡотлояров ҡулынан ысҡынды. Иркенлек тойған өркәк аты әллә ҡайҙа алып ҡасты. Күҙенә аҡ-ҡара күренмәй, урман шырлығынан елә генә, арбам ағас түшенә йәнселер, тимәй… Әлегәсә күсер нисек тере, арбаһы имен?

Һауынсылар Ҡотлояровты тыңламай, ә колхоз рәйесе яҡламай, ярҙам ҡулы һуҙмай. Идара ла, һөйләшеп ҡуйғандай, унан йөҙ сөйөрҙө, баш зоотехник та, баш ветврач та арты менән әйләнде.

Боҙҙары аҡтарылып, Әй һыуы ташҡас, бер арауыҡ ферма ла, Һарыса ауылы ла оло донъянан айырылып ҡала. Колхоз үҙәге Мәғҙән ҡаршыла ғына ла бит: һонолоп етерлек түгел, кисеп сығырға Әй форсат бирмәй. Шул арала ауыл да, ферма халҡы ла үҙ ыңғайына, үҙ ҡануны буйынса йәшәп ала: ҡырағай тәбиғәт төпкөлөндәге кешеләр ҙә ҡырағайлана. Идараның баш белгестәре лә килеп баҫмай аръяҡҡа, һөттө лә хәҙер Шиҙәле май заводына Әйҙең уң яҡ ярынан ташыйҙар. Кемгәлер — хөрриәт, кем өсөндөр ыҙалы мәл тыуа.

Ғәтиәт тә интекте: көнө-төнө саба, Мәғҙәнде онотто, аръяҡта ҡуна ята. Һыйырҙар быҙаулаған саҡ, һауым көндән-көн артырға тейеш — колхоз рәйесе Әбхалиҡ та телефон аша шуны туҡып тора. Телефон — хәҙер ике арала берҙән-бер бәйләнеш сараһы.

Ул көндө Әбхалиҡ "Ҡоҙаса" фермаһына киске һауынға килеп төштө, көтмәгәйнеләр. Хәйер, Әй ташҡанда фермаға берәү ҙә йөрөмәй, һауынсылар иркенләп ала: теләгәне бара һауынға, теләмәгәне юҡ. Ғәтиәт Ҡотлояровҡа һәр һауынды ойоштороуы — мең бәлә, ярай үҙе эсмәҫкә тырыша, һауын башланыр алдынан бисәләрҙе өй беренсә юллап, фермаға саҡырып йөрөй.

Был юлы ла ахмаллаға төштө, өйҙән-өйгә сапты, көтөүселәр күптән малды ҡураға япты, киске һауын әллә ҡасан осланырға тейеш ине. Һауынсылар араһында ла бер ҡәтғи ҡанун бар: бер-береһенең һыйырын һаумайҙар. Елене ташҡан мал аҡырып-баҡырып торһа тора, күрше һауынсыға барыбер — уның үҙ һыйыры күп, өлгөрә алмай. Ферма мөдире йә уға баш һалырға, йә теге ялҡау һауынсыны табып килтерергә мәжбүр — ике арала ярыла. Был киске һауын да яфа булды: мал баҡырыша, елене бушағаны яланға ынтыла, ә елене ташыуы, ер

тырнап, бар донъяға яр һала. Ҡасан, ҡасан килеп һауырҙар? Ҡасан еленен бушатырҙар?

Шул мәлдә Шиҙәле яғынан Әбхалиҡтың еңел машинаһы күренде. Ғәтиәт Ҡотлояров әле уны-быны шәйләмәне.

— Әбхалиҡ килә! Әбхалиҡ!

Был хәбәр бар ферманы тетрәтте. Колхозсылар Әбхалиҡтың кем икәнен белмәйме, ферма мөдире һаңғыраумы? Әбхалиҡ колхозсылар өсөн яу башлығы, фронт командующийы.

Уны таныманылар: ҡобараһы осҡан, төҫө ҡасҡан...

— План өҙөлә, Ҡотлояров!

— Беҙ...

— Һыйырҙарың, ана, һаман һауылмай тора!

— Һауынсылар...

Көтөүселәр ҡайһы ҡайҙа ҡасып бөттө. Башлыҡ ҡаршыһында, ялан арбаҙ уртаһында Ғәтиәт бер үҙе бағаналай ҡатты.

— Һауынсыларҙы жый!..

Ҡырҡ алла, илле мулла менән халыҡты йыйҙылар, колхоз рәйесе ҡыҫҡа ғына нотоҡ тотто, бөтә эскеселәрҙең, эшкә һуңлаусы һауынсыларҙың исемлеген алдылар... Әбхалиҡ бөтә халыҡ алдында Ҡотлояровты битәрләне.

— Эште ойоштора белмәйһең! Һауынсылар өйҙә ята, малдар баҡыра — һауын биш сәғәткә һуҙыла...

— Әбхалиҡ ағай!

— Эскеселәргә инәлеп йөрөйһөң, һауынсыларҙы һауынға ҡуша алмайһың! Үҙең дә эсәһеңдер...

— Ауыҙға алған юҡ.

— Улайһа, һин — башлыҡ түгел бында, һин — шул эскеселәрҙең малайы! Тәртип юҡ, ферманы тамам таркатканһың! Кем эскеселәрҙе эшкә саҡырып өй беренсә йөрөй? Һинең урынында мин сыбыртҡы менән жарыр инем, ә һин инәләһең, арттарынан йүгерәһең... Юҡ, һинән командир сыҡмай! Зөлҡәрнәй абзыйыңа, юҡ, оҡшамағанһың! Ул булһамы, биш минутта тәртип урынлаштырыр ине! Утҡа баҫтырыр ине бөтәгеҙҙе!

Ғәтиәт Ҡотлояровты иртәгәһенә үк вазифаһынан бушаттылар, Зөлҡәрнәйҙең күрәҙәлеге дөрөҫкә сыҡты. Инде кеше күҙенә күтәрелеп ҡарарлығы, ары вазифа, урынлы эш һорап йөрөрлөгө ҡалманы. Мәғҙән Наполеонының көнө шулай осланды, ҡояшы шулай байыны. Инде Ғәтиәт Ҡотлояров атай васыяты тураһында сафсата һатмаҫ, ҡотлоярҙар идеяһы хаҡында ауыҙ асмаҫ. Ул көн килде: баш тартығыҙ, ҡотлоярҙар, үҙегеҙҙең ялған идеяларығыҙҙан, буш хыялдарығыҙҙан! Зарарлы фекерҙәрегеҙҙе бынан кире башығыҙҙан сығарып ташлағыҙ! Мәғҙән иле дилбегәһе бөтөнләй ҡулығыҙҙан ысҡынып бара! Тәхеткә бүтәндәр үрмәләй, власты башҡалар яулап алырға яҫҡына!

## АЛТЫНСЫ БҮЛЕК

### I

Тағы май тыуҙы. Май — сәскәле ай, бөрөләр шартлап ярыла, тау битләүҙәре асыла, сиҙәмдәр йәшәрә... Алмағастар шау сәскәгә күмеләм-

күмеләм, тип ултыра, һомғол муйылдар инде тотоштан аҡҡа төрөнгән — хәс тә туйға биҙәнгән кәләштәр… Үҙҙәренең биленән һығып тот та ҡосаҡла. Баштарың әйләнеп китер, табаның ерҙән айырылыр…

Ташҡындар ҡайтҡан, Әй — аҫау айғыр ҙа тынысланған, ярҙарына ҡайтып, ауыҙлығын кейгән; бары, тир күбектәре төҫлө, унда-һанда ала-сола булып ҡар, боҙ киҫәктәре, ағас, ҡыуаҡ төпһәләре һерәйешә, һыу юлын бүлеп, күбекләндереп ята. Әй шул тупһалар тирәһендә өйөрөлә-өйөрөлә лә асыуланып юлын ары дауам итә. Ә төбәктә иркен хәҙер: унда-бында ваҡ-ваҡ күләүектәр генә йәйрәй, аяҡ аҫты көндән-көн нығыраҡ һурыта, ҡаҙаяҡ үләндәр көнләп түгел, сәғәтләп күперә — ят та тәгәрә, күңелдәреӊ булғансы ауна шул бәрхәт өҫтөндә. Әйҙә, салҡан ятып, күк битен оҙаҡ-оҙаҡ күҙәт, күккә күтәрел дә күтәрел, күктең етенсе ҡатына етеп, аяҡтарыңды һәлендереп ултыр! Әйҙә, кешем, иркен итеп һула, күкрәгеңде кир — тыуған яҡ һауаһы шифа, тәнгә дауа. Һиндә йәшәгән заттар бәхетлелер ул, бала саҡтан күҙ өйрәнгән киңлектәрҙә ғүмер һөрә, ә ситтә йонсоғандары һине һағынып, бер күреүҙәргә зар-интизар була.

Тыуған яҡ һәр бәндәне үҙенә тарта. Ул — һинең ҡараштарыңда, уйҙарыңда... Күкрәк киреп ҡомһоҙланып һулыш алаһың, ҡоластарыңды йәйеп, иңдәрҙе ҡосмаҡсы булаһың. Тыуған яҡ киңлектәре ҡараштарҙы иркәләй, йәнде тибрәтә. Был ил, был Мәғҙән донъяһы — һинеке; һин уны күреп күнеккәнһең, шул ерҙең йәме ҡаныңа һеңгән. Шул илдә генә йәнең тынуслана, маҡсаттарыңа ирешһәң дә, шунда ғына ирешәсәкһең… Хәйер, бында бөтәһе лә үҙеңдеке. Берәү ҙә һине ят итмәй, бер хафа ла өркөтмәй. Бында хатта әллә ниндәй даншөһрәттәрҙең дә ҡәҙере юҡ — шул ил бар, ә ҡалғаны — ҡояш баҙлауығы…

Был ерҙә күп быуындар йәшәп киткән, был Әй төбәгендә һиңә саҡлы ла йөрөгәндәр… Йәнә терелә, йәнләнә был төбәк: ҡаҙҙар тубы, йылҡы көтөүе пәйҙә, оҙаҡламай ауыл көтөүе лә сығыр — бөтәһе лә тәү ҡат һымаҡ. Бөрөләр ярылһын, сәскәгә тумалаҡланһын гөл тажы, тағы ҡоштар һайраһын талда — юҡ, юҡ, йәшәү һүнмәһен был илдә, тереклек яңынан терелһен, кеше лә бирешмәһен!

Ғәтиәт Ҡотлояров, эшенән ҡыуылғас, өйөндә ҡаңғырып ятты-ятты ла Биҙәртау битләүенә күтәрелде, Әй буйҙарын ҡыҙырҙы. Аяҡтар үҙҙәренән-үҙҙәре шул төбәккә, йәшлек эҙҙәре ҡалған ерҙәргә тарта, күңеле болоҡһоу. Әкәмәт: ул үҙенә Күльяҡ урамына баҫмаҫҡа, уның ҡапҡаһын ҡаҡмаҫҡа, тип бер һүҙ биргәйне бит. Хатта, аҙмышына төкөрөп, ғүмерен Насый буранында үҙе ҡыйырға ла етешкәйне… Ҡотолор ине хаталарынан, икеләнеүҙәренән, ике ут араһында ҡалып, ике ҡайын араһында аҙашыуынан! Ниңә уға был шыҡһыҙ көн, уңмаған донъя? Мөхәббәттән уңманы, бисә йәрәшеп, әсәһен, ағаларын ҡыуандырманы. Әллә нимә юлланы, әллә кемде көттө данлы ҡотлоярҙар затының имгәге? Олуғ нәҫел йөҙөнә ҡара яҡты — тоҡом данын, юҡ, арттырманы. Мөһабәт олондоң тоҡос ботағы! Имгәнгән һабаҡты, тоҡос ботаҡты, олон ҡороманын өсөн, ҡырҡып ташлайҙар!

Ғәтиәттең оло маҡсаты бар ине: ҡотлоярҙарҙың үткәне менән ғорурланды, атай васыятын онотманы… Ҡотлоярҙар данын арттырғыһы, атаһы васыятын тотоп, власть тотоп йәшәгеһе килде Мәғҙәндә… Хәҙер шул хыялынан да айырҙылар, атай васыяты хаҡында һөйләүҙән

тыйҙылар — уның хыял илен емерҙеләр, ауыҙына, теленә, әкиәтенә йоҙаҡ һалдылар. Ғәтиәт Ҡотлояров инде нишләргә тейеш? Ҡотлоярҙар маҡсаты хаҡында фәлсәфә лә һата алмаймы? Үҙе теләктәренә ирешә алманы, нисәмә эштән ҡыуылды... Ул атай иркен үтәргә яраҡһыҙ зат булып сығамы? Хәҙер кемгә таянырға? Кемгә барып баш төртөргә? Ары ниндәй идеялар, теләктәр менән йәшәргә? Кем уны үҙ итә, көтә, кемгә хәжәте бар уның был донъяла? Ағайҙарының үҙ донъяһы... Әсәһе уға үҙе кәләш һайлай, ә Ғәтиәт һайлаған ҡәһәр ителә.

Эңерҙә ҡарт егеткә иғтибар итеүсе лә булманы; ул үҙе лә бер кемде лә күргеһе, бер кем менән дә ҡатышҡыһы килмәне. Күнмәҫкә, күҙгә эленмәҫкә, күҙгә күренмәҫ йәнгә йә шәүләгә әүерелергә лә Мәғҙән буйлап йөрөргә!

Миңзада ла уны көтөп кенә торған: елбәҙәк ҡыҙый сәстәрен тағатып ебәргән, йоҡа ғына күлдәксән... Ябай ҡыҙ бала. Әсе телле лә түгел, ыҡҡа ла килеп тора. Ҡарт егетте — берәҙәк затты күреү менән һөйөндө. Төбәккә төштөләр. Иҫәрҙәр, хыялыйҙар, кеше ышандырып, йәш-елкенсәктең күҙен ҡыҙҙырып етәкләшеп алған булдылар — килештерәләр. Тиләләр, яҙ еткәнен, муйыл сәскә атҡанын көтөп торғандар, шуның хуш еҫенә иҫергәндәр.

Яҙ йәмдәре, яҙ еҫтәре күкрәккә тула, дәртте ҡуҙғата. Йөрәктәре ашҡыныулы, күҙҙәре осҡонло... Күңел әллә ҡайҙа елкенә? Әйтерһең, былар дүрт-биш йәшкә йәшәргән, үпкәләр онотолған, хәтәр һынауҙар ҙа булмаған — ергә ҡабат яҙ әйләнеп ҡайтты, йәштәрҙе ҡабат төбәк үҙенә саҡырҙы. Ниңә шулай танһыҡ икән был күрешеү, йәндәр бер-береһенә тартылып тора. Улар етәкләшеп алған да Әй төбәген буйлай. Әй өнһөҙ, шаһитлыҡ ҡылмай. Был төбәк, билгеле, күптәрҙең серен йәшергән — тынын да сығармай. Барыһы ла иҫтә, һәммәһе лә булды бит ошо төбәктә. Бындағы түңгәктәр ҙә сер һаҡлай белә — барыһы ла төбәк хәтерендә.

Ғәтиәт менән Миңзада үҙҙәренең әүәлге эҙҙәрен табырға, мөхәббәт тарихын ҡабатларға йөрьәт иттеләрме әллә? Тағы кем алдында яуап тоторға, кемдән рөхсәт һорарға тейештәр? Арала ниндәй шаршау тартылған, һулыштар тыйылған, һүҙҙәр ойоған? Ҡайһы тәңгәлдән тотоп башларға ул мөхәббәт хикәйәһен, ҡайҙан ялғап алып китергә? Ниндәй әмәл-сәбәптәрен табырға? Әллә улар ел ҡыуыусылармы, үткән яраларҙы ҡуптарып ҡанатырға ғына йыйындылармы?

— Ары тынғы тапмағас, килдем, ғәфү ит...

— Кәрәкмәй, Ғәтиәт... — Теге ҡулын ғына бирә.

— Ошо көндәрҙә әллә нимә уйлап бөттөм... Мин — булдыҡһыҙ!

— Ҡуй!

— Ҡулымдан бер эш килмәй, бисә менән дә йәшәй алманым...

Туғандары ла унан төңөлдө, буғай: әсәһе саҡырып та, Камил ағаһы ҡунаҡҡа ҡайтманы. Зөлҡәрнәй ағаһы ла хәҙер уны күрмәй, белмәй. ”Һиңә шул төҫ” тип тантана итәлер. Ә Әсләм ағаһы...

— Ағайымдар ҙа ҡул һелтәне...

Билән киленен ҡайтарып ебәргәс, Әсләм дә энеһенән өмөт өҙгәндер? Ә әсәһе... Ул нисек өҙгөләнә!

— Ә инәйең?..

— Һөйләшмәй. Хатта бер өй эсендә ултырыуы хәтәр.

Эйе, хәҙер Ғәтиәттең өйҙән сығып ҡасҡыһы ғына килә. Гүйә, эт менән бесәйҙе бер ситлеккә япҡандар, йөҙмә-йөҙ ҡалдырғандар, маңлайға-маңлай сәкәштергәндәр.

— Һин хужа — төп йортта!

— Мин — тинтәк...

Бер эшкә яраҡһыҙ бәндә! Төп йортта хужа ла, ҡотлоярҙар эшен дауам итеүсе лә була алманы, Әсләм ағаһы биргән дилбегәне тота алманы.

— Ғәтиәт!

— Мин...

Ир башына ҡайҙа барырға, кемгә барып баш төртөргә? Эше лә юҡ, ашы ла...

— Мине бөтә ерҙән ҡыуалар, Миңзада... Һин дә ҡыу!

Тик бында Әй төбәгендә әр юҡ, бында йәбер, талаш-тартыш булмай, хатта үпкә лә белдермәйҙәр.

— Ғәтиәт, мин һине бөртөк тә әрләмәйем!

— Мин барыбер ғәйепле. Был тормошта буталып бөттөм, үҙ юлымды, маҡсаттарымды, тәғәйен шөғөлөмдө тапманым, һине лә күп алданым...

— Ғәтиәт...

— Әйҙә, теләһәң нишләт: ҡыуһаң, ҡыу...

— Ғәтиәт, мин һине яратам! — Теге йәшенә быуыла, оҙаҡ, оҙаҡ тыйыла алмай.

— Һин элек мине ҡыуа инең, күрә алмай ҙа башланың... Юҡ, мин аңламайым, башым буталды...

— Ғәтиәт, ғәфү ит: мин оҙаҡ уйландым...

— Нимә хаҡында?

— Икебеҙ хаҡында, Ғәтиәт, икебеҙҙең киләсәгебеҙ хаҡында.

Ише яуап ҡайтара алманы, теле әйләнмәне. Ә күпме һүҙҙәр тел осонда ғына ине: "Мин дә үҙемде тыйып та, киҫәтеп тә ҡараным — көсөм етмәне. Һине онотоорға теләнем, үҙ-үҙемә һинең хаҡта уйламаҫҡа һүҙ бирҙем, туғандарым алдында тәүбә иттем".

— Ғәтиәт...

— Миңзада...

Күктәр ҙә ишетте был ауаздарҙы, урмандар ҙа, алыҫтағы тау сусаҡтары ла һиҫкәнде; төбәк тә, ҡаялар ҙа кире ҡаҡлыҡтырҙы ул өндө: "Ғәтиәт" — "Миңзада"...

"Ғәтиәт" тип шыбырҙаны үләндәр, "Миңзада" тип яуап ҡайтарҙы тулҡындар; шул ауаздарҙы елдәр ары таратты, алыҫ-алыҫ тарафтарға алып китте. Хәҙер был өндәр Әй төбәгенең мөхәббәт билдәһенә, был илаһи төндөң үҙ пороленә әйләнде: "Миңзада" — "Ғәтиәт"...

## II

Ғәтиәт был көндәрҙә үҙен ер менән күк араһындағылай хис итте, аяғы ҡатыны тойманы, донъяһына ла ҡул һелтәне... Хәҙер, эшенән дә яҙғас, бисәһе ташлап киткәс ни, йолҡош хәлендә, әсәһе һөйләшмәй — шулай улым тәүбәгә килер, тип уйлаймы икән? Әллә унан бөтөнләй төңөлгән, өмөтөн өҙөп ваз кискәнме? Был балаһы, ниһайәт, аҡылға ултырырмы, тормошта үҙ юлын табырмы?

Тәүбәгә килде, ти, Ғәтиәт, аҡылға ултырҙы, ти... Үҙ ыңғайына йөрөп ятты, хәҙер Миңзада менән аралары ҡабат көйләнгәс, үкенмәне, киләсәген уйламаны, һис тә выждан ғазабы кисермәне. Хыялый кешеләй йөрөнө, ер менән күк араһында ҡаңғырҙы, эйе, иҫерек кешеләй йәшәне. Бер ни уйламаны, ҡайғырманы, бер нимәгә аптыраманы.

Хәмиҙә ҡарсыҡ, улым тамам ҡулдан ысҡынды, юлдан яҙҙы, нисә бисә йәрәшеп тә тормағас, тормошо уңманы, яңғыҙы ҡартайыр бахыр, тип уйланы, ә Ғәтиәттең көнө, төнө бергә ҡушылды, баштүбән тигәндәй йөрөнө, ысыны менән әкиәте буталды.

Улар аҡылдарын юйҙы, йәш-елкенсәк кеүек көн дә осрашты; сабый балаларҙай кеше күҙе алдында ла етәкләшеп йөрөнөләр — аптырамаһылар. Тағы әүәлге иҫәр көндәр тыуҙы, ауылда хәбәр ҡуйырҙы. Уларҙың ҡайһы берҙәре Хәмиҙә ҡарсыҡ менән Әсләмдәрҙең дә ҡолағына барып һуғыла ине — тиләләр уйлап та бирмәне. Ауылда: "Ғәтиәт өс бисә алды, Миңзада һәр береһен ҡыуалап ҡайтара торҙо...", "Ғәтиәт бар кәләштәренән дә Миңзаданы өҫтөн күрҙе, өсәүҙе алып айырһа ла, Миңзаданы ташламаны", "Миңзада Ғәтиәтте сихырлаған икән, Ғәтиәт өстө алыр, биш кәләш йәрәшер — барыбер Миңзадаһынан айырылмаҫ", тип һөйләнеләр.

Йүләрҙәр төкөрҙө ауыл ғәйбәттәренә: ҡолаҡтары ҡатҡан, күҙҙәре тонған... улар төнөн йондоҙҙарҙы, көндөҙ Ҡуянсыҡ менән Күльяҡ урамдары араһын ғына сырамыта, бер-береһен әллә ҡайҙан таба, әллә ниндәй кәртәләрҙе аша атлай. Ҡабат әүәлге замандар ҡайтты: ике һаҡаллы сабый мөхәббәттән иҫергән, йәш-елкенсәк кеүек эҫенешкән! Сама ла, сик тә юҡ уларға! Хаттиндарҙан ашҡан ҡыланыштары: бер ғашиҡ йәрҙәр кеүектәр, бер ир менән бисә сүрәтендәләр.

Йөрәк тибештәре бергә ҡушылғас, һулыштары ҡатышҡас, күктәр ҙә бәүелә, был төбәк тә айҡала-сайҡала, офоҡтар ҙа иңкәйеп-иңкәйеп киткәндәй:

— Йәнем!

— Иркәм!

Төнгө елдәр был ауаздарҙы отоп ала ла ары илтә. Бәхетлеләр бер-береһенә һыйына. Шулай рәхәт, еңел шул йәндәренә: әйтерһең дә, донъялары урынына ултырҙы, йөрәк тибештәре баҫылды; әйтерһең дә, бар ерҙә һиллек урынлашты, ғәрәсәттәр баҫылды, дау бөттө. Ғашиҡтар тәндәрен тоймай ине инде, йәшел сиҙәмдә — бәрхәт түшәктә шундай йомшаҡ тойолдо, шундай наҙ татынылар. Бүтән йомшағыраҡ, затлыраҡ түшәк ерҙә юҡтыр, бында илаһи һарайҙарындың да хәжәте юҡтыр — баш осонда зәңгәр сатыр, биҙәк һымаҡ йондоҙҙар эленгән көмбәҙенә. Әй төбәге — ғашиҡтар иле...

— Мин һине мәктәптә уҡығанда уҡ күҙәттем...

— Белмәйем!

— Күпме һине онотorға тырышып ҡараным...

— Әллә нисә ҡат бисә алдың...

— Ә Миңзифа хәҙер ҡайҙа ул, әйт әле!

— Сәйфетдине менән ситкә китеп олаҡты...

— Миңзада, мин Миңзифала ла һине күрҙем бит...

— Беҙ — игеҙәктәр!

— Миңзада... Миңзифа...

— Ярай, йәнем, был үткән тарих... Киләсәк хаҡында һөйләшәйек!

— Әйҙә!

— Әсләм ағайың беҙгә ҡаршы буласаҡ... — Миңзада мәлендә теүешле һүҙен ҡыҫтырып ҡалырға ашыҡты — оҫта бисә.

— Әсләм абзыйым ҡаршы...

— Инәйең дә күнмәҫ...

— Ул да ҡаршы...

— Бөтә ағайыңдар ҙа ҡаршы! — Миңзаданың күҙҙәре күсәренән ысҡына. — Һин дә тишек кәмәгә ултыртһаң...

Ғәтиәттең ауыҙы йомолдо.

— Өйләнешмәйенсә, бүтән һинең менән аулаҡта осрашмайым! Инәйемдәрҙән дә оят, күрше-күлән күҙәтеп тора...

— Яҙылышабыҙ! — Ғәтиәт өҙөп әйтте. — Ауыл советында — Әсләм абзыйым...

— Ул зат та ризалашмаҫ!

— Шулай, — тип килеште Ғәтиәт.

— Тик беҙ — совет граждандары, үҙ иркебеҙ менән...

— Әсләм абзыйым барыбер ыҡҡа килмәйәсәк.

— Ул саҡта... — Миңзада башын эшләтте. — Ул саҡта... — Миңзада әле генә Нәкиә әхирәте менән кәңәшләшеү кәрәклеген аңланы.

— Миңзада, беҙ барыбер өйләнешәсәкбеҙ!

— Нисек? — Миңзада өҙмәне лә ҡуйманы.

— Абзыйымдың елкәһенән алам... — Ғәтиәт сүкештәй устарын йомарланы, ише рәхәтләнеп көлдө. — Мин барыбер абзыйымды ҡайырам...

— Ә инәйеңде...

— Уны ла!

— Ә Зөлҡәрнәй абзыйыңды? Камил абзыйыңды?

— Уларҙы ла! Бөтәһен дә, бөтәһен дә! — Ғәтиәт сытырайҙы, ише төбәкте яңғыратып көлдө. Төн уртаһында был алйоттар төбәкте шаңҡытты.

Төн заманында икәү әйлән-бәйлән өйөрөлдөләр. Эй ирмәк, эй күңелле ине. Ғәтиәт ҡомһоҙланды, тегеһе лә ҡасҡан була; ҡосаҡҡа бер эләкһә, түгелә, бөтә һыны көлә, бөтә булмышы кинәнә. Ир — йүләр, усынан ишенең түштәре туптай ысҡына...

Еләҫ елдәр маңлайҙарынан ҡыйып үбә, сәстәрен тарай; төн шаршауы ят күҙҙәрҙән аралай, наҙлап иркәләй, биләүенә һала сабыйҙарын. Серен сисмәҫ, яттарға еткермәҫ төбәк, мөхәббәт һандығына йәшерер был тарихты ла, күҙ тейҙермәҫ. Төбәк йәйрәй, ҡосағына нығыраҡ һыйындыра хыялыйҙарын — бары уның биләүендә генә йән тыныслыҡтары таба был иҫәүәндәр.

"Ғәтиәт", "Миңзада" тип ҡабатлай күктәр, урмандар, "Ғәтиәт", "Миңзада" тип яуап ҡайтара тау сусаҡтары.

## III

Ғәтиәт әллә нисә тапҡыр Әсләм ағаһы менән һөйләште, ауыл советына ла барып ураны. Ағаһына уйҙарының етди булыуын иҫбатларға тырышты.

Әсләм иһә көлкөгә һабыштыра ла ҡуя йә ҡыҙып-туҙып китә. Ғәтиәт һуңғыһында үҙ ҡулы һәм Миңзада ҡулы менән яҙылған ғариза тотоп барҙы.

— Ғәтиәт, ниңә теләһә кемдең ҡалдығына ымһынаһың, бөткәнме һиңә йүнле бисә?
— Мин уны яратам, абзый…
— Шаҡай. Мин дә беренсе бисәмә, яратам тип, өйләнгәйнем, ә Миңзада ищу Тәлғәт бажаның… Шунан балаһы ла бар. Шул баланы ҡарап ултыраһыңмы?
— Ҡарайым!
— Мәсхәрә! — Әсләм киң ҡайышын төҙәткеләне. — Еләк кеүеген табабыҙ…
— Кәрәкмәй!
— Инәйем ни ти?
— Ул ни… — Ғәтиәт ыҡ-мыҡ итте.
— Инәйем дә риза түгел… Башыңды эшләт, энекәш: инәйем шул балаңды ҡараймы?
— Абзый!
— Ғәтиәт…
— Мин нишләргә тейеш хәҙер? — Ғәтиәт үрһәләнде. — Эшемдән ҡыуылдым, үҙ донъямды ҡора алмайым, Миңзадаға һеҙ ҡаршы…
— Ҡаршы! — Әсләм өҙә әйтте. — Инәйем дә, мин дә, Зөлҡәрнәй абзыйым да ҡаршы! Бар, ҡайт!
— Ә ғариза?
— Ҡайҙа? — Әсләм ғаризаны йыртып ташланы.
— Аб-зый! — Ғәтиәт ағаһына ташланды.
— Ғә-ти-әт!
…Миңзада ла ни эшләргә белмәне, Нәҡиә әхирәте лә йүнле кәңәш бирмәне.
— Совет власы бер Мәғҙән ауыл советы менән генә бөтмәгәндер әле — райсоветҡа барығыҙ! Ул ниндәй закон, ти — йәштәрҙе ҡушмайҙар, яңы ғаиләнең юлына арҡыры төшәләр!
Миңзада ла һүҙ тапманы.
— Ул Әсләм балдыҙ шаҡай ҙа инде — ғаризаны йыртып ташлай! Башы икеме икән? Әгәр өҫтә белһәләр, урынында ике көн дә тотмайҙар бит. — Нәҡиә ханым да осондо, әхирәте өсөн ныҡ көйҙө, борсолдо.
Миңзаданың тегенең һалпы яғына һалам ҡыҫтырырға башы етте.
— И Нәҡиә апай, әлдә һин аңлайһың хәлемде! Һеҙ — мине берҙәнбер яҡлаусы кеше…
— Мин, Миңзада, Зөлҡәрнәй менән үҙем һөйләшермен…
— Рәхмәт.
— Ул минең һүҙҙән сыҡмаҫ. Бергә-бергә килендәштәр булып йәшәргә яҙһын! — Нәҡиә балҡыны. Миңзада, килешеп, баш ҡаҡты.
Нәҡиә ханым аптыраманы, мәсьәләне еңел генә хәл итте:
— Әйтәм дә, райсоветҡа йә район ЗАГС-ына барығыҙ! Унда эшегеҙҙе һә тигәнсе көйләрҙәр!
Ғәтиәт иһә был тәҡдимдән сат баш тартты.
— Мин райсоветҡа барһам, абзыйымды үҙ ҡулым менән эшенән алам…
— Ни эшләйбеҙ?
— Көтәйек. Тәүҙә инәйем менән һөйләшәм…
— Ул килешмәйәсәк!
— Тукта! Инәйем ризалашһа, никахһыҙ ғына йәшәп алырбыҙ ҙа китербеҙ.

— Мин никахһыҙ һеҙгә баҫмаясаҡмын, Ғәтиәт!
— Нисек?
— Шулай! Кешенән оят, күрше-күлән ни тиер, ата-әсәйем дә күнмәҫ! Шунан, никахһыҙ ҡыланһаҡ, беҙҙе айырыуы тағы ла еңелерәк булыр. Ул саҡта беҙҙе мәңгегә айырырҙар!
— Миңзада!
— Шулай! — Сая сигенмәне.
— Аңла: хәҙер мин абзыйым өҫтөнән йөрөһәм, уны үҙ ҡулдарым менән властан төшөргән булып сығам... — Ғәтиәт уртын тешләне, уйындағыһын әйтеп кенә бөтөрмәне. Был — атаһы васыятына, ҡотлоярҙар эшенә хыянат буласағын да, аҙаҡ был хурлыҡты бер ни менән дә юйып булмаясағын да аңлай ине ул.
...Ғәтиәт, Ҡуянсыҡ тыҡрығында Зөлҡәрнәй ағаһын осратҡас, ҡыуанып китте. Зөлҡәрнәй иң оло ағаһы бит, ул ниндәй кәңәш бирер? Ул күпте күргән, һуғышты үткән — ул ни әйтер?
Ғәтиәт ағаһының өйөнә лә инергә тип йыйынғайны, тағы теге ваҡыттағыны, еңгәһенең ғауға күтәреүен иҫләп, тыйылды. Әле уңай тура килде. Хәҙер туғандар тыҡрыҡта булһа ла осрашып аңлаша.
— Абзый... — Ғәтиәт тотлоға-тотлоға хәлен һөйләп бирҙе. — Абзый, мин хәҙер ни эшләйем? Инәйем ҡаршы...
— Ниңә, шул балалы ҡатынға ҡапланмаһаң, Мәғҙәндә ҡыҙҙар бөткәнме? Биләндеке...
— Абзый, мин Миңзаданы яратам...
— Яратаһың... — Зөлҡәрнәй оҙон торна муйынын һондо, ҡустыһы яғына ҡайырылып ҡына ҡараны, ә кәүҙәһен борманы. Ул былай ҙа туғанына ҡабырғаһы менән баҫҡайны... Нисек баҫҡан — шулай ҡатҡан.
— Әсләм абзыйым да ҡаршы... Ғариза апарғайным...
— Әсләм менән үҙең һөйләш! — Зөлҡәрнәй кире һуҡты.
Зөлҡәрнәй шулай тине лә, ҡустыһының тағы ниҙер әйтергә тамшаныуын күрһә лә, тоҡтарланмай ары атланы. Ғәтиәт тыҡрыҡ буйында, асҡан ауыҙын ябырға онотоп, һаман ҡаңғырып торҙо әле. Зөлҡәрнәй сираттағы был мәсьәләне лә еңел хәл итте. Утты-һыуҙы кискән кеше. Үлемдең йөҙөнә ҡарап барған. Ҡан күргән, үҙе лә күп ҡан ҡойған... Нисә ҡат әжәл менән күҙмә-күҙ текләшкән... Уға бисә йәрәшеү — сүп кенә шул! Кешеләр ваҡланды, юҡ-һаҡ нәмәнән эш уйлап таба! Бында, тыныс көндә, өҫтөңә танк ажғырып килмәй, орудиелар елкәңә снаряд, мина, шрапнель яуҙырмай. Донъя имен, ап-аяҙ көн; тыныслыҡтың ҡәҙерен белмәй. Ә бисә-сәсә эше — ул ваҡ нәмә!
Ғәтиәт тә өлкән ағаһының тел төбөн аңлағандай: егет кеше, ебеп төшмә, шундай ваҡ мәсьәлә менән баш ватма ла! Тотҡан ерҙән һындыр! Күп һайланған — һаҙға батҡан, Ғәтиәт, һин дә күп һайландың.
...Тәҙрәнән Зөлҡәрнәй улын Хәмиҙә ҡарсыҡ та күҙәтеп ултырған икән. Ул тышҡа тексәйеп ялҡып та китә: быуындары тала, күҙе һыҙлай. Әле, тороп китәм тиһә, урамда Зөлҡәрнәй пәйҙә. Зөлҡәрнәй нәҡ Әлфирәнең һыңары: йоҡа оҙон буйлы, текә маңлайлы, ҡаҙ муйынлы. Башын да әсәһе һымаҡ ҡыйышыраҡ һала, хәс тә ата ҡаҙ кеүек тирәйүнен байҡап бара. Зөлҡәрнәй шап-шоп баҫа — алабарман, кеше фекере, күрше-күлән уйы менән иҫәпләшмәй. Бисәләр уның тура-

һында ни һөйләһә лә, сүп, кеше ни тиһә лә, төкөрә. Әсәһе мәрхүмә лә шулай шырҙыуан ине.

Зөлҡәрнәй тирә-яғындағы бер нәмәгә лә иҫе китмәй, туп-тура баҫып уҙа ла китә төп йорт ҡаршыһынан. Ул әллә йәнһеҙ бер бәндәме икән? Тыуған йорто, атай нигеҙе тураһында уйламаймы? Шул йортта, үгәй булһа ла, әсәһе — Хәмиҙә ҡарсыҡ йәшәп ята; кереп хәлен белһә, һөйләшеп ултырһа... Шунан уҡаһы ҡойолор, бер ере кителеп төшөр инеме? Үҙе лә ҡартаймам тиме икән? Хәмиҙә ҡарсыҡ үпкәһен йәшермәй, йәне оҙаҡ-оҙаҡ әрнеп тора. Ул шулай Зөлҡәрнәйҙе көн дә иртән эшкә оҙата, ә кисен ҡаршы ала. Тәҙрәһе тәҙрәгә терәлеп тора бит, йорто урам аша ғына. Юҡ, Зөлҡәрнәй — таш йөрәк. Хәмиҙә ҡарсыҡ бөтәһен дә иҫләй. Зөлҡәрнәйҙең бала сағы ла күҙ алдында ғына. Ул Ҡотлояр балаларын үҙенекенә, үгәйгә айырҙымы? Барыһына тигеҙ ҡараны, эйе, тигеҙ... Тағы, Зөлҡәрнәйҙең берәй үпкәһе бармы икән? Хәмиҙә ҡарсыҡ хәтерен барлай, хәтер йомғағынан бер еп осон тартып сығармаҡсы була. Әллә Зөлҡәрнәйҙе бер рәнйеттеме? Ғәйеп үҙендәме? Ултыра-ултыра хәтәр шөбһәләргә тарый. Әлфирә көндәше тапһа ла, ул балаларҙы Хәмиҙә ҡарап үҫтергән дә! Һуғыш йылдарында уларҙы үлтермәй алып ҡалған. Ә Һаҙый ҡәйнеше менән Миңдеямал килендәшенең, ана, ике ғәзизе бер көндө ятып үлде. Аслыҡтан шешенделәр ҙә, эстәре күпте...

— Инәй!

— Ә, һинме? Ҡайҙа олағып йөрөйһөң?

— Магазин яғына барҙым, тыҡрыҡта Зөлҡәрнәй абзыйымды осраттым. Һөйләшеп торҙоҡ.

— Әле генә арҡыры баҫып үтеп бара ине шул.

Ғәтиәт һүҙен нисек тә башлай, фекерен ялғай алмай ғазапланды.

— Зөлҡәрнәй абзыйым менән ни... Миңзада тураһында һөйләштек...

— Тағы шул — бер сүбәкте сәйнәйһең! Абзыйың нимә ти?

— Үҙегеҙ ҡарағыҙ, ти.

— Ана бит!

— Инәй, мин уны яратам, тыңла...

— Юҡ, юҡ, әйтмә лә, һөйләмә лә — шул бисураны яҡын да юллатаһым юҡ! — Ҡарсыҡ ныҡ ҡаялай торҙо.

— Инәй, мин унһыҙ йәшәй алмайым! Нисә бисә алып ҡараным... — Ғәтиәт асырғанды.

— Кемдең яҫтығы?! Уйнаштан...

— Ин-нәй!.. — Ғәтиәт сәсәне.

— Ул һине сихырлаған, улым...

— Инәй, һин минең әҙәмсә йәшәүемде, үҙ тормошомдо ҡороуымды теләмәйһеңме? Һин, һин... үҙ балаңа ҡаршы!

— Улым, ул — уйнаш, ул кемдәрҙең ҡалдығы... Тәлғәт ҡоҙа беҙгә, Әсләм абзыйыңдың...

— Булһын! Миңә барыбер! Ин-нәй, мин барыбер унһыҙ тынныслана алмаясаҡмын... — Ғәтиәт өҙгөләнде.

— Улым...

— Инәй, һин ҡанһыҙ кеше! — Ғәтиәт ырғып торҙо, күҙендә хәтәр осҡондар баҙлап китте. — Һин — таш йөрәк, таш заты! Һин үҙ улыңдың бәхетенә ҡаршы...

— Ғәтиәт...

— Һин — таш нәçеленән!

— Ул — сихырсы, ул һине сихырлаған! Ул — албаçты, мин уны тупһама ла баçтырмам, бер өйҙә һыйышып йәшәй алмам. Йә ул, йә мин! — Ҡарсыҡ та зәһәрләнде, тәне ҡалтыранды. — Өйҙә, шәп булғас, инәйеңде өйҙән ҡыу, шул уйнашты апҡайт! Мине ҡарт көнөмдә арҡама тоҡ аçтырып урам буйлап сығарып ебәр!

## IV

Мәғҙәнгә Раушаниялар ҡайтып төштө: бәхтейәрҙәр йортонда оло байрам. Ҡотлоярҙарҙа Камилдың Биләндән ҡайтыуы ҙур ваҡиға булһа, бында ла шулай: һарыҡтар салына, оло ҡаҙандар аçыла, усаҡтарҙа ут дөрләй, күңелдәр күтәрелә. Хатта балалар ҙа байрам тыуыуын тоя — улар ҙа биш әйттермәй, йомошто йәһәт кенә үтәй.

Ҡотлоярҙар заты урамы Ҡуянсыҡ булһа, бәхтейәрҙәрҙеке — Артҡы урам. Шунда өс бер туған йәнәш ултырған: Баныубикәләр, Фәриҙәләр, Рабиғалар. Шатлыҡ-һөйөнөстәре лә, бәлә-ҡазалары ла уртаҡ; ҡунаҡ килһә, өс арала йөрөшәләр, балалар өс арала уйнай, өс өйҙә бер юлы табын ҡорола.

Ҡотлоярҙарҙа иң уҡымышлыһы Камил булһа, бәхтейәрҙәрҙә иң аçыл һөйәк — Раушанияҡай, наҙлыҡай зат. Дәрәжәле ханым, олуғ мәртәбәләргә ирешкән зыялы. Ире Тәлғәт тә шундай уҡ юғарылыҡта: үҙҙәрендәге ниндәйҙер ҙур ойошмала баш ревизор. Мәктәптә лә уҡытып алған, директормы, завучмы вазифаһын биләгән, ҙур кеше булған. Үҙе ипле, аҡыллы, күркәм буй-һынлы, Раушанияҡайға таптаман иш; уның шикелле матур, һөйкөмлө, аçыл һөйәктәр тоҡомонан. Атаһы әүәл шунда уҡытыусымы, мулламы булған. Ләкин ниш-ләптер Раушаниялар Тәлғәттең туғандары менән ҡатышмай. Бисә туғаны — түрҙә, ир туғаны — тупһа төбөндә, тигәне шулмы әллә… Тәлғәт тағы үҙе лә бисә туғандарын хуп күрә, Мәғҙәнгә атлығып тора. Бында ул һөт өçтөндәге ҡаймаҡ һымаҡ, кейәү балаҡайҙың абруйы бик-бик юғары. Уны интеллигентҡа, аҡыллы кейәүгә, бик-бик ярымлы еҙнәйгә һанайҙар, ҡәйнәһе Мөнирә ҡарсыҡ та, Фәриҙә ҡайынбикәһе лә, Баныубикә менән Рабиға балдыҙҙары ла үлә яҙып тора. Әллә апаларын шул саҡлы яраталармы, әллә Раушанияға булған хөрмәт иренә лә күсәме? Әллә еҙнәбеҙ апайым менән гел шулай татыу йәшәһен, тип тырышалармы?

Раушания — дәрәжәле ханым, юғары белемле уҡытыусы. Һеңлекәштәре өсөн буй етмәç үр булды. Тәлғәт менән татыу йәшәүҙәре уларға өлгө ине. Раушания бәхтейәрҙәр йортона һирәк ҡайта, хәҙер төп йортта ул ҡунаҡ сифатында ғына. Шуға аçыл затты өрмәгән ергә ултыртмайҙар, яңылыш та, остоҡ та бер ҡыйыш һүҙ әйтмәйҙәр, яттарҙан да апайға бер һүҙ ебәрмәйҙәр.

Ул төп йортта күҙгә күренеп кенә ҡала, әллә шуға инде туғандар өсөн — танһыҡ ҡунаҡ, көтөп алған йән. Йыраҡтағы ҡояш нығыраҡ яҡтырта шул, йылыһы, файҙаһы әллә ни булмаһа ла, ярай. Раушания ҡайтһа, өйгә байрам ҡайта, байрам рухы йоға күңелдәргә, бәхтейәрҙәр тормошо яңырып, яҡтырып киткәндәй итә; ниһайәт, улар ерҙә йәшәүҙең ҡәҙерен күрә, мәртәбәһен тоя. Ошоноң өсөн генә булһа ла, уларға был затты илаһилаштырыу, үҙҙәренән айырып, ниндәйҙер серле бер

йәнгә әүерелдереү зарурҙыр. Тәлғәт еҙнәләре лә Раушания апаларына табына! Эйе, уның өсөн үлеп бара! Был бәхтейәрҙәргә ғорурлыҡ өҫтәй: шундай мәшһүр кеше уларҙың апаһын тиң итә, өҙөлөп һөйә! Тәлғәт еҙнәләре ”Раушанияҡай” тип өтөлөп тора!

Үҙҙәрендә лә улар дәрәжәле кешеләр менән генә ҡатыша, ҙур-ҙур йыйындарға саҡырыла — ғөмүмән, юғары ҡатлам хоҡуғында йөрөйҙәр. Тәлғәт еҙнәләре ҡунаҡ була белә. (Матур итеп ҡунаҡ була белеү ҙә мәртәбә беҙҙең халыҡта!). Ҡунаҡ үҙен дәрәжәле тота, мәҙәк һүҙҙәр һөйләй — ҡорҙо ауыҙына ҡаратып ҡуя. Күберәген сәйәсәт хаҡында, ил башлыҡтары тураһында мәғҙәндәр ишетмәгәнде бәйән итә. Шунда тоҙло-боросло көләмәстәр ҙә ҡыҫтырып ебәрә. Аҡыллы һүҙҙәр теҙә, эшлекле ҡиәфәттә, белдекле булып һөйләй белә был кейәү. Тауышы ла ышаныслы, ҡалын, инандырғыс — шуныһы ла танһыҡ бәхтейәрҙәргә.

Тәлғәт кейәү — ҡор башында, бәхтейәрҙәр ауыҙ асып тыңлай. Табын түре хәс тә сәхнә, сәхнәлә — хөрмәтле вә зиннәтле ҡунаҡ.

Баныубикәнең, еҙнәһе магазинға барырға йыйыныуын белгәс, ҡото осто. Тәлғәт унда һөйәркәһе менән осрашасаҡ! Йә яңылыштан маңлайға-маңлай бәрелешерҙәр… Миңзада тәҙрәнән ҡарап торһа йә күтәрмәгә сыҡһа… Шунда Тәлғәтте ”Селмаг”тан килендәше Нәҡиә танып ҡалһа… Нәҡиә — йылан, Миңзада менән вәс-вәс… Вәт хәтәр буласаҡ! Хәҙер, етмәһә, шул Миңзада Әсләмдең ҡустыһы — Баныубикәнең ҡәйнеше Ғәтиәт менән типтерә! Әкәмәт был донъя, ҡыҙыҡтары сығып тора, хикмәттәре булып тора.

Баныубикәнең хәле бөттө. Ни ҡылырға, нисек был афәтте булдырмаҫка? Әгәр еҙнәһенең ниәтен өйҙә үк белһә, был бәләне, моғайын, алдан иҫкәртер, апаһын киҫәтеп өлгөрөр ине. Раушания ирен магазинға ебәрмәҫ!

Әле ул магазинында тыпырсынып тора, бер ни ҙә хәл итә алмай. Был яңылыҡты оло улы килеп һөйөнсөләне (еҙнәһе магазин яғына йыйына!), Баныубикәнең берәй сараһын күрергә ваҡыты ла ҡалманы.

Ә Миңзада контораһында ултыра, бөгөн райпоға йыйынманы…

”Продмаг” һатыусыһы тыз-быз баҫты, үҙенә урын тапманы. Эше эш түгел, яңылышып бара, кеше менән дә ҡоро-яры һөйләшә, тегеләре Баныубикәне танымай. Уны алмаштырып ҡуйғандармы ни? Тырт-мырт һөйләшә, бәреп-төшөрөп бара. Ахыр түҙмәне: магазинын контролһеҙ генә бикләне лә Артҡы урамға осто. Йыш-йыш тын ала, һулышы ҡурыла. Ҡайтып етергә, апайҙы иҫкәртергә! Әйҙә, ирен ебәрмәһен, эсерһә эсерһен, әйҙә, еҙнәһе түңкәрелеп ятһын! Ҡабалана Баныубикә, әммә… өлгөрмәй: аралыҡта еҙнәһе менән йөҙгә-йөҙ!

Көн йылы тип, Тәлғәт артистар һымаҡ ап-аҡ костюм кейгән. Ауыл өсөн аҡ костюм ят кейем, бында аҡтан кейенеп, эшһеҙ текә баҫып йөрөмәйҙәр. Ә был — килештерә: төп-төҙ буй, кәүҙәһен тура тота. Министр. Йә булмаһа берәй директор йораты. Һинд киноһындағы сибәр, бисә-сәсәне һушһыҙ иткән теге Капур. Тәлғәт бер ни уйламай, сырайы ла ҡайһылай тыныс. Хатта мөләйем йылмая нишана. Бер нимәгә лә иҫе китмәй! Әллә Миңзаданың ауылда икәнен, ошо көндә сельпола ултырыуын белмәйме? Белһә, Раушания ла уны магазин яғына ебәрмәҫ ине.

— Баныубикә?..

— Еҙнә?..

— Ҡайҙа?

— Өйҙә әйберемде онотҡанмын.

— Мин магазин яғына...

Баныубикә, Мотаһар урамынан төшөп, кире "Продмаг"ҡа ашыҡты. Йәнәһе, урап, еҙнәһенән алдараҡ барып етә, бәләне булдырмай була! Еҙнәне нисек тә афәттән йолоп ҡалырға!

Тәлғәт, Азамат урамына сыҡҡас, әллә нисә танышы менән күреште. "Продмаг" магазинына яҡынлашҡанда Баныубикә прилавка артында ине инде. Еңел һуланы ҡатын, һулышын тигеҙләп өлгөрҙө, күҙе — тәҙрәлә.

Тәлғәт яй ғына яҡынлай. Бәлә: Баныубикә Раушания апаһын киҫәтә алманы! Тәлғәт йәйелгән, бер хафаһы юҡ; Мәғҙән өйҙәрен байҡай, йәшлек эҙҙәренә баҫа. Йәшлектә был урамдарҙы күп тапаны бит ул! Юҡ, йәшлектәге ярһыуҙар онотолманы, ул хәтирәләр иҫтән юйыламы ни?! Ул саҡта Тәлғәт йәшерәк тә, дәртлерәк тә ине. Ә Мәғҙән ҡыҙҙары, Әй һылыуҙары?.. Улар йөрәк ҡылдарын сиртә, иҫһеҙ-һушһыҙ итә. Хатта, нисәмә йылдар уҙғас та, ошо һуҡмаҡтар күңелде елкендерә.

Нисәмә йыл уҙған, ә Тәлғәт бер ниҙе лә онотмаған. Оноторға хаҡы ла юҡ! Күңелдәге ул ярһыуҙарҙы нисек баҫырға? Әллә шуға ул, табынын ташлап, сығып киттеме? Һулыштары өҙөлә, йөрәге ҡыҫып-ҡыҫып ала.

Был мәлдә Баныубикә мейеһен бер уй бырауланы: еҙнәһе Миңзаданы, улын күрергә ашҡындымы икән? Миңзаданың бындалығын беләме әллә? Ул арала Тәлғәт магазинға яҡынлашҡандан-яҡынлашты. Шунда "Продмаг" һатыусыһы түҙмәне: тағы еҙнәһенә ҡаршы уҡталды. Туҡтатырға, ниндәйҙер сәбәп табырға! Әйҙә, ул "Продмаг"тан ары уҙмаһын! Юҡ, быға юл ҡуйырға ярамай: улар Миңзада менән осрашырға тейеш түгел!

Баныубикә, аҡ халатын ялпылдатып, ҡошсоҡтай ҡанат киреп, алға талпынғайны, юлын Һибәтов киҫте. Әллә ҡайҙан килеп керҙе араға? Дәрәжәле дәү ирҙәр ҡапма-ҡаршы баҫҡан. Икеһе лә буйсан, икеһе лә лайыҡлы инсандар: сельпо башлығы, Баныубикәнең еҙнәһе...

— Бәй, Тәлғәт түгелме?

— Һибәтов дуҫ, һинме? Тамсы ла үҙгәрмәгәнһең! — Тәлғәт ҡосағын йәйҙе.

— Нисәмә йыл, нисәмә ҡыш! — Шағир Һибәтов русса шиғыр юлдарын теҙҙе. Дуҫтар ҡосаҡлашып күреште. Был тамашаны күҙәткән халыҡ ғәжәп итте, һәр береһе ятты танырға тамшанды. Тирәләй кеше өймәгеште, ҡарттар усын ҡашына терәне, ир-ат алғараҡ сыҡты, бисәсәсә өҫ-башын төҙәткеләне.

— Ҡунаҡҡамы, Тәлғәт дуҫ?

Дуҫтар тағы бер-береһенә текләшеп торҙо.

— Мәғҙән үҙгәргән, танырлыҡ та түгел. — Тәлғәт ян-яғына ҡаранды, ситтә ҡатҡан Баныубикә балдыҙына ла ул кемделер эҙләй төҫлө тойолдо.

— Эх, бар ине йәш саҡтар, ҡыҙҙар баҫтыртҡан саҡтар! — Һибәтов таҡмаҡланы. — Хәтерләйһеңме, Тәлғәт?

— Хәтерләмәй...

Һүҙ ялғанманы. Икеһенең дә йәнен хәтирәләр өтә ине, икеһе лә йомғаҡтағы епте ҡайһы осонан тартып сығарырға белмәне. Сельпо кон-

тораһына табан ыңғайлай бирҙеләр. Баныубикәнең йөрәге ҡыҫып-ҡыҫып ҡуйҙы: бәлки, Миңзада конторала юҡтыр. Еҙнәһе Һибәтов менән торор-торор ҙа кире боролор. Баныубикә шулай юраны. Сихыр ҡөҙрәте булһа, еҙнәһен урынынан һурып алыр, контораға бер аҙым да баҫтыртмаҫ ине. Баныубикә үртәлде, әрнене, эстән ялбарҙы: арала, Хоҙай, юл ҡуйма был хәсислеккә, элекке һөйәркәләрҙе осраштырма! Был иблислеккә ҡаршы баҫ!

Ирҙәр һаман бер урында тапанды, һүҙҙәре ялғанды, шай, эйе, һүҙҙәре һис бөтмәне.

Был мәлдә, Баныубикә шикелле, икенсе бер бисара ла тәҙрәгә ҡапланғайны. Ул да тышҡа атылып сығырҙай булды. Йөрәге дөп-дөп тибә, бар донъяны яңғырата төҫлө.

## V

Миңзада, йөрәге һиҙепме, тышҡа күҙ генә һирпкәйне. Бер нимә хаҡында ла уйламаны, бер ниндәй хәбәр ҙә ишетмәне. Хәҙер тәҙрәнән сығып бара, ярай, хеҙмәттәштәре һиҙмәй.

Урамда — ул. Нисә йылдарҙан һуң, инде йөҙ һыҙаттары, буй-һыны онотолоп бөттө тигәндә... Ни хәл ҡылырға, нишләргә хәҙер? Тыны тарыҡты бахырҙың, йөрәге алҡымынан алды. Ҡыймылдарға ла бирмәй. Тәне ҡатты, башында ла бер уйы ҡалманы, борсаҡ ише ҡойолоп-сәселеп бөттө булғаны ла.

Ул! Мәғҙән урамы уртаһында баҫҡан; хәс тә ҡарағай: ғорур, текә. Әҙерәк ҡалынайған икән шул. Олпатланған. Йәшерәк саҡта йоҡараҡ ине, ҡаранан килешле... Әле нишләп аҡтан кейенеп алған? Әллә олпатлығын, дәрәжәһен күрһәтергә теләйме? Ниндәй икән ул хәҙер, ни уйлай икән? Һаман Миңзаданы уйлаймы, әллә үкенәләме? Йәш бисәнең бите буйлап ҡайнар йәше тәгәрәне. Ярай, бүтәндәр битараф. Ул иһә үҙ-үҙен тыйманы. Тышта — ул... Һибәтов йәнәшенә баҫҡан. Өнһөҙ генә тегенең хәбәрен тыңлай.

Миңзада, гүйә, ҡабаттан үҙ урынына ҡайта (ул әле генә тегеләр янына барып ураны, һиҙмәнеләр). Хәтирәләренә тарый: барыһы ла кисә генә кеүек... Быуындары ойоно, күҙҙәре талды. Хәлен аңланы, ниһайәт: нишләптер хәҙер шул кеше менән бик тә күрешкеһе, һөйләшкеһе килде. Тағы үҙен тыйҙы: ниңә? Үҙәге өҙөлдө: бер, бер ҡат ҡына күрешергә! Йөҙгә-йөҙ текәлергә, күҙмә-күҙ ҡалырға! Нисек? Ҡул бирешергә! Бер, бер ҡат ҡына устарҙы ныҡ, ныҡ итеп ҡыҫышырға! Бер генә мәлгә онотолорға! Аҙаҡ иҫләргә, иҫләргә! Шул бер генә мәл дә мәңгелекте тотошлай үҙенә һыйҙыра ала бит. Шул мәл дә мәңгелеккә тиң! Юҡ, йәш ҡатын ҡыйманы.

Ахыр бүтәнсә юраны. Һибәтов Тәлғәтте кабинетына саҡырһын! Әйҙә, контораға килеп инһендәр! Миңзада менән маңлайға-маңлай... Әйҙә, сәсрәп китһен донъяһы, әйҙә, шартлап китһен бар ғаләм! Миңзада ҡосағына ташланыр, Һибәтов күрһен, ул беләһ... Бәлки, ул баҙнамаҫ — Тәлғәт үҙе, йығылып барғанда, тотоп ҡалыр... Улар күрешерҙәр! Әйҙә, бүтән мәңге осрашмаһындар бынан кире, мәңгегә айырым йәшәрҙәр...

Был ваҡытта "Продмаг"та икенсе ҡатын үртәлә. Был — хыянат, был — апайҙан көлөү, бәхтейәрҙәр йөҙөнә мәсхәрә! Һатыусы, ирҙәр

күҙҙән юғалып, конторағa ышыҡланғас, йөҙөн ҡаплай: йәнәһе, теге яһил бисә, түҙмәй, еҙнәһе ҡаршыһына сығып баҫҡан! Харап булды Баныубикә: теге оялмай! Баныубикә тубығына сүкте: әллә йөрәге туҡтанымы? Бәлә... Инде бәхтейәрҙәр ни ҡылыр, Раушания бахырҡай...

Сая яҡынлашыуын ирҙәр шәйләмәне. Теге килде лә баҫты. Һулыштары өҙөлдө, ауыр, оҙон тойолдо юлы! Бары ҡоро кәүҙә генә, ирендәре ҡымтылған. Өндәр тынған, яҡтылыҡ һүнгән, хәрәкәт ойоған, бары билдәһеҙ көс кәүҙәне һәләкәткә әйҙәй. Әллә ниндәй ҡөҙрәт йөрөтә кешене? Шул уға тынғы бирмәй, утҡа тыға.

Ваҡыт туҡталды, шунда ирҙәр ҙә былай табан ҡайырылды.

— Баныубикә?! Балдыҙ...

— Мин! Еҙнә, һине апайым саҡыртып ебәргән, улым килде — унда мунса һыуына, ти...

— Ә-ә... Балдыҙ, мин хәҙер... — Тәлғәт сәбәләнде. — Конторағa ғына керәм дә... Һибәтов менән бергә — беҙ...

— Ярай. — Баныубикә әҙерәк тынысланды, магазинына табан йүнәлде.

Тәлғәт улын күрергә йыйынмай ҙа ине, бары Һибәтов уны конторағa өҫтөрәне. Әйҙә, Миңзаданы күреп кит!

Тәлғәт ҡарышты, тағы ҡыҙыҡһыныуы еңде.

Һибәтов уны Күльяҡ урам тыҡрығына төшөрҙө лә үҙе кире әйләнде.

— Миңзада?!.

— Тәлғәт?!.

— Һин ауылдамы ни?

Миңзада ҡыҫҡаса ғына хәлен һөйләне.

— Ниңә балабыҙ хаҡында һорашмайһың, Тәлғәт? Даян хаҡында?

— Даян нисек? — Ир тотлоҡто, һүҙҙәрен һурып сығарҙы. Инде теге шәплеге лә, ирәйеп тороуы ла юҡҡа сыҡты. Хәҙер тотҡонға ҡапҡанын аңланы ҡунаҡ, ҡайҙа баҫырға, ни ҡылырға белмәне.

Миңзада иһә ҡабаланды, хәбәрен һөйләп ҡалырға ашыҡты, эсендәгеһен, бар әрнеүен бер юлы тышҡа, иргә бөркөргә ашҡынды. Ҡон ҡайтарғыһы килде бисәнең.

— Әйҙә, улыңды барып күреп кит!

Ир "юҡ" тип әйтә алманы, "ваҡытым юҡ" тиергә лә йөрәге етмәне. Ул Күльяҡ урамын, Миңзадалар өйөн белмәйме? Һүҙ ялғанманы, икеһе лә башын һәлендерҙе.

— Нисә йыл ҡайтаһың — улыңды бер күреп киткәнең юҡ...

Теге малай утынлыҡта ни менәндер булашып ята ине.

— Даян! Кил әле!

Ҡаршыға тырпай сәсле малай йүгерҙе.

— Нимә, инәй? — Малай ят кешегә ҡыҙыҡһынып төбәлде.

— Бына, улым, һинең әтейең...

— Ә-ә...

— Күреш. — Әсәһе ҡушҡас, малай юғары үрелде.

— Һаумы, Даян улым! — Ирҙәр ҡул ҡыҫышты.

...Аҙаҡ ҡунаҡ был осрашыуҙы айырым-асыҡ иҫләйәсәк.

Улар ҡойма буйындағы эскәмйәгә сүктеләр. Өсөһөнә ҡыҫылып ҡына ултырырға тура килде. Әллә нисек ҡыҫынҡы ла, ҡыйын да. Ялҡытып та китте. Дөрөҫө, йонсотто. Был ауыр хәлдән өсөһө лә тиҙерәк ҡотолоу яғын ҡараны.

Улар — йәнәш. Әллә нимәләр хаҡында гәпләштеләр. Тәлғәт кеҫә төбөнән йәшел тышлы ҡағыҙ киҫәге тартып сығарҙы. Малай баш тартҡайны ла, атай кеше һамаҡланы:

— Даян, бүтән күстәнәсем юҡ, был… Инәйең велосипед алыр.

"Ура", — тип ҡысҡырғанын һиҙмәй ҙә ҡалды малай, өлкәндәр көлөштө. Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та ине. Әҙерәк күңелдәре булды, йөрәк урынына ултырҙы.

— Ярай, һау булығыҙ!

— Ярай, — тине Миңзада; күрәһең, уға ла ҡыйын ине, ул да ялҡты. — Улыңды күрергә килеүҙән баш тартмағаныңа рәхмәт. Мин ҡурҡырһың, тип уйлағайным.

— Хуш, Даян. Инәйеңде тыңла!

Ир, киҫә генә боролоп, китеп барҙы. Был мәлдә әсә менән бала ни кисергәндер — ҡунаҡ бары күҙ алдына ғына баҫтыра ала. Көйһөҙ малай атай күҙҙән юғалғансы урынында ҡаттымы икән? Бөгөн бисәһенән ныҡ эләгәсәген дә, өйҙә олоғара дау ҡубасағын да һиҙенә ине Тәлғәт, әммә күңеленән ҡул һелтәне. Барыһына, барыһына төкөрҙө, башында бары ул, уның хаҡындағы уй ғына ҡайнаны. Үкенес, әрнеү өтә ине йәнен, йөрәген һағышлы хәтирәләр өйкәй… Бирешмәҫкә, ебеп төшмәҫкә тип, сәмен бер йоҙроҡҡа йомарланы. Ул ҡулы менән ҡылғанды иңе менән күтәрер! Быныһы ғына уның иркендә түгелме ни?

Өйҙә уны күптән көтәләр ине — бәхтейәрҙәр өйөрө менән йыйылғайны. Бер һүҙгә килгәндәр! Эт өйөрө бына шәп кейәү өҫтөнә ябырылыр… Раушанияҡай ҙа тамағы ҡарлыҡҡансы әрләшер, туғандары нәфрәт тулы күҙҙәре менән ашар. Әлбиттә, бер көн эсендә теге яратҡан кейәү, өлгөлө еҙнә яратмаған кейәүгә, боҙоҡ еҙнәгә, теге уйнаштың һыңарына әйләнер.

Ҡотлоярҙар йортонда ла был бисәне күрә алманылар, бәхтейәрҙәр ҙә саяға бәддоға уҡыны.

## VI

Ғәтиәт ҡаты итеп тартты ишекте.

— Абзый, мин һуңғы ҡат килдем. Һөйләшергә!

— Ә, Ғәтиәт, үт! — Әсләм урындығында кирелде. — Нимә хаҡында һөйләшергә тиһең?

— Бында бөтәһе лә ап-асыҡ яҙылған…

— Һин һаман да шул ҡайғы менән йөрөйһөңмө? — Әсләм усында ҡустыһының ҡағыҙын шығырҙатты. — Шул бисәне башыңдан сы…

— Абзый…

— Нимә?

— Әллә беҙгә Миңзада менән бында, ауыл советына, икәү килергәме?

— Туҡта! — Ауыл советы башлығы аҡайып ҡараны мырҙаһына. — Ҡағыҙ ни яҙһаң да түҙә ул, ә инәйем?.. Инәйем нимә ти? Ул ризамы, Ғәтиәт? Уйнаштан бала тапҡан ҡатынды төп йортта хужабикә итергә ул күнерме?

— Һораманым.

— Һорарға кәрәк ине, Ғәтиәт; өй һинеке генә түгел, уныҡы ла бит әле… Инәйем тере, үлмәгән…

— Улайһа, абзый, мин ауылдан сығып китәм!
— Ҡайҙа?
— Баш һау булһа…
— Инәйемде үҙегеҙ ҡарағыҙ, мин ауылдан ҡасам, тиһең инде?
— Эйе, ул һинең дә, Зөлҡәрнәй абзыйымдың да инәһе. Минең яңы ҡатыным менән йәшәргә теләмәй.
— Ярай, энекәш, бөгөн был һүҙҙең осона сығып булмаҫ…
— Ә ғариза? Уны тағы йыртып ташларға уйлайһыңмы?
— Ятһын.
— Абзый, ә һин законды боҙғаныңды беләһеңме? Һин, ауыл советы башлығы булараҡ, йәштәргә ҡаршы төшөргә, яңы ғаиләгә аяҡ салырға тейеш түгелһең; ғаризаны йыртып ташлауың да — законды боҙоу…
— Шунан?
— Шунан, абзый, беҙ райсоветҡа бара алабыҙ йә тура район ЗАГС-ына инәбеҙ… Мәғҙән ауыл советы менән генә донъя бөтмәгән. Беҙ бары яҡшылыҡ менән эш итергә уйлағайныҡ…
— Инәйем ҡаршы…
— Ә һин, абзый, үҙ бурысыңды үтә, тәүҙә никах кенәгәһе яҙ!
— Туйһыҙ, ижапһыҙмы?
— Эйе.
— Яҙмаһам…
— Районға барабыҙ.
— Барығыҙ, абзыйың өҫтөнән йөрөгөҙ! — Әсләм тороп уҡ китте. — Үҙеңдеке үҙеңә яу!
— Беҙ көтәбеҙ, абзый, һинең өҫкә сүп өйәһе лә, һине үҙ ҡулыбыҙ менән властан төшөрәһебеҙ ҙә килмәй.
— Ғәтиәт, әйт әле: һин ни көҫәйһең?
— Әсләм абзый! — Ғәтиәттең тауышы ҡалтыранды. — Әйҙә, туғандарса аңлашайыҡ. Ирҙәрсә. Мин Миңзадаға өйләнәм, инәйем риза булмаһа, башҡа сығам йә ситкә сығып китәм. Ә һин ғаризаны теркә!
— Тәк... — Әсләм әйберҙәрен йыйҙы. — Ә Миңзаданың балаһын нишләтәһең? Минең бажаның балаһын?..
— Баланың ни ғәйебе бар?
— Шул, шул, энем. Әйҙәле, тышҡа сығып һөйләшәйек! Ҡайтышлай, юлда… Минең һиңә сер итеп әйтәһе һүҙҙәрем дә жыйылып киткән.
— Ә ғариза?
— Ятһын. Бында бик күп документ ята ул, энем. Ғәтиәт, — тип һүҙен дауам итте ағай. — Һин ишетмәгәнһеңдер… Тәлғәт бажа менән һинең буласаҡ бисәң осрашып йөрөй…
— Нисек?
— Шулай. Тәлғәттәр ҡунаҡҡа ҡайтҡайны, бажа Миңзада менән осрашты, ишетмәгәйнеңме?
— Юҡ.
Хәҙер ағай кеше рухланыбыраҡ һөйләне.
— Тәлғәт сельпоға Миңзаданы юллап барған, Һибәтов та шунда булған. Улар — күптәнге дуҫтар! Миңзада конторанан Тәлғәтте үҙҙәренә апҡайтып киткән. Шунан ҡәйнәм өйөндә ғауға ҡупты. Раушания ҡайынбикә бажаны бешә генә, ә һинең бында ”Миңзада ла Миңзада” тип ауыҙ һыуың ҡорой — бына ниндәй бисә ул һинең Миңзадаң!

Ғәтиәт ауыҙына һыу уртланымы ни? Ваҡыт һуҙылды, һүҙҙәрҙең мәғәнәһе юҡҡа сыҡты, һуң да булып китте, шай. Тәҙрәләрҙә ут емелдәй. Ҡыҫыҡ күҙҙәр, гүйә, шулай туғандарҙы үсекләй.

Һүҙ әле осланманы, ниндәйҙер бер фекергә киленмәне. Ғәтиәт өйөнә һуғылып тормай тура Күльяҡ урамына тартты. Башында бер уй ҡайнаны, мейе тамырҙарына бер үк һүҙҙәр һуҡты: нишләп Миңзада был хаҡта әйтмәгән, нишләп уны һаман тишек кәмәгә ултырта? Ирҙең талағы ташҡан, йөрәге ҡуҙғалған, кәүҙәһен әллә ниндәй өйөрмә күтәреп алып бара. Бөтә тәне дерелдәй. Хәс тә биҙгәк тота. Тарамыштары тартылған, тәне мискә ҡоршауҙарыише ян-яҡтан һығылған. Аяҡ аҫтында ер сайҡала, текмәләр ян-яҡҡа ауыша. Нимәгә тотонорға, ары кемгә ышанырға? Был тормошта бер аулаҡ ер, тыныс утрау бармы? Һине аңлаған, һине төп башына ултыртмаған, үҙ иткән бер әҙәм ҡалғанмы? Ағалары ла ят, әсәһенән дә айырылды, дуҫтарынан яҙҙы шул сихырсы бисә тип... Ул уны бармаҡ тирәләй йөрөтә, ирҙе ҡороҡлап алған да тирәһендә өйөрөлтә! Йәш тайҙы менгегә өйрәтә шулай, үҙ яйына яраҡлаштырып, ҡулға эйәләштереп ала! Ағалары менән боҙолошто, иҫәр. Әсәһе өйҙә йөҙөнә күтәрелеп ҡарамай. Бер һүҙ ҡатмай. Зөлкәрнәй ағаһы ла, Камил ағаһы ла... Уларға юлды оноттолар, ҡул һелтәнеләр уға ағайҙар! Ғәтиәт әле йүгәнен шыпырып ҡасҡан тай. Ана, Сатан өйө, ана, йәштәр йәй ҡунып йөрөгән лапаҫ башы — ҡаршыла емелдәп кенә ҡала! Тырым-тырағай донъяһы, юлға һалынмаған тормошо; уның ғына көнө әҙәмсә түгел, һәүетемсә ағылмай. Ҡасан осона сығыр бының, ҡасан төҙәлер донъяһы, ул ҡасан хаҡ юлға, тура һуҡмаҡҡа төшөр?

— Ғәтиәт!..

— Миңзада... Һин һаман Тәлғәт менән осрашаһыңмы? Һаман арағыҙ...

— Ғәтиәт!

— Әйт! Ул кеше конторағa юллап килдеме, әллә Һибәтов килтерҙеме?

— Ғәтиәт, шым! — Ҡатын шул арала башын эшләтте.

— Әйт!

— Ғәтиәт, ул үҙе тура өйгә килгән бит, мин ни эшләйем?

— Әсләм абзыйым: "Миңзада Тәлғәтте өйөнә үҙе апҡайтҡан", — ти.

— Юҡ, Ғәтиәт, ул үҙе өйгә килде лә керҙе, мин ни... Баламды күрәм, тип килгән! Аҡса ҡалдырҙы, Даянға велосипед ал, тине.

— Ул үҙе килдеме?

— Үҙе! Ана, уның аҡсаһына алған велосипед! — Миңзада самаларын самаларға яраҡлаштырҙы. — Кеше ни, һөйләй инде, тел һөйәкһеҙ... Хәҙер йәтим быҙау ауыҙы ашҡа тейһә лә, теймәһә лә, ҡанлымы? Әллә мин йәтим бисә булғас, бөтә бысраҡ миңә йоғамы? Үҙем ғәйепле: тәүҙә үк һиңә үҙем аңлатып һөйләмәгәм, ауыҙыма йоҙаҡ һалғандармы ни!

— Үҙең башта уҡ һөйләмәнең шул — был хәбәрҙе лә кешенән, абзыйымдан ишетәм... — Ғәтиәт тә килеште.

— Сүп өҫтөнә — сүмәлә: Миңзада — уйнаш, Миңзада һөйәркәһе менән осраша... Ул улын күрергә килгән, мин нишләйем?

— Мөнирә ҡоҙағыйҙарҙа талаш сыҡҡан, уны...

— Ярай, Ғәтиәт, уны һөйләмәйек әле — Әсләм ағайың нимә ти, тағы ғаризаны йыртып ташланымы? Был юлы үҙем барам. Икәүләп барырбыҙ, Ғәтиәт!

Улар көс-хәлгә аңлаштылар, тағы татыулаштылар, бер-береһенә һыйынышып, тынысландылар. Ир менән бисә (улар ир менән бисә булып бөткән бит) ни ҡылһалар ҙа, ишкә — ҡуш, силәккә — ҡапҡас, ишеккә — тотҡа…

Ә ағайҙар ни уйлай? Улар иртәгә йәштәрҙең яҙмышын ҡайһылай хәл итер? Улар йәштәр тураһында ныҡлап уйлаймы, уларҙың хәленә инәме? Миңзаданы уйламаһалар, уны яратмаһалар ни, ҡустыларының көнө улар өсөн барыберме? Ғәтиәт ҡустылары буш эштең артынан ҡыуамы? Ниңә улар үҙҙәрен дә шул кесе туған урынына ҡуйып ҡарамай икән — бары үҙҙәренсә уйлайҙар, үҙҙәренең каланчаларынан тороп фекер йөрөтәләр! Ағайҙар ил менән етәкселек итә, Мәғҙәнгә баш булып торалар — атай васыятын үтәйбеҙ тип ҡыр талашалар, ә ҡустыларының мөхәббәт йортон кем төҙөшә? Ҡустының тормошон ҡорошоуға сат ҡаршы төшәләр. Мәғҙәндәге тормошто ла, ҡустылары донъяһын да үҙҙәренсә генә ҡорорға иҫәптәре.

Бер көн килеп улар йәштәрҙе кисерерме, ғашиҡтарҙы аңлармы, үҙ ҡылыҡтарын хата, тип танырмы? Мөхәббәттең үҙенең дә хоҡуҡтары барлығын, үҙенең генә айырым ҡанундары булыуын ҡабул итерме?

Йәштәр көтә, йәштәр түҙемле рәүештә өлкәндәрҙең — ағайҙарҙың аҡылына өмөт итә, аң-караштар үҙгәреүенә ышаныс бағлай; төрлөсә самалап ҡарайҙар, төрлө юлдарын эҙләйҙәр… Тура юлға сығырҙармы, тәғәйен сараларын табырҙармы? Туғандар, ниһайәт, килешә, аңлаша, бер ҡарарға килә алырмы? Бисараларҙың бәхете шуға ла бәйлеме?

Ғашиҡтар бер-береһенең ҡосағында ирей. Инде бөтәһе лә буш хафа ғына һымаҡ тойола: әйтерһең, әле генә берәү ҙә туҙынмаған, ярһымаған. Донъя һил, Мәғҙән иле оҙон эш көнөнән һуң ял итә. Сатан Мөхәмәтйән өйө лә, күрше-күләндеке лә өнһөҙ. Әллә уларға барыберме? Улар бер ни белмәй ҙә, тоймай ҙа. Улар хәл итмәй!

Был кешенең хәҙер бер генә дуҫы ҡалды. Шул кеше генә тыңлай, йыуата. Баш осонда тора, көтә.

Ағалары ситкә тайшанды, әсәһе аңламай. Еңгәләре лә…

Был кеше был ауылда хәҙер кемгә бара, хәбәрен һөйләй ала? Кемгә һыйына? Уны сихырсы, уйнаш, тинеләр… Ул ғына ҡайнар ҡосағын аса, ярһыуын баҫа. Ул ғына… Баш осона баҫҡан да йөрәген усына ҡыҫып түҙә, киске һалҡында — күлдәксән, теше тешкә тейһә лә, бирешмәй. Ул уны үҙ итә, яҡыным тип атай. Бүтән берәү был көйһөҙ ирҙе, тормошта уңмаған затты яҡын күрмәй, бүтән берәү шулай борсолоп тормай. Атай васыятына тоғро була алманың, тип битәрләнеләр, Мәғҙәндә властьы ҡулыңда тотманың тип, үҙенә ҡул һелтәп ҡуйҙылар. Ҡотлоярҙар уйын бойомға ашыра алманы бит был кеше. Бары берәү генә был кешене үҙ итә: көйһөҙлөгө, йүнһеҙлеге менән бергә ҡабул итә. Ул һаман да уға өмөт итә. Ул, ниһайәт, ҡәтғи бер ҡарар көтә.

## VII

Миңзада самалай. Һуҙыу уның файҙаһына түгел түгеллеген: ирҙәр тәүҙә генә ләүкеп тоҡана, бөтә донъяны ҡосорҙай була, ә аҙаҡ, күп тә үтмәй, һүрелеп ҡуялар. Улар үҙҙәре лә тимерҙе ҡыҙыуында һуғырға ярата, гөлтләп тоҡаналар, ләкин кисә генә дәрт иткәндәре бөгөн

ҡыҙыҡтырмай, кисә генә табынған ҡатынды бөгөн күрәһеләре лә килмәй.

Миңзада ла тағы һемәйеп ҡалырмын, яҙмыш тағы кәкре ҡайынға терәтер, тип шөбһәләнде. Йә ағалары энеләренә яңы кәләш табыр.

— Әллә ситкә сығып китәбеҙме? — тине Миңзада йөҙәп. — Ситтә яҙылышырбыҙ, бер Мәғҙәнме?

— Мин инәйемде ташлап китә алмайым, Миңзада, аңла. Мин — ҡотлоярҙарҙың төп йорто хужаһы, йортто ла ташлай алмайым. Әтейем васыяты: ситтә олтан булғансы, үҙ илеңдә солтан бул, ситтә олтораҡ булып йөрөгәнсе, үҙ ереңдә хужа булып йәшә.

— Һин бында хужамы, Ғәтиәт? Почтанан ҡыуылдың, завфермалыҡтан бәреп төшөрҙөләр. Һине хатта туғандарың, үҙ инәйең аңламай, хатта теләгән кешеңә өйләнергә ирек бирмәйҙәр…

— Бер килеп улар аңлар, ағайымдар ҙа, инәйем дә ризалашыр. Миңзада, көтәйек әҙерәк.

Миңзада өндәшмәне.

— Миңзада, ситтә мин өс йыл йөрөнөм, беләм: унда ла ситәнгә элеп ҡуймағандар. Күпте күрҙем армияла, аңланым: минең бәхетем — Мәғҙәндә! Мин ситтә йәшәй алмаясаҡмын, ауылдан айырыла алмаясаҡмын!

— Ғәтиәт…

— Миңзада…

— Һин дөрөҫ әйтәһең, Ғәтиәт. Тик ҡара: күпме көтөргә, сабыр итергә мөмкин?

— Әле яңы ғына Биләндән алған бисәм ҡайтып китте. Зөлҡәрнәй абзыйымдар ҙа, Әсләм абзыйымдар ҙа ныҡ расходланды…

— Беҙ расходланып туй үткәреп тормабыҙ! — Һүҙ тағы ялғанманы.

Шулай, яҙ, йәй үтеп китте. Ары һуҙаһы, көтәһе ҡалмағайны. Бәхеткә, һөйөклөһө йәй буйы төбәк һуҡмағын һыуытманы. Быға ҡарттар ҙа күнекте: әйҙә, йәштәр ҡыланһын инде үҙҙәренсә! Кисен, тулған ай ҡалҡҡас, Әй төбәгендә йәннәт. Сабый балаларҙай етәкләшеп алалар, бушҡа кәләп һалалар. Эшһеҙ кешеләрме ни! Йәй ауыл кешеһенең башы эштән бушамай — былар эт һуғара. Йоҡоноң иң тәмле мәлендә икәү серләшә… Шуның ҡыҙығы бармы ни? Төн уртаһында алйоттар төбәк ҡыҙыра. Аттар тибенләй, аҙашҡан мал утлай, моңһоу ай ғына юғарынан төнгө төбәкте күҙәтә. Ихласланһа, нурын ҡоя. Шунда был һантыйҙарҙы ла шәйләп ҡалырға мөмкин.

Үлән өҫтөндә — ысыҡ, баш осонда — тулған ай ғына. Тегеләрҙе нурға ҡойондора. Икәү ҡулға-ҡул тотоношҡан. Буш төбәкте һиҫкәндереп көләләр йә йүгереп китәләр. Хыялыйҙар: ойоған йылҡыларҙы өркөтәләр, үлән ысығын кисәләр. Әйгә табан юлдары… Улар ҡасан да бер был төбәктән ҡайтып керерме? Сатан Мөхәмәтйәндең лапаҫ башында йәм-йәшел бесән түшәлгән бит — шулмы улар өлөшөнә төшкән көмөш? Һаман хыял иленән, әкиәт донъяһынан айырылғылары килмәй. Ҡабат Мәғҙәнгә, кешеләр араһына ҡайтһалар, шул әкиәттәренән яҙып ҡуймаҫтармы? Бәхете бар икән был саяның. Хоҙай уны ла өлөшһөҙ итмәгән! Донъяла һәр кемдең үҙ ише була, тиҙәр, һәр бәндә ерҙә үҙ бәхетен, үҙенә тәғәйенен таба. Лайыҡлы затын, йәтеш шөғөлөн юллап ала! Миңзада өсөн ул бәхеттең исеме: ”Ғәтиәт!”

— Ғәтиәт!

— Һөйөклөм…

Улар тағы бер-береһенең ҡосағында ирей. Бүтән шатлығың, бүтән бәхетең кәрәкмәй, улар, эйе, үҙҙәренә тейешен тапҡан!

— Беҙ бәхетле бит, Ғәтиәт?!

— Бәхетле! Әйҙә, шулай ғына ҡушылып, бергә тороп алайыҡ та китәйек!

— Юҡ, Ғәтиәт, ул саҡта беҙҙе айырыуы тағы ла еңелерәк булыр: беҙ законһыҙ йәшәйбеҙ, ә был — кеше күҙе алдында уйнаш итеү генә... Шунда беҙҙе бөтәһе лә ғәйепләр һәм хаҡлы булыр. Ул саҡта беҙҙе мәңгегә айырырҙар...

— Әйҙә, боронғоса никах уҡытайыҡ...

— Нисек?

— Мулла икебеҙгә генә никах уҡыһын да...

— Әтейемдәр риза түгел.

— Мин үҙем һөйләшәм Мөхәмәтйән ағай менән!

— Файҙаһы юҡ. Әйттем дә инде, улар: "Котлоярҙар менән бер ҡат туғанлашып ҡараныҡ — бер ни ҙә барып сыҡмаç", — ти.

— Бөтәһе лә ҡаршы!

— Минекеләргә лә өлкән ҡыҙҙары яҙмышы — сүп! Әйҙә, бәлиғ булған, үҙ йүнен үҙе күрһен! Әйҙә, беҙгә баш ауырыуы булмаһын!

— Миңзада...

— Ғәтиәт, беҙгә Мәғҙәндә баçыр ер ҙә ҡалманы — әйҙә, ситкә сығып китәйек!

— Миңзада...

— Һин, көтәйек, ағайымдар бер ризалашыр, инәйем аңлар, тинең. Инде яҙ, йәй үтте, ни үҙгәрҙе? Күпме көттөк — көтә-көтә көтөк булып бөттөк — инде көтәһе ҡалманы!

— Эйе.

— Ағайыңдар ни ти? Инәйең һаман элеккене ҡыуамы?

— Белмәйем. Ул хаҡта өйҙә лә, абзыйымдар менән дә һүҙ ҡуҙғатҡаным юҡ.

— Башта ауыл советына барабыҙ, шунан — райсоветҡа, район ЗАГС-ына!

Баһауетдин бай йорто — хәҙер ауыл советы йорто. Ике ҡатлы. Аçкы ҡатында бай әүәл ашлыҡ, монаятын һаҡлаған, тиҙәр. Келәттәренең биге лә ныҡ булған. Совет власы сыҡҡас, ауылдың мәсеттән ҡала иң күркәм, иң мөһабәт йортон ауыл советы итәләр. Аçкы ҡатҡа участковый ҡулға алыныусыларҙы яба торғайны.

Ғәтиәт менән Миңзада иң арыу кейемдәрен кейҙе. Икенсе ҡатҡа илткән баçҡысҡа баçҡас, ир һулышын тигеҙләне. Тулҡынланыуҙан йөрәге дарçлай, күкрәк ситлеген ҡалҡан ише ҡаға ғына. Миңзаданың бите лә алһыуланған, ул тағы ла матурайып киткән. Ғәтиәт эстән буласаҡ хәләл ефете менән ғорурланып та ҡуйҙы. Ағалары яңылыша: Миңзада тел тейҙерерлек түгел, кеше араһына сыҡһаң да, йәмәғәт йортона инһәң дә, йөҙгә ҡыҙыллыҡ килмәç! Миңзада тулы аҡ битле, ҡыйғас ҡашлы... Ғәтиәт инде таймаç, тайпылмаç! Өҙә әйтер! Бүтән икеләнеп йөрөмәç! Ул хәл итте!

Ҡыйыуһыҙ ғына баçып алғы яҡҡа, бухгалтер бүлмәһенә үттеләр.

— Әсләм абзыйым кәрәк ине, — тине Ғәтиәт бухгалтер апайға.

— Әсләм сыҡҡайны.

— Ҡайҙа?

— Клубҡа тип йыйындымы, әллә өйөнәме?..

Йәштәр, беҙгә ашығаһы юҡ, көтәйек, тип стена буйындағы эскәмйәгә сүкте. Ғәтиәт — сабырһыҙ, түҙмәй, төпкө яҡ ишекте тартып та ҡараны. Шунан клубҡа йүгерҙе.

Бик тә кәрәк ине уға ағаһы, Миңзада менән улар һуңғы ҡат ауыл советында ныҡлап һөйләшергә тип йыйынды.

Әсләм клубта түгел, ә кабинетында эстән бикләнеп ултыра ине был ваҡытта. Ул мырҙаһы менән Миңзаданы тәҙрәнән яңылыштан ғына күреп ҡалды. Бухгалтерын киҫәтеп, эстән бикләнде лә ултырҙы. Өлгөрҙө. Тегеләр көтөр-көтөр ҙә ҡайтып китер…

Ғәтиәт ни етеҙ: ел кеүек барып етте клубҡа, ҡуймай, ағаһы өйөн дә барып ураны. Кире елдерҙе ауыл советына — бәлки… Өҙлөгөп, тыны бөтөп килһә, Миңзада — урынында, апай — урынында. Ҡәҙерлеһенең түҙемһеҙләнеүе йөҙөнә сыҡҡан.

— Нишләйбеҙ?

— Көтәбеҙ! — Миңзада сигенмәне.

Икеме-өсмө сәғәт үтте, бухгалтер апай төшкө ашҡа ҡайтып китте.

— Ә беҙ ошонда ултырабыҙ!

— Күтәрмәлә көтөгөҙ!

Шунда төпкө ишек асылды.

— Кем бар? Мин бында отчет менән ултырам…

— Беҙ, абзый!

— Ә, Ғәтиәт… Әйҙә, үтегеҙ! — Әсләм рәсми һөйләште. — Ни йомош?

— Әсләм ағай, беҙ… Ғәтиәт менән тағы ғариза килтерҙек! — Миңзада алғараҡ сыҡты, үҙен ҡыйыу тотто.

— Ғариза… Ә-ә…

— Әсләм ағай… — Миңзада сәмләнде. — Ғәтиәт менән беҙ өйләнешергә ҡарар иттек! Беҙҙең никахты рәсми рәүештә теркәүегеҙҙе һорайбыҙ…

— Тәк, тәк… — Әсләм һүҙҙәрен һайланы, тамаҡ ҡырҙы, ултырғысына йәтешләп ултырҙы, терһәктәре менән өҫтәлгә ныҡлап таянды.

— Совет закондарына ярашлы, һеҙ беҙҙең теләккә ҡаршы бара алмайһығыҙ… — Миңзада алдан алды.

— Уныһы шулай, Миңзада һеңлем, закон буйынса ул шулай — бына беҙҙең үҙ, әҙәмсә тиәйемме, тәртиптәребеҙ ҙә бар бит әле… — Әсләм һуҙҙы, фекерен йәтешләп әйтеп бирә алманы.

— Ниндәй тәртиптәр ул? — Миңзада ҡыҙа барҙы, был сибәр бисәгә килешә ине.

— Туғандар араһындағы тәртиптәр, тиәйемме?

— Аңлашылмай.

— Һеңлем, һеҙгә билгелелер: инәйем был никахҡа ҡаршы…

— Мин һеҙҙең инәйегеҙ менән никахҡа инмәйем!

— Беҙ — мин, Зөлҡәрнәй абзыйым…

— Мин һеҙҙең менән дә, Зөлҡәрнәй ағай менән дә никахҡа инергә уйламайым!

Әсләмдең бер дәлиле лә ҡалманы.

— Абзый, — тине Ғәтиәт, — яҡшылыҡ менән әйтәм: беҙҙең никахты теркәт! Бөтәһе лә законлы! Беҙ Миңзада менән күптән килешкәнбеҙ.

— Ә инәйем ни ти? Уның хаҡында һин уйланыңмы? Ҡайҙа йәшәргә уйлайһығыҙ?

— Унынһы беҙҙең эш, башҡа сығырбыҙ...
— Ярай.
— Абзый, беҙ оҙаҡ көттөк, күп инәлдек...
— Хәҙер?..
— Әсләм ағай, беҙ хәҙер райсоветҡа барабыҙ, район ЗАГС-ына! — Миңзада тағы араға килеп ҡыҫылды. — Ул саҡта беҙгә үпкәләмәгеҙ... Беҙ, Ғәтиәт әйтмешләй, бик оҙаҡ көттөк. Һеҙҙең өҫтән йөрөмәҫкә, районға бармаҫҡа теләнек — былар аңлармы, беҙҙең менән бер килешерме, тип өмөтләндек.
— Абзый, үҙең ҡара...
— Беҙҙең түҙемлек бөттө, Әсләм ағай! Әгәр был юлы ла кире борһағыҙ йә ғаризаны йыртһағыҙ, юғары органдарға мөрәжәғәт итәсәкбеҙ! Ғәтиәт әлегәсә "абзыйыма һүҙ теймәһен, уға ҡыйынлығы төшмәһен" тип кисегеп килде.
Әсләм Ҡотлояров ауыҙын йомдо, Миңзада хәбәрен теҙҙе, инде Ғәтиәткә ҡыҫылырға ла урын ҡалдырманы.

## VIII

Миңзада тағы Нәҡиә әхирәте менән кәңәшләшеп ҡараны. Ул әхирәте аша ҡотлоярҙар йортондағы бар яңылыҡты белеп торҙо.
Хәмиҙә ҡарсыҡ буйҙаҡ улы Ғәтиәт өсөн көйөп, түшәккә йығылған, Зөлҡәрнәй ҙә, Әсләме лә килеп баҫмай. Хатта Биләндәге ҙур түрә Камилы ла өйөнә юлды оноткан. Ағайҙар Ғәтиәттән йөҙ сөйөргән, инде төп йортта бер ҡорға йыйылмайҙар, атай васыяты, ҡотлоярҙар бурысы хаҡында ла бәхәсләшмәйҙәр. Яндырай Ғәтиәт тә, тыны бөтөп, ҡотлоярҙар бәләһе хаҡында тамаҡ ярмай. Мәғәндә власть кем ҡулында, Ҡотлояр балалары атай васыятын тотамы, илгә баш булып торалармы? Ҡасан ғына улар ер һелкетә баҫып йөрөй ине: Зөлҡәрнәй — колхоз рәйесе, Әсләм — ауыл советы башлығы... Зөлҡәрнәйҙе урынынан төшөрҙөләр, вазифаһын Әбхалиҡҡа тапшырҙылар. Мәғәндә власть ҡотлоярҙар ҡулынан ысҡына, оло балтыр Сабирйән Тирмәнтау аша-һындағы уттарҙа йәшәп ята, Рәшиҙә — Әпшәндә, Камил менән Мазһар ҙа ситтә.
Илленсе йыл аҙаҡтарында, МТС-тар бөтөрөлөп, бөтә техника колхоздарға таратылғас, ауылда ысын власть ауыл советтары ҡулынан китте. Колхоз ашлығын сәсә — халыҡҡа аш өләшә. Халыҡ аҡсаны ла, өнөрө-көрпәһен дә, һаламын, аты-арбаһын, тракторын да колхоздан ала. Ә ауыл советының ҡара айғырынан башҡа нимәһе бар? Халыҡтан йыйған һалымға кәртә-ҡура йүнәтһә, ҡойоларҙы таҙартһа, клубтарҙы ҡараһа, ярай ҙа...
Зөлҡәрнәй ҙә бар ауылға баш ине. Бөтә кеше уға йөҙ һыуын түкте. Йайлап ҡотлоярҙар ҡояшы байый, уларҙың боронғо даны һүнә.
— Ҡотлояр балалары, һеҙ ҡайҙа? Сабирйән, Камил, Рәшиҙә, Мазһар, ситтә солтанмы һеҙ, әллә олтанмы? Солтан булһағыҙ, ҡайтып бер күренеп, бер ҙә юҡҡа маҡтанып китер инегеҙ. Төп йортта тағы бер ҡор булып ултырһағыҙ ҙа... Ҡотлоярҙар идеяһы хаҡында бәхәсләшер, атай васыятын үтәү хаҡында һөйләшер инегеҙ. Мәғәндә властьы нисек ҡулға кире төшөрөргә, нисек данды ҡайтарырға? Атай ни тигәйне, ниндәй нәҙер әйтеп ҡалдырғайны һеҙгә, уландар? Ҡотлоярҙар үҙ туп-

рағында ерегергә, илгә баш булырға бурыслы! Бына шул ул — ҡотлоярҙар идеяһы, шул уларҙың тормошоноң бөтә мәғәнәһе!

Төп йортта хужа булып ҡалған Ғәтиәт ни уйлайҙыр, ниндәй хыялдар менән йәшәйҙер? Оло килен Нәҡиә быныһын, ҡатышмағас, бик белеп бөтмәй. Ғәтиәт киренән почтаға монтер булып урынлашты, Миңзада менән аралары ныҡ яҡынайҙы.

— Миңзада, һеҙ Әсләмде өгөтләмәгеҙ — хәйлә менән алдырығыҙ. — Нәҡиә тынын тотто. — Әсләм эсә бит, ә эскән кеше иҫһеҙ...

— Әсләм ағайҙы эсереп нишләтәйек?

— Алдынан артҡансы һыйлағыҙ ҙа... шунда Ғәтиәт бер ыңғай никах кенәгәһен дә тултырып алһын!

— Әллә?

— Шулай итең, әхирәт, шулай итең? Эскән кеше бисәһен дә һатып ебәрә ул...

Нәҡиә икеләнмәне, кәңәш итте лә, бөттө, ҙур эш атҡарған эшем эйәһеләй ҡыланды, ә Ғәтиәт иһә был тәҡдимгә ҡуш ҡуллап ризалашты. Гүйә, батып барған ерҙән һалам осона тотона.

Ғәтиәт бал янына ҡушып араҡы ла алды. Ағаһын ныҡ һыйларға йыйынды егет.

Эңерҙә, эш көнө осланыуға ғына барып керҙе ауыл советына.

— Ғәтиәт...

— Абзый...

— Тағы теге йомошмо?

— Юҡ та, бер үҙем ултырып, көй китте, мәйтәм, абзыйым янына, аулаҡҡа барып ултырайым әле... — Ғәтиәт ғүмерҙә булмағанса хәйләләште.

— Дөрөҫ иткәнһең, энекәш. Мин дә йонсоп киттем: отчет, өй... Теге соланды әйтәм. Таҡта күп китте.

— Ә-ә...

— Иҫлә, энекәш, нигеҙенә һин Игентауҙа таш соҡошоп йөрөнөң!

— Хәтеремдә.

— Ағасын да икәү Берҙемгә барып йыҡтыҡ, Зөлкәрнәй абзыйым биргән трактор менән икәү ташыныҡ.

— Хәтеремдә, абзый. Игелекте онотмауың өсөн рәхмәт. — Ғәтиәт һүҙе ялғаныуына, яйы яйға тап килеп тороуына һөйөндө. — Әтү Зөлкәрнәй абзыйым игелекһеҙ кеше — күпме ярҙамлаштым, бер рәхмәте юҡ.

— Ғәтиәт, өйҙө һалышыуҙа ярҙамың ҙур булды, Баныубикә еңгәң дә гел "балдыҙ уңған, ярҙамсыл", тип һөйләй...

Һүҙҙәр беректе, телдәр сиселде. Әсләм үҙенсә Ғәтиәт туғанын ярата, уға ылығып бара ине. Ҡустыһынан бер серен дә йәшермәй.

— Бынау Күпкәк Әбхалиҡ ныҡ аяҡ сала, энекәш, эшләргә бирмәй. Үҙенең сессияларға, ултырыштарға йөрөмәүе етмәгән, райсоветта минең яманатты һата.

— Әбхалиҡ — яуыз... — Ғәтиәт тағы ҡойҙо ҡырлы стаканға.

— Беҙҙең нәҫелде күрә алмай, нисек тә ҡотлоярҙарҙы юлдан алып ташларға маташа! Һин ишетмәнеңме әле? Юҡтыр... — Әсләм ҡустыһы ҡолағына эйелде. Ул Ғәтиәт туғанынан сер йәшермәй. Кесе йәштән яҡын булдылар. — Зөлкәрнәй абзыйымдың аҫтынан тағы һыу киткән...

— Нисек? — Ғәтиәт тертләне.

— Абзыйымды райком бюроһында ныҡ теткәндәр, райондан ишетеп ҡайттым.
— Әбхалиҡтың ғына этлеге!
— Шуның эше!
Туғандар ҡайғырышып, оҙаҡ ҡына стаканға йоғонмай ултырҙы.
Ҡотлоярҙар башына яңы бәләләр ябырылды. Инде нисәнсе ҡат был зат хәтәр алдында йөҙмә-йөҙ тороп ҡалды. Ауыл советы эсендәге ауыр тынлыҡты бераү ҙә башлап боҙорға ҡыйманы, күрәһең, туғандарҙың һәр ҡайһыһы үҙенекен уйлай ине.
— Шулай, энем, Мәғҙәндә яйлап власть ҡулдан китә, тәхеткә бүтәндәр үрмәләй...
— Шул килмешәк Күпкәк! — Ғәтиәт ярһыны.
— Ҡотлоярҙарҙы ян-яҡтан ҡыҫырыҡлайҙар, юлдан алып ташламаҡсылар. Һиҙәм, энем: абзыйымдан һуң сират — миңә... Шунан хуш, ауылым, минән сәләмдәр көт — илгә килмешәктәр баш була.
Ҡотлояр балалары ҡайғырышып ултырҙы. Ағай кеше, әллә оло хәсрәтенән, тиҙ биреште, бал менән араҡы ла буталғас, башына һуҡты.
— Абзый йәл... — тине Ғәтиәт әҫәрләнеп.
— Йәл булмай, үҙебеҙҙең ағай бит! Йән тартмаһа ла, ҡан тарта. — Әсләм фәлсәфә һатты. — Абзыйым былай ҡуҡыр ата ҡаҙ инде: эш башына менһә, туғандарҙы күрмәй.
— Әйтәм дә, абзыйым игелекһеҙ... — Ғәтиәт тә йөпләне Әсләм ағаһын. — Күпме булыштым, бер тәгәс сәйен күргән юҡ, еңгәм дә ен кеүек — тупһаһына баҫтырмай!
— Шулай.
— Теге ваҡыт абзыйым — ләм-мим, ә еңгәм ултыртып ҡуйҙы. Шунан бирле ишектәрен асҡаным юҡ, абзыйым үҙе лә, терәлеп тороп, бер инһәсе. Күпме ярҙам иттем — Берҙемдән ағас ташыным, Ҡарлыхандан ҡайтҡанда...
— Икәү йөрөнөк, Ғәтиәт, абзыйыма урманға! Ҡарлыхандан ҡайтҡанда йөк менән ауҙыҡ, йөк башында икәү инек. Прицеп автомашинанан ысҡынды! Нисек шунда, түңкәрелеп, йөк аҫтында ҡалмағанбыҙ?
Тағы бушатып ҡуйҙылар.
— Ярай, энекәш, сауап булһын! Үҙебеҙҙең ҡан...
— Уныһы шулай... — тип килеште тағы ҡусты кеше. Тағы ҡойҙо, уйын-маҡсатын онотманы.
— Йәл, — тине Әсләм, — Мәғҙәндә беҙ аҫта ҡалабыҙ, ә килмешәктәр өҫкә ҡалҡа.
— Атай васыяты бер ине, абзый: Мәғҙәндә власты ҡулдан ысҡындырмаҫҡа, бер ҡасан да һис кемдең табаны аҫтында олтораҡ булмаҫҡа!
— Ҡарт башлы булған, уҫал булған! — ауыр йөк йөкмәтеп киткән, Ғәтиәт, беҙҙең иңгә — сүкмә, сигенмә!
— Атай васыяты изге, абзый... — Ғәтиәт тағы рухланды. — Беҙ, балалары, атай әйткәнде тикшерә лә, кире ҡаға ла алмайбыҙ... Бары үтәргә бурыслыбыҙ!
— Хаҡ, энем, атай васыяты тикшерелмәй! — Әсләм ныҡ биреште, теле көрмәлде; хәҙер ул күберәген лозунгылар менән һөйләй башланы. Ғәтиәт һаман яйлы әмәлен көттө.
Ғәҙәттә, ҡорҙа ағайҙары ла ҡатышһа, Әсләм бик туғарыла алмай. Әле Ғәтиәт ҡустыһы менән йәйелеп ултырҙы, үҙен тыйманы.

— Бына һин, энем…
— Нимә мин?
— Инәйемде тыңламай бисә апҡайтырға йөрөйһөң… — ҡотлоярҙар затына мәсхәрә! Улар бер ваҡытта ла ундай түбәнлеккә төшмәгән, алһалар…
— Мин…
— Һин йәш… тағы дан итеп туй яһарбыҙ!
— Миңә һеҙҙең туйығыҙ кәрәкмәй!
— Тәк, энем, ҡотлоярҙар туйһыҙ, ҡасып-боҫоп бисә йәрәшмәй!
— Абзый, һин никах кенәгәһен тултырып бир — шул ғына минең һиңә үтенес! Ҡағыҙ киҫәге, ҡулың ҡаламы?
— Ҡалмай. — Әсләм икеләнгәндәй итте.
— Ирҙәрсә, туғандарса ғына аңлашайыҡ та, абзый… Минең дә йәш бара, ғүмер үтә, мин дә бүтәндәр кеүек әҙәмсә башлы-күҙле донъя көтөп алып китәйем…
— Тәк-тәк… Кенәгә тултыр, тиһеңме?
— Эйе, абзый…
— Ә инәйем нишләй?
— Беҙ башҡа сығабыҙ!
— Юҡ, барыбер мин риза түгел — балаһы бар… Ищу минең Тәлғәт бажанан тапҡан…
— Ы-ы... — Ғәтиәт уртын сәйнәне. Әсләм әллә һиҙмәне, әллә һиҙмәмешкә һалышты. Ғәтиәт шунда саҡ самаларҙан ашманы, саҡ түҙем янсығын йыртып ташламаны: бер ынтылышта ағаһын бөрөп ала ла стенаға йәнсетә ине. Бары тешен ҡыҫты. — Абзый…
— Әйтмә лә, инәлмә лә.
— Аб-зы-ый…
— Мә, лутсы эс! Еңеләйтер.
— Абзый, мин йә райсоветҡа өҫтөңдән барам, йә ауылдан сығып китәм… — Ҡусты асырғанды.
Тағы эстеләр. Ҡусты нисек тә үҙен ҡулға алырға тырышты, нисек тә аҡылын юймаҫҡа булды, ә ағай ҡаты торҙо, ҡустыһы ыңғайына төшмәҫкә ҡарар итте. Иҫерек булһа ла, иҫе дөрөҫ ине. Оло урам буйлап атланылар. Ҡусты ағайҙы биленән ҡарманы, сөнки Артҡы урам ҡараңғы, соҡор-саҡырлы. Өйө тәңгәлендә Әсләм һөрлөгөп китте. Ғәтиәт, мәленән файҙаланып, асҡысты ҡулға төшөрҙө.
— Асҡысты! — Әсләм һаман кеҫәһен ҡапшай, өҫ-башын ҡаға.
Ғәтиәт ағаһынан ҡотолдо ла кирегә йомолдо. Йәненә осҡон йоҡто. Уны, ахырыһы, усындағы асҡыс ярһыта, шул тимер киҫәге шаштыра ине. Сығырынан-сыға инде был әҙәм, ҡабалана-ҡорһалана, йөрәге ҡупты, дөп-дөп типте, гүйә, бар урам буйы, бар Мәғҙән иле яңғырап торҙо.
Кинәт кенә төштө шул уй башына. Хәҙер ул уны алға әйҙәне. Әллә ниндәй шойҡан ерҙән күтәреп алды ла юғарыға, бушлыҡҡа ырғытты, гүйә, аяғы ергә теймәне. Асҡыс — ҡулда!
Ғәтиәт никах кенәгәләрен тиҙ тапты, береһен шундуҡ кеҫәһенә тыҡты. Зиһене асыҡ, хәрәкәттәре теүәл. Никах теркәү китабын эҙләп оҙаҡ соҡондо, инде өмөттәрен өҙөп бөткәйне. Никах теркәү китабында бер ниндәй кәсер сисеп тораһы юҡ ине: ҡабаланманы, етди тотондо, алдағы никахтарҙы нисек теркәүҙәренә ҡарап эш итте. Һандарын, никах кенәгәһе билдәләрен дөрөҫ итеп күсереп яҙҙы, исем-шәрифтәрен ҡуйҙы. Икеһенең имзаһын да оҡшатырға тырышты. Ишекте эстән бикләп ал-

ғайны. Ашыҡмаҫҡа, документтарҙы теүәл тултырырға! Ағаһы, иҫерек баш, никах теркәү китабын ҡулына тотоп ҡарар тиһеңме; берәйһе өйләнгәнсе тағы ике-өс ай ғүмер уҙыр. Шунан бөтәһе лә онотолор, бындағы яҙыуҙарға ла береһенең дә иҫе китмәҫ! Береһенең дә эше булмаҫ шул ҡағыҙҙарҙа!

Әсләм ағаһы өсөн, секретарь, шаһиттар өсөн дә ашыҡмай имза сәпәп сыҡты. Үҙенә шаһитлыҡҡа монтер иптәшен алды, ә Миңзадаһы яғынан йәш кассир ҡыҙҙың исем-шәрифен теркәне. Ярай, исем-шәрифтәрен, аталары исемен белә. Зиһене үткерләнгән, араҡы шауҡымы "һә" тигәнсе башынан осоп бөттө. Хатта үҙе лә аптыраны үҙенең шәплегенә, һалҡын ҡанлы эш итеүенә. Башы сәғәттәй тигеҙ эшләй, телдәре мейеһенә һуға. Бармаҡтары ҡалтыранһа ла, нисауа.

Бөтә был мәшәҡәтле эште ҙур диҡҡәт менән башҡарҙы кейәү егет. Иңенә, гүйә, мең ботлоҡ гер аҫҡандар — оло яуаплылыҡ шулай баҫа. Тешен ҡыҫа, иренен ҡымтый. Аңлай: ул хәҙер үҙе өсөн дә, ише өсөн дә тырыша. Әҙәмсә булған булһа, улар әле йәнәш торорҙар, берберетенә иң-терәк булырҙар ине. Ауыл халҡы ла, туған-тыумасалары ла әйләнә-тирәлә теҙелешеп, ҡеүәтләп торһа, ике йәш йөрәктең ҡауышыуын тәбрикләп ҡаршы алһа ине лә... Былай ҙа ҡыйын йөк булмаҫ ине йөрәктәренә. Киреһенсә, йәндәре тынысланып, йөрәктәре тигеҙ итеп тибер, улар берәүҙән дә ҡасмаҫ, бер ниндәй мөйөшкә лә боҫмаҫ ине. Ғәтиәт тә әлегеләй йәшертен-боҫортон, уғры һымаҡ ҡасып-боҫоп үҙен-үҙе никахлап булашмаҫ ине. Мәжбүр иттеләр! Ағалары ла, әсәһе лә аңламаны. Әсләм ағаһы, кәзә тәкәһеләй, аяҡ терәп серәште, әсәһе "йә ул, йә мин" тип өҙә һуҡты — бөтәһе лә ҡаршы сыҡты, барыһы ла ҡара яу булып баҫты; үкһеҙ йәндәрҙе ҡабул итмәне кешеләр, үҙ араларына тигеҙ хоҡуҡлы итеп алманылар. Әллә улар ҡәһәрләнгән заттармы, маңлайҙарына мөһөр баҫылғанмы? Кешеләр уларҙы ниңә шул көнгә төшөрҙө?

Шул арала Ғәтиәттең башынан мең төрлө уй үтте. Үҙ-үҙен ҡайыҙланы: ул — уғры, ҡасып-боҫоп үҙ-үҙен никахлы итә! Төн заманында, кеше күҙенән ҡасып, үҙен-үҙе өйләндерә, үҙен-үҙе һөйөклөһө менән ҡуша! Тағы йәмғиәт, ауыл советы хоҡуҡтарын үҙ иңенә алырға кем әле ул?

Бөтәһен дә еренә еткерҙе, теүәл әтмәләне, шай, бәндә — шунда ишек шаҡынылар. Бурҙың йөрәге өҙөлөп төштөмө, күҙ алмалары күсәренән ысҡындымы... Бур, никах китабын шкаф төбөнә атып, ишеккә ташланды. "Ишек эстән бикле бит! — Ул әҙерәк тынысланды. — Ҡарауылсы ауыл советында ут барын тыштан шәйләнеме икән? Хәҙер был ҡапҡандан нисек ҡотолорға?" Бур утты һүндерергә уҡталды, әммә, башы етеп, тыйылды: әйҙә, ут һүндерелмәй ҡалған, тип уйлаһындар! Тәҙрәгә барҙы. Берәй тәҙрә, моғайын, асылалыр, тип өмөтләнде. Стенаға һарығып һулышын тигеҙләне. Стена һалҡынлығы үҙәгенә үткәндәй итте. Мейеһен "Ҡарауылсы хәҙер милиционерҙы саҡыртыр" тигән уй телде. Уға хәҙер нисек тә шул ағас ҡапсыҡтан ҡотолорға ине. Көттө. Ҡарауылсы торор-торор ҙа китер! Ул милиционерҙы тапҡансы был ишекте асып, бикләр ҙә зым-зыя булыр!

Тыштан йоҙаҡты ҡайыра башланылармы? Бур тәҙрә йөйөн тапманы, ҡаңғырып, мөйөштә ҡатып тик торҙо. Көттө. Ахыр барып утты һүнде-

free-standing:
рергә башы етте, ни булһа ла була, тип көттө. Ишекте тыштан барыбер аса алманылар; тауыштар тынған, өндәр баçылған бер мәлдә бур үҙе йоҙаҡҡа асҡыс тыҡты… Ишек асылып киткән ыңғайға тышҡа атылды. Юлайҡан кемделер бәреп йыҡты, шай, икенсе ҡаттан һикереп кенә төштө лә ҡараңғылыҡ эсендә юғалды.

Бур, әлбиттә, үҙе бәреп йыҡҡан бәндәнең, телен арҡыры тешләп, ауыҙынан күбек ағыҙып, иҫһеҙ ятып ҡалыуын уйламаны, йәһәтерәк үҙ йәнен ҡотҡарырға була атлыҡты. ”Тиҙерәк, тиҙерәк! Әсләм ағаһына етеп, был шөкәтһеҙ, был һалҡын асҡыстан ҡотолорға ла арыраҡ, төпкөлгәрәк ҡасырға! Һиҙмәһендәр ине, белмәһендәр генә! Теге бәндә, моғайын, ҡарауылсылыр, бурҙы танымағандыр… Әсләм дә, иртән асҡыс ҡулында булһа, юҡ, тамсы ла ғәйепле булмаç! Юҡ, ауыл советына төшөүсене ғүмерҙә лә таба алмаçтар!”

Үҙ-үҙен аҡланы, күңеленән шулай йыуатты бур. Ярай, Күльяҡ урамына ҡасҡан ерҙән, башы етеп, Артҡы урамға ҡайырҙы. Асҡыс бәйләмен ағаһы йорто күтәрмәһенә һалып китте. Үҙе кире Күльяҡ урамына сапты. Был кистә ул әллә ниндәй йөктәр тартты, әллә ниндәй эштәр атҡарып өлгөрҙө.

— Кем? — Миңзада уның ҡулын айырмаймы? Әллә ул ҡатыраҡ ҡағамы, әллә бик-бик ҡабаланамы? — Тәҙрәне ярып бара ла! Ғәтиәт?!.

— Мин!

— Нимә?

— Миңзада, мин…

— Ағайың менән һуғыштыңмы?

— Юҡ, никах кенәгәһе алдым…

— Ҡайҙан?

— Миңзада, мин беҙҙең никахты теркәнем! Әйҙә, ҡасайыҡ!

— Бер ни ҙә аңламайым. Асыҡ итеп һөйлә! — Күлдәксән килеш ҡаршы сыҡҡан кеше лә ҡалтыранып торҙо.

— Мин ауыл советынан никах кенәгәһе алдым…

— Нисек? Әсләм ағай бирҙеме? — Миңзада аңра малдай башын сайҡаны.

— Юҡ! Мин уны урланым…

— Юҡ, бер нимә лә аңламайым! — Миңзада ярһыны.

— Мин абзыйымдың асҡысын урланым, аҙаҡ… — Ғәтиәт көс-хәл хәбәрен бәйләне.

— Ғәтиәт!

— Миңзада!

— Һин нишләп ауыл советына төштөң?

— Мин никахыбыҙҙы теркәнем…

— Бөлдөрҙөң… Ҡылғанһың эште, бешергәнһең бутҡаны!

— Миңзада, бына — кенәгә…

— Кем һиңә уны алырға… урларға ҡушты?

— Мин үҙем…

— Нимәгә? — Бисара баçылманы. — Ниңә кәрәк ине һиңә ул кенәгә?

— Миңзада…

— Иçерек баш! — Бисара тынманы. — Хәҙер ултыртып ҡуйһалар… Һинең аҡылың бармы-юҡмы ул? Башың эшләйме-юҡмы? Иçерек баш, мәкинә баш!

— Миңзада…

— Шулай документ эшләйҙәрме? Кемгә хәжәт хәҙер һинең ул кенәгәң? Теләһәң, ЗАГС-тан ярты көндә һиңә законлы никах танытмаһы алып ҡайтып бирәм! Нишләнең һин, ни ҡылдың, Ғәтиәт?

— Миңзада…

— Үҙ иркең менән боғалаҡҡа тығаһың башыңды! Ялған документ өсөн, беләһеңме, нишләтәләр? Төрмә!

— Миңзада…

— Әйт, кем ҡушты һиңә? Кем өйрәтте ауыл советына төшөргә? — Бисара үртәлде генә. — Мин һиңә ағайыңа барып һөйләш, эсерһәң, эсереп ҡара, тип кенә әйттем бит… документ урла тип өйрәтмәнем!

— Миңзада, ғәфү ит!

— Ай, иҫәрем, ай, шаҡайым минең!

Ике бисара йән хәҙер ҡосаҡлашып йәш түкте.

Төбәк иңе лә шаңҡығайны, күк битендәге йондоҙҙар ҡатып ҡалған, ерҙә лә, күктә лә ауаздар тынған, хәрәкәт туҡтаған, гүйә, ваҡыт үҙе шымтайып ҡалған — алға ла, артҡа ла тартмай. Ваҡыт ағышы туҡтаған, өйҙәр, ҡобараһы осоп, тымған, урамдар буш, бағаналар өнһөҙ. Әйтерһең, булмыш өнһөҙлөккә тарыған, йән эйәләре ҡайһы ҡайҙа ҡасыпбоҫоп бөткән, өндәре тығылған. Был ниндәйҙер бушлыҡ даръяһы… Икенсе ил. Ғәтиәт ҡайҙалыр йыһандың икенсе бер осона барып сыҡты, Мәғҙән донъяһы әллә ҡайҙа тороп ҡалды. Был мәхшәр ҙә булмаған кеүек, бары ише — йәнәшендә… Миңзада менән улар бүтән донъяларға тарыны. Ҡосаҡлашып шымғандар, һалҡындан тәндәре ҡалтырана, сит-ят илдәрҙә йөрәктәре өшөп-бөрөшөп тора. Ҡайһы тарафтарға юлыҡтылар, ниңә күҙ йәштәре кипмәй, йәндәре урынына ултырмай? Ни булды, ҡайҙа улар, ни ҡылдылар? Ниңә әүәлге хәлдәренән, үҙҙәренең күнеккән Мәғҙән иленән айырылдылар?

Бында — шыҡһыҙ, был планетала өшәнес, боҙ ҙа таш… Боҙлоҡ батшалығы! Кем ҡыуҙы, кем ҡәһәрләне уларҙы, ни өсөн шундай аяуһыҙ язаға тарттырҙылар бисараларҙы кешеләр? Улар Мәғҙән иленән ниңә ҡыуылды, ниндәй енәйәт өсөн шундай язаға тарттырылды? Кешеләр уларҙы сит планетаға илтеп ташланы ла онотто.

— Ғәтиәт, нишләйбеҙ хәҙер?

— Белмәйем.

— Ғәтиәт, мине нығыраҡ ҡосаҡла, йәнем!

— Минең дә йөрәгем өшөй…

— Әйҙә, ул хаҡта уйламайыҡ, ҡәҙерлем, инде таң да ата…

— Иртәгә ни булыр?

— Мине нығыраҡ ҡосаҡла, таң да атып килә, тим бит…

— Һуңғы ҡат, танһығым ҡанғансы, тиһеңме?

— Һөйләшмә! Мине нығыраҡ ярат! Шулай, шулай! — Сибек бисә көслө ир ҡосағында иҙрәне. — Бер ни ҙә уйлағым, бер нимә хаҡында ла һөйләшкем килмәй! Һин дә өндәшмә!

— Өндәшмәһәң, лутсы — тейешһеҙен ысҡындырмаҫһың, тиһеңме; эшләмә бер эш тә — эшләһәң, барыбер килештермәҫһең, тиһеңме?

— Өндәшмә. — Бисә наҙланды. — Һөйөклөм, мин һине үлеп яратам…

— Мин дә, Миңзада…

— Ғә-ти-ә-тем…

— Һө-йөк-ләм…

— Ышан, беҙҙе бер кем дә, бер ни ҙә айыра алмаç!

— Һөйөкләм, бел: мин һине генә яраттым… Нисә бисә йәрәшһәм дә, һинһеҙ хушһынманым.

— Ғә-ти-ә-тем…

— Миң-за-дам…

Күктәр ҙә ишетте был өндәрҙе, урмандар ҙа, алыçтағы тауҙар ҙа һиçкәнде; төбәк тә, ҡаялар ҙа кире ҡаҡлыҡтырҙы был ауаздарҙы: ”Ғәтиәт — Миңзада”. Әй ҙә, өнөн тыйып, йөрәктәр тибешен тыңланы. ”Ғәтиәт — Миңзада…” — үләндәр шыбырҙашты, тулҡындар елкенде, еләç елдәр алыç-алыç тарафтарға алып китте ул ауаздарҙы.

Улар таң алдынан Сатан ҡарттың йәм-йәшел бесән түшәлгән лапаç башына менеп ятты. Арманһыҙ булып йығылдылар хыялыйҙар. Тәүләп законлы рәүештә ир менән бисә сүрәтендә кәләш йортонда ҡалдылар.

Төштәре лә хас туйҙағыса килешле, һүҙҙәре ижап уҡығандағыса тантаналы:

— Ғәтиәт, хәҙер беҙ ир менән бисә хоҡуғында!

Миңзада теге никах кенәгәһен үҙҙәренең исеменә тултырған арала Ғәтиәт әллә ниндәй сихри хыялдарға сумды.

— Миңзада, хәҙер мин Мәғҙәндә иң бәхетле кеше!

Миңзада иһә, бәхет бетеүе эләктергәндәй, шул кенәгәгә йәбеште.

— Совет Социалистик Республикалар Союзы исеменән һеҙҙе, Ғәтиәт Ҡотлояр улы Ҡотлояров, һәм һеҙҙе, Миңзада Мөхәмәтйән ҡыҙы Низаметдинова, законлы никахығыҙ менән ҡотлайым, бәхетле булығыҙ!

Был тәбрикләүҙән һуң законлы ир менән бисә, ниһайәт, еңел һулап, ҡосаҡлаша. Ниһайәт, улар тәүләп законлы ҡушыла. Был — иç киткес яңы, яҡты, ғүмерҙә һис татып ҡарамаған тойғо.

Был сер, был тылсым хаҡында был икәүҙән башҡа донъяла әле берәү ҙә бер ни ҙә белмәй. Иртәгә иһә бөтәһе лә ап-асыҡ, билгеле буласаҡ.

## ЕТЕНСЕ БҮЛЕК

### I

Уны һаташҡан затҡа сығарырҙар, торғоҙоп маташырҙар. Теге ауатүнә бер-ике аҙым бара ла тағы йығылып китә. Уны торғоҙалар, ҡултыҡлап алалар — ул үҙенекен генә туҡый: ”Бурҙар…” Ул шулай һөйләнәсәк, көнө буйы иçен йыя алмай һаташып ятасаҡ, ул бүтән мәңге һауыҡмаясаҡ. Уға ҡул һелтәрҙәр, үҙен аҙаҡ Тәхиәт Ғәләү тип атарҙар… Урам буйлап кеше көлдөрөп кенә йөрөйәсәк, малай-шалай үсектерә, таш тәмер, ә ул тегеләрҙе баçтырып алып сығып китер… Уның кисергәне көлкөмө, йәмәғәт, ул асҡан енәйәттең хаҡы ниндәй? ”Көлкө лә, ҡыҙғаныс та”, ти халыҡ быңдай осраҡта.

Беҙҙең бүтән геройҙарыбыҙ — төн убырҙары ҡайҙа ҡасты? Әлбиттә, Күльяҡ урамына! Шунда бурҙар йәшәй, төн ҡараңғылығы шаршауына ышыҡланып ята. Ҡуянсыҡ урамы — коммунист ҡотлоярҙар урамы, Артҡы урам — бай бәхтейәрҙәр төйәге, Күльяҡ урамы — Мәғҙән бурҙары төбәге, шунда уларҙың өңө.

…Күптәр төн эсендә аҡылдан яҙған ҡарауылсы һамағына бер ниндәй әһәмиәт бирмәһә лә, ауыл советы был хәлгә ҡул һелтәп ҡуйманы. Ауыл советы башлығы Әсләм Ҡотлояров үҙе ең һыҙғанып тотондо. Юҡҡа ғына армияла алты йыл особист булып хеҙмәт итмәгән: ҡайҙа ҡыйыш ятҡанды, ҡайҙа сыйыҡ сыҡҡанды ул күрә. Армияла ла особистарҙы һәр әйберҙән шикләнергә өйрәттеләр. Бында — хәтәр: ауыл советы төнө буйы асыҡ торған, иртән конюх килеүгә ишек төбөндә ҡарауылсы аунаған…

Элекке особист эште ҡыҫҡа тотто: Шиҙәлеләге район милицияһы бүлегенә шылтыратты, үҙе шул арала берәүҙе лә ауыл советына яҡын юллатманы. Дөрөҫө, ауыл советы ҡамап алынды. Әсләм үҙе лә, бүтәндәр ҙә бер әйбергә лә йоғонмай — әйҙә, тәфтишселәр килһен, енәйәтте ҡыҙыуында асһын, енәйәтсене эҙ яҙҙырмаҫ борон тотһон! Тимерҙе ҡыҙыуында һуғырға тейеш Әсләм Ҡотлояров!

Район милицияһынан килтерелгән эт тикшереүселәрҙе Күльяҡ урамына, тура Сатан өйөнә алып китте. Шунда, ҡапҡа алдында оҙаҡ ҡына өрөп торҙо, тик ихатаға инмәне.

Быҙау ҙурлыҡ немец овчаркаһынан күрше-күләндең ҡото осто. Ярай, ул кире китте. Артҡы урамға алып сыҡты. Әсләм Ҡотлояров йорто! Рәйес үҙе был мәлдә ни кисергәндер, әммә эт тағы күтәрмәлә өрөп-өрөп торҙо ла, бәхеткә, өйгә үтмәй кире боролдо. Тағы Күльяҡ урамына, тура Сатан ҡарт ихатаһына йүнәлде. Тағы эскә үтмәй Сатандың лапаҫ тәңгәлендә әүен артында лауылданы.

Ҡарттар өйҙә ине, Миңзада — эштә, сельпо контораһында. Ҡарттар, ҡурҡыштарынан йөҙәп, ары ни булыр икән тип, яҙмыштарының хәл ителешен көттө.

Хәмиҙә ҡарсыҡ тағы, инә бөркөттәй, яратҡан урынына ҡунаҡланы. Ҡуянсыҡ урамы — олоғара донъя, әбейҙәр сыуағы тантана итә. Көндәр бер аҙ йонсоп торғас, тағы аяҙға тартты, әйтерһең дә, ҡабат йәй әйләнеп ҡайтты — үҙ хоҡуҡтарын даулап, ҡояш баш осонан китмәй, еләҫ йылы елдәр иҫә. Япраҡтар ҙа йәм-йәшел әле, үләндәр ҡыуарып бөтмәгән. Хәмиҙә ҡарсыҡ йонсотҡос ямғырҙарҙа түшәктә аунаны, ауыҙының тәме китте, әллә ниҙәр уйлап бөттө. Хәҙер күҙҙәре лә асылды, күк бите лә таҙарып ҡалды — ҡурғаштай болоттар баш осонда аҫылынып тормай, шыҡһыҙ елдәр үҙәккә үтмәй. Малайҙар тағы уйнарға сыҡҡан — теге башта шаҙра Фәтихтең ейән-ейәнсәрҙәре сыр-сыулаша. Бер өй малайҙары — үҙе бер көтөү.

Хәмиҙә ҡарсыҡҡа ҡыҙығы табылып тора: йә Сәғҙиҙең ҡара бесәйе урамды киҫә, йә Аҡмуйнағы аҙашҡан ҡаҙ тубын баҫтырып йөрөтә. Йәшәү барыбер һүнеп ҡалмаған Ҡуянсыҡ урамында! Ҡарсыҡ тыштан күҙен алмай. Шунда үтте уның ғүмере. Ҡарты баҫмасылар менән һуғышып йөрөгәндә генә бер арауыҡ Өлкөндөгә ҡайтып йәшәне. Унда ла көндәше Әлфирә хөсөтө менән!

Хәҙер йыш ҡына ҡарсыҡтың иҫенә уландарының сабый сағы төшә. Гел балаларының шул иркә гонаһһыҙ мәлен һағына. Малайҙар тупылдап торҙо бит ҡотлоярҙар йортонда, көнө буйы Ҡаштаҡтауҙан ҡайтмай сана шыуалар. Аяҡ-ҡулдары өшөп бөтә, бейәләйҙәре бөрөшөп туңа. Хәмиҙә әрләшеп бара, малайҙарын бары эңерҙә генә өйөрөп ала.

Хәмиҙәнең тормошонда барыбер иң хәтәр мәл көндәше менән ярышып йәшәү булды. Хәмиҙә Әлфирәнең буй-һынынан, төҫ-башы-

нан, һауа яңғыратып көлөүенән, хатта шул алабарман холҡонан көнләште. Сабирйән эйәрсәне менән көндәшенең тиңдәштәр булыуына, икәүһенең типә-тиң шаярып дыу ҡуптарыуына ла йәне көйә. Хәмиҙә, бәлки, Әлфирәнең ашауынан-эсеүенән, ерҙә йәшәүенән, хатта ҡайһылай баҫып йөрөүенән дә эсе көтөрләгәндер әле! Ә балалар?.. Улар берен-береһе уҙышып үҫтеләр ҙә киттеләр. Хәмиҙә бөтәһенә бер әсә булып ҡалғас, барыһын инә ҡаҙҙай үҙ ҡанаты аҫтына йыйғас, шулай тейеш тип белгәндәрҙер, шул сүрәттә ҡабул иткәндәрҙер тормошто. Тағы ни хәл ҡылһындар сабыйҙар, яҙмыштарына күнмәй бүтән әмәле булмағас... Хәмиҙә үҙе лә өлөшөмә төшкәне шулдыр тип йәшәне.

Башта балаларҙы айырыбыраҡ ҡараһа ла, һуңынан өйрәнде. Балалар балалар инде, тышта йөрөйҙәр, өйҙә... Әлфирәнекеләр үгәй әсәне уғата яҡын итте, хатта нығыраҡ тыңланылар кеүек: ҡуйынға инеп баралар шул сәүкә бәпкәләре. Улар өсөн ул ваҡытта Хәмиҙәнән дә изгерәк зат булмағандыр. Бисара ҡатындың күңеле шулай әүрәне.

Зөлҡәрнәй Дыуанда уҡый башлағас, эсендәге ҡорто ҡыжмырлап ҡуйғайны ҡуйыуын. Камилын нығыраҡ хәстәрләй, хатта айырыбыраҡ та ашата ине. Үҙҙәренең яғынан уҡымышлылар сыҡмағас, көйөнөбөрәк тә йөрөгәйне. Беренсе балаһын өпәкәй-сөпәкәй итте, һәр теләген отто, үтәргә тырышты. Үҙеңдеке — үҙәктә барыбер! Ә Камил бик зиһенле бала булып үҫте, мәктәптә уҡытыусылары маҡтап бөтә алманы. Әсә йөрәге һөйөндө: Камил да атаһына тартҡан, ул да киләсәктә ҙур кеше, бер большевик түрә булыр! Төшөп ҡалмаҫ!

Хәмиҙә өсөн ғүмеренең иң матур миҙгелдәре тыуғандай итте. Был — уның да еңеүе! Хәмиҙәнеке өҫкә сыҡты, ә ирҙәүкә Әлфирәнеке аҫҡа сүкте! Хәмиҙә сабырлығы менән еңде, Әлфирә алабарманлығы арҡаһында янды. Вәт, тормош ҡайһы яҡтан килтереп һуға ла ҡайһылай бора күсәрен!

Камил ҡотлоярҙар затынан тәүләп институтҡа ингәс, Хәмиҙәнең түбәһе күккә тейҙеме! Аяҡ аҫтындағыны тойманы, йөрәге елпенде. Өс-дүрт көн айный алмай ҡаңғырҙы бәхетле ҡатын, кеше һүҙен ишетмәне, йөҙөн күрмәне. Әсә өсөн генә түгел, бар Ҡуянсыҡ урамына, бар Мәрҙән иленә мәртәбә! Камил улы менән Хәмиҙә шулай шәплегән, Әлфирә көндәшенән өҫтөнлөгөн мәңгегә иҫбат итеп ҡуйҙы.

Балалар иртә ҡул араһына керҙе, Хәмиҙә уларҙы үлтермәй генә үҫтерһәм инде тип үртәлде. Бөтә юрауы — шул. Мәрҙәндә — аслыҡ, кеше себен урынына ҡырыла, ныҡ миктәгәндәр бер көн ята ла үлә. Үлем — ғәҙәти хәл, йәнәштә генә боҫоп тора. Камил да, Әсләм дә, Ғәтиәт тә бирешмәне. Хәмиҙә Рәшиҙә менән Мазһарын итәгенән төшөрмәне. Һуғыш бөттө, Сабирйән дә, Зөлҡәрнәй ҙә әйләнеп ҡайтты, донъя тағы ҡотайып китте, ҡарттың да күңеле күтәрелде. Аҙаҡ, эйе, Камил Өфөгә ҙур ергә уҡырға керҙе. Төпсөгө Мазһар ҙа уҡымышлы ағаһы артынан эйәрҙе. Хәҙер уныһы шул ҡаланан ҡайтып та инмәй, күҙгә-башҡа күренеп тә йөрөмәй.

Хәмиҙә ҡарсыҡтың Ғәтиәт улын да, Камил кеүек уҡытып, ҙур кеше итәһе килгәйне. Ғәтиәт тиҙ ышанып барыусан, дөрөҫлөк эҙләп маташа. Бер ҡатлы. Атаһы ла ундай уҡ хәйләһеҙ бәндә түгел ине бит — кәрәк сағында буйына һыпырып, шымартып та ебәрҙе. Әллә Хәмиҙәнең үҙенә тартҡанмы икән был бала? Әллә ниндәй хыялый.

Хәмиҙә ҡарсыҡтың уйҙары әйләнә лә ҡабат төп йортта хужа булып ҡалған улына ҡайта. Ғәтиәтен аңларға, уның киләсәген юрарға тырыша әсә. Ғәтиәт һауала йөҙә, гел атай васыяты, шуға тоғролоҡ хаҡында туҡый. Әллә нимә эшләп башына юҡ-бар әйберҙәр тултырып тик йөрөй. Атаһы васыяты өсөн ул ғына яуаплымы? Төп йорт нигеҙен һыуытмау, уны нығытыу — шул уҡ атай һүҙен тотоу түгелме ни? Хәмиҙә ҡарсыҡ улын, уның һөйләгән хәбәрҙәрен аңлай алмай. Камил ҡайтып төшһә, бигерәк китә Ғәтиәт: ағайҙарын төп йортҡа йыйып, ҡотлоярҙарҙың тормошо хаҡында хәбәр ҡуйырта. Уртаға ултырып ала, ҡыҙып-туҙып бара. Ул ғына яна, бар донъя тураһында ҡайғырта, ҡотлоярҙар өсөн көйә! Ағайҙары әллә бер ни хаҡында ла ҡайғыртмаймы, әллә ул уларҙы ҡеүәтләргә ҡәһәтләнгәнме — бөтә нәҫелдең бурысын бер үҙенең иңенә йөкмәгән. Ағайҙарҙы артынан эйәртә, намыҫландыра... Улары үҙҙәренсә йәшәй, донъялары башҡа.

Шундай ваҡытта Ғәтиәт бәйләнсек әҙәмгә әйләнә: гел бер белгәнен сурыта, бер балыҡ башы сәйнәй. Улын аңлап бөтмәй ҡарсыҡ. Ғәтиәттең өйләнмәй йөрөүе, нисә бисә алып, нисәһен айырып ебәреүе өсөн йәне көйҙө — шул көйөгө, ахыры, аяғынан йыҡты. Төрлөсә өгөтләп, төрлөсә әйтеп ҡараны — ахыр аралары боҙолоп ҡына ҡуйҙы. Әле тороп, түшәктән айырылғанына ла ни саҡлы? Ҡабат әүәлге тәхетенә — тәҙрә төбөнә сүкте. Инә бөркөттәй, ҡая башына ҡунды. Тәҙрә уны оло донъя, кешеләр менән бәйләй әле.

...Тәфтишселәр, Оло урамды киҫеп, Ҡуянсыҡ урамына сыҡты. Алда — ҡотлоярҙарҙың төп йорто!

Ғәтиәт был ваҡытта өйҙә ине инде. Эт тура өҫтөнә ташланды. Хәмиҙә ҡарсыҡ күҙ ҡырыйы менән тикшереүселәргә эйәреп атай йортона ингән Әсләм улын да шәйләп ҡалды. Әле бер ни ҙә билгеле түгел ине, ҡарсыҡ та тәүҙә бер нимә лә аңғарманы. Ғәтиәтен күҙ алдында ҡулға алдылар, елтерәтеп алып сығып та киттеләр. Хәмиҙә ҡарсыҡ аҙаҡ, тикшереүселәрҙе беҙгә ауыл советы башлығы Әсләм улым үҙе килтерҙе, Ғәтиәт ҡустыһын Әсләм үҙе ниндәйҙер енәйәт ҡылыуҙа фашлап йөрөй, тип уйлаясаҡ.

Әсләм Ҡотлояров үҙе лә бер ни ҙә аңламаны. Башында мең төрлө һорау: Ғәтиәт нишләп ауыл советына төшкән, нисек төшкән? Ишектәр шар асыҡ, ә ҡарауылсы аҡылдан яҙған. Кисә ағай-энеләр икәүләшеп һыйланышып һин дә мин ултырғайны бит.

Әсләм Ҡотлояров, эштең ҡайһы яҡҡа ауышыуын абайлап, был йорттан тәфтишселәрҙән дә алдараҡ тайыу яғын ҡараны: эт ҡустыһына ташланыу менән, папкаларын йөкмәп, эшенә һыҙҙы. Аҙаҡ тәфтишселәр менән бергәләп ауыл советын асасаҡтар, Ғәтиәтте алып киләсәктәр... Ғәтиәт Ҡотлояров утлы ҡараштарын Әсләм Ҡотлояровтың йөҙөнә төбәйәсәк... Әсләм Ҡотлояровтың шунда йөрәге өҙөлөп төшкәндәй итер, башы буталыр, тик һаман бер ни ҙә төшөнмәй ер менән күк араһындағылай йөрөр, аяҡ аҫтындағы ҡаты ерҙе тоймаҫ.

## II

Хәмиҙә ҡарсыҡ, Ғәтиәт улымды Әсләм улым ҡулға алдырҙы, тип уйланы. Ғәтиәтте алып киткәс, оло йорт ҡола яланға әүерелде. Ҡаҡ тибен, буш саңдау! Өйөр шунда ятҡан-ятҡан да ары киткән, ә тибен етемһерәгән.

Килендәре ҡайтып киткәс, шулай булғайны. Шул гонаһһыҙ балалар үҙҙәре менән өйҙөң бар йәмен алып киткәйне, был тормоштоң бер ҡыҙығы, бер мәғәнәһе ҡалмағайны — теләһәң нишлә: теләһәң, бүре булып оло йә баҡа булып баҡылда… Бер йәме, ҡото ҡалмаған йортонда аңҡы-тиңке баҫты ла ҡарсыҡ ауыл советына йүнәлде. Айҡала-сайҡала, нәҡ урам уртаһынан бара; күҙе — шар, берәүҙе күрмәй. Гүйә, йән эйәләре Мәғҙәнде ташлап ҡасҡан — ауыл да үкһеҙ. Килендәре был ерҙе ерһенмәне, Ҡотлояр ҙа гүр эйәһе… Балалары булмаһа, шулар, Мәғҙән — ғәзиз тупрағыбыҙ, тип йәбешеп ятмаһа, ҡарсыҡ ҡайһылай түҙер ине икән был илдә?

— Инәй, — тине Әсләм, тешен ҡыҫып. — Ғәтиәт төнөн ауыл советына төшкән. Бына никах кенәгәһендә яҙыу: ул сатан Мөхәмәтйәндең ҡыҙы Миңзада менән никахҡа кергән!

Ҡарсыҡ иҫһеҙ булды. Ҡарауылсы һымаҡ был да аҡылынан яҙмаһын тип, Әсләм өрктө. Хәмиҙә ҡарсыҡ иһә бирешергә йыйынмай ҙа ине: был хәбәрҙән һуң оторо нығына, оторо ярһый барҙы.

— Шул никах тип, шул кәнтәйгә өйләнәм, тип силсәүиткә төшкәнме?

— Эйе, инәй.

— Шаҡай! Шул кәнтәй тип!.. — Ҡарсыҡ ыңғырашты, ярһыуҙан әллә ниндәй аңлайышһыҙ ауаздар сығарҙы, тауышы ҡарлыҡты. — Мин үҙем уларҙы ҡауыштырыр, үҙем мулла саҡырып ижап уҡытыр инем… Хәҙер уны нишләтерҙәр икән? Шул юҡ өсөн ултыртып ҡуйырҙармы?

— Белмәйем, инәй. — Әсләм инәһе алдында башын эйҙе.

— Белмәйһеңме?

— Белмәйем.

— Белмәйһең шул, белмәйһең — бер туған энеңде төрмәгә тыҡтың да хәҙер бер нимә лә белмәйһең!

— Инәй!

— Әйтмә миңә! — Ҡарсыҡ аҙарынды, улы ҡаршыһында ҡыу ағастай булып үрә ҡалҡынды. — Һин бөтәһе өсөн ғәйепле: һин ризалашманың Ғәтиәт иркәндең шул Миңзадаға өйләнеүенә, һин апарып тыҡтың уны төрмәгә!

— Инәй… — Әсләмдең тамағы кипте. — Һин дә Миңзадаға ҡаршы инең…

— Юҡ, һин ”уйнаштан бала тапҡан да, минең бажаның һөйәркәһе булған” тип туҡының…

— Инәй!

— Һин, һин ғәйепле! Ағай, силсәүит башы, имеш! Һин, һин юрый батырҙың! Үс иттең, үс алдың туғаныңдан!

— Инәй!

— Әйтмә миңә ”инәй” тип. Һин — үҙең иблис, үҙең уйнаштан тыуған бала! — Ҡарсыҡ артҡа ҡайҡайып китте, уны аҡылын юя был, тип уйланылар, барыһы ла аяғүрә торҙо. Ҡарсыҡ һаман һөйләнде, һаман ауыл советы башлығына төкөрөгөн сәсте. Уны тынысландырырға маташтылар. Ауыл советында иҙән йыуыусы ҡатын ахыр ҡарсыҡты өйөнәсә оҙатып ҡуйҙы.

Ирҙәр эш ҡыла, ә хәсрәте — бисә башына. Ирҙәрҙең ҡылығы өсөн һуңынан бисәләр көйә, улар ыҙа сигә, һағышын эсенә йомоп, ғүмер

һөрә. Хәмиҙә ҡарсыҡ кеүек, ауыл советындағы, ҡотлоярҙар йортондағы был мәхшәрҙе ишетеп, Миңзада ла ҡайғыға батты. Сельпо гөжләп тора: имеш, Ғәтиәт Ҡотлояров ауыл советына төшкән; имеш, Әсләм Ҡотлояров, туғанын ҡулға алып, Шиҙәлегә үҙе оҙатҡан. Контора бухгалтерҙары милиционерҙарҙың Күльяҡ урамына Сатан өйөнә барыуын ғына өндәшмәй. Миңзада төшкәсә нисек тә түҙҙе, төштән һуң өйҙә эшләйем, балам да сирләп тора, тип Һибәтовҡа инде. Һибәтов ауыл советы тирәһендә ҡуйырған хәбәрҙәрҙең айышына күптән төшөнгәйне, зирәк кеше, экономисын тотманы.

Миңзада иң элек теге никах кенәгәһен йәшереү хәстәрен күрҙе, эт менән йөрөүҙәрен ишеткәйне. Никах кенәгәһен сельпо конторанына илтер — конторанан эҙләргә берәүҙең дә башы етмәç, өйҙө тентеүҙәре ихтимал. Хәйер, Ғәтиәт бөтә ғәйепте өçтөнә алыр, кенәгәнең ҡайҙалығын үлһә лә әйтмәç.

Ҡайтты ла йөҙтүбән ҡапланды Миңзада. Донъяһы емерелеп ята, яҙмышы селпәрәмә килә. Ғәтиәт менән ни булыр? Был ҡылыҡты икәү ҡылдылар — икеһе лә хөкөм ителергә тейеш. Тейеш! Төрмәгә япһалар, икеһен бергә япһындар, ҡушарлап бығаулап ултыртһындар, берүк айырмаһындар! Мөхәббәт шарабын бергә эстеләр, бергә гонаһтарға баттылар — аҙабын да бергә күтәрерҙәр! Нәкиә апаһы өйрәтте Әсләмде эсерергә, шулай ауыл советы башлығын күндерергә! ”Әсләм үҙ туғанын ярлыҡар, эште ҙурға ебәрмәç”, — тигән була. Ана, ул үҙе овчарка саҡыртҡан, башлап йөрөгән!

Миңзаданың хәҙер Нәкиә әхирәте тураһында ла, Әсләм Ҡотлояров хаҡында ла ишеткеһе килмәй, үҙ ҡайғыһы башынан ашҡан. Бынан һуң ни булыр, Ғәтиәтте ултыртып ҡына ҡуйырҙармы? Тормошо пыран-зыран, хыял һарайҙары емерелә — ни ғиллә был? Кем башына була шулай ҡарғанды икән Хәмиҙә ҡарсыҡ? Кем күрһәтер хаҡ юлды, кем яҡтыға алып сығыр хәҙер был аҙашҡан йәндәрҙе? Хәҙер Миңзада яҡынын ҡотҡарыр өсөн ни эшләргә тейеш? Хәмиҙә ҡарсыҡ ҡәнәғәтме икән, ниһайәт, маҡсатыма ирештем, улымды уйнаш бисәнән айырҙым, тип ҡыуанып ултырамы? Телләгенә өлгәште, юраағаны юш килде.

Бахыр ҡатын хәҙер шул затты ҡарғап туйманы. Үҙе ныҡлы ғына бер ҡарарға килмәне. Улы ла мыжып йөрөй. Гонаһлы мөхәббәт емеше! Бөтә бәләләрҙең башы ла — шул йәшертен мөхәббәт, никахһыҙ гонаһ! Был юлы нисек тә никах уҡытырға, нисек тә никахҡа инергә маташҡан булды. Иртә уңмаған кис уңмаç, кис уңмаған һис уңмаç, тигәндәре әллә нәҡ уның хаҡында әйтелгәнме? Миңзада бихисап һорауҙарына яуап тапманы, зиһене асылғанда, ”хәҙер нисек тә Ғәтиәтте күрергә, һөйләшергә” тип ҡуя ине… Ғәтиәтте күрер өсөн, Шиҙәлегә барырға, милиция бүлегенә инергә! Күрештерерҙәрме? Тағы йәш ҡатын үҙен Ғәтиәт Ҡотлояровтың кеме тип таныштырыр?

Башы тубал ғына булды бисараның, бәхетһеҙ бисәнең.

## III

Хәмиҙә ҡарсыҡ хәҙер өйҙә ултырып сыҙамай. Башы эшләй, зиһене асыҡ: ҡул ҡаушырыр саҡмы, ниҙер ҡылырға, кем менәндер һөйләшергә кәрәк! Почтаға һуғылып, Биләндән Камил улын саҡыртты, шунан

Зөлҡәрнәйҙәргә инде. Нәкиә килен магазиндан ҡайтмаған — уңай тап килтерҙе.

Ҡуянсыҡ урамында берҙән-бер ҡала ҡапҡа. Урыҫ ҡапҡаһы ла тиҙәр. Иркен ихата, йыуан бүрәнәләрҙән буралған өй һынлы лапаҫтар. Бейек күтәрмәгә менгәс, ике яҡҡа ике оло солан китә. Өй эсе лә ике яҡҡа бүленгән. Түрбашта шифоньер, трюмо, боронғо семәрле комод, түңәрәк өҫтәл ултыра, ә ҡашығаяҡҡа кергәс тә, һул ҡулда — дүрткел оло урыҫ мейесе, уң ҡулда — йомро мейес, яртыһы түрьяҡҡа сығып тора. Зөлҡәрнәй йомро мейес артындағы тимер карауатта ята ине.

— Улым, аптыраған өйрәк арты менән һыуға сума. Берегеҙгә лә мәшәҡәт һалғаным юҡ, шулай ҙа Fәтиәтулла менән ни хәл итәбеҙ? — Ҡарсыҡтың тауышы ҡалтыраны.

Зөлҡәрнәй, утты-һыуҙы кискән кеше, тыныс тормоштағы ығы-зығыға әллә ни әһәмиәт бирмәй. Бөгөнгө хәл дә уны сығырынан сығарманы.

— Улым, Зөлҡәрнәй… — Ҡарсыҡтың тыны ҡурылды, хәле бөттө. — Һин ҙур урында эшләнең, рәтен-сиратын беләһең: зинһар, энеңде ҡотҡар! Бер туған ғынаһығыҙ бит, шундай саҡта ла бер-берегеҙгә таяныс булмағас!.. Әсләм, ана… Үҙеңдеке үҙеңә яу!

Ҡарсыҡ үҙенекен ҡайырҙы, бер башлаған хәбәрен өҙмәне лә ҡуйманы. Ә Зөлҡәрнәй, ғүмер баҡый законға буйһоноп, законса эшләп өйрәнгән бәндә, ни ҡылһын? Үҙе мәңге шул закон һағында торҙо, шул законды үтәү өсөн тимерҙән ныҡ, таштан ҡаты булды. Намыҫы, бурысы менән һатыулаша белмәне. Әле закон бер яҡта, ә үҙе, Fәтиәт туғаны икенсе яҡта тороп ҡалды. Хәҙер ул ни эшләй ала? Хәҙер закон үҙе уны иҙҙе, үҙе юҡҡа сығарҙы, бик-бик бәләкәй кеше итеп ҡалдырҙы. Зөлҡәрнәй һүҙ тапманы. Берәй тантанала, байрамда телмәр тоторға ҡушһаң, колхозсыларҙы өмәгә, көрәшкә саҡырырға өндәп, һүҙ әйт тиһәң, бер туҡтамай ике, өс, дүрт сәғәт ялҡынлы телмәр тотор ине, тыңлаусыларҙы рухландырыр, яу ҡырына, үлемгә ташлар…

— Зөлҡәрнәй улым… — тип иламһыраны ҡарсыҡ, — бер-бер хәл ҡылырға, бер әмәлен табырға кәрәк! — Ҡарсыҡтың һүҙҙәре буш өйҙә оран һымаҡ яңғыраны. Көслө ихтыярлы кеше һаман ҡымшанманы, исем өсөн генә булһа ла ”инәй, уйлашырбыҙ” тип әйтмәне.

Зөлҡәрнәй тоғро коммунист, алыш-биреш итмәй, эскеселәр, бурҙар менән ҡатышмай, енәйәтселәр менән килешмәй.

Хәмиҙә ҡарсыҡ, ҡарты үлгәс, уландарын береһен икенсеһенә һөйләп, ҡаршы һөслөтеп ултырған, шунан йәм тапҡан бәндә, әле килеп Fәтиәте өсөн, инә бөркөттәй, алышҡа ташланды, үҙен аяу белмәне, талған ҡанаттарын йәлләмәне. Әле уны тарҡалған ғаиләне яңынан оло бер көскә туплаусы, шул көс инәһе тип торорһоң… Бары Fәтиәте ҡотолһон, был бәләнән имен-аман сыҡһын! Ҡарты уға шуны васыят итте түгелме?

— Зөлҡәрнәй, бер серҙе асайым әле… Ҡартайғас, ярайҙыр. — Ҡарсыҡ тәрән һуланы. — Был юлы ҡарттың васыятын боҙам. Һин — оло, аңларһың…

Ҡарсыҡ күптән күңел төбөндә йөрөткәнен асып һалды.

— Камилды ҡарт баҫмасылар менән һуғышҡа киткәс үк таптым. Аҙаҡ, Әлфирәнән һуң, Fәтиәтулла, Рәшиҙә, Мазһар тыуҙы. Шулай йәшәнек. Һис тә һеҙҙе үҙ балаларымдан айырманым, ҡарт шулай

ҡушты. Бөтәгеҙ ҙә бер атанан, бер инәнән тип үҫтегеҙ, йәтимлек тойманығыҙ. Үҙ балаларымдай, үҙ ҡанымдай күрҙем, үҙемдең йөрәгемде ярып төшкән балалар тип тәрбиәләнем. Аслыҡта үҙем асыҡһам, асыҡтым, мәгәр берегеҙҙе лә үлтермәнем. Әсләм шешенә башлағайны. Хәҙер, Ғәтиәт шундай хәлгә тарығас, ауыр миңә. Хәс тә һеҙ минең ҡанымды ситкә тибәһегеҙ кеүек, ярҙам итмәйһегеҙ. Әсләм, ана, үҙе! — Ҡарсыҡ, ниһайәт, еңел һулап, бушанып ҡалды. Ғүмер буйы йөрәге төбөндә йөрөткәнде әйтеп һалды, инде шул ауыр сер һандығын асырға йөрьәт итте.

— Инәй, — тине Зөлҡәрнәй йөҙәп. — Әсләм, эше ҡушҡас, килгәндер. Ул ҡайҙан белһен; мин дә ни эшләй алам? Ярай, Шиҙәлегә барғанда тәфтишсе менән һөйләшермен, Ғәтиәттең хәлен аңлатырмын. Колхоз машинаһы районға йөрөп тора.

— Зөлҡәрнәй, һин бөтәһен аңлат... — Ҡарсыҡ тағы шәбәйҙе, ашығыуҙан тыны ҡурылды. — Мин Камилды ла саҡырҙым... Тәфтишсегә энеңдең Миңзаданы яратыуын, Өлкөндөнән, Биләндән бисә йәрәшеп тә, йәшәй алмауын — бөтәһен әйт! Әсләм силсәүиттә гел ҡаршы булды, тиң, Миңзаданың балаһы бар, шуның кемдән булыуын да ҡалдырма! Энеңде ҡотҡар! Ул һинең бер туғаның бит, бер ата балаларыһығыҙ!

## IV

Камилдың был арала эше тығыҙайған, юғарылағылар менән дә араһы боҙолоп тора. Рәйсә килен һөйләгән теге комиссиялары йонсота, имеш.

Ғәтиәт өйҙә булмағас, донъяның бер сите китек һымаҡ. Хәмиҙә лә улын ғына һөйләй, шуны ғына йәлләй.

— Зөлҡәрнәй ағайың менән дә һөйләштем. Береһе лә ҡымшанмай. Әсләм энең үҙе Ғәтиәтте ҡулға алышып йөрөнө. Ғәтиәт шул Миңзадаға өйләнһә, уңа ине... Ғаризаһын йырта ла ташлай, йырта ла ташлай, ти... Тәфтиш быныһын белмәйҙер...

Уйлап эш итеүсән Камил өндәшмәй. Ҡарсыҡ бер ҡыҙғанда ғаилә серен дә асырға яҫҡына. Ҡотлоярҙар араһында Камил һүҙе менән ныҡ иҫәпләшәләр...

— Әсләм еңел булды, уйламай эшләне. Буш бәндә, йүнле эш күрһәткәне юҡ.

— Әй, инәй...

— Юҡ, Әсләм силсәүиттә әтейең абруйы менән генә эшләп алып китте, аҙаҡ Зөлҡәрнәйҙең ҡанаты аҫтында йөрөнө. Шул шаталаҡ ҡаны... Әсләм дә, Зөлҡәрнәй ҙә — Әлфирәнең балалары — гел һеҙгә этлек уйланылар.

— Инәй...

— Йәтим бала аҫрағансы етем быҙау аҫра — ауыҙың-мороноң май булыр, тиҙәр — хаҡ икән. Уларҙы ҡарап үҫтереп игелек күрҙемме?

— Инәй, Әсләмдең эше шул...

— Эшем эйәһе!

— Инәй, мин үҫкәндә бер айырма ла тойманым, әле лә...

— Улайһа, ағайҙар, барығыҙ күмәкләп бер энегеҙҙе ҡотҡарығыҙ! Һин дә Мәғҙәнгә ҡунаҡҡа ғына ҡайтып өйрәндең...

Ҡарсыҡ ҡаты һөйләште, ҡәтғи талап итте. Уға хәҙер нисек тә үҙ улын ҡотҡарырға кәрәк.

Камил бер торҙо, бер ултырҙы, эй ыуаланды, эй өҙгөләнде. Ул да хәҙер ниҙер ҡылырға тейеш!

Хәмиҙә ҡарсыҡ шулай һүҙе үткәнгә һүҙе менән, уйы еткәнгә уй-теләге менән маҡсат ҡуйҙы, бөтәһен дә аяҡландырҙы: ағайҙар энеләрен ҡотҡарырға бурыслы!

## V

Әсләм Ҡотлояров тәүге һорау алыуҙа уҡ тәфтишсегә ҡустыһының ике тапҡыр ғариза тотоп инеүен белдерҙе. Икенсе ғариза ҡағыҙҙар араһынан килеп сыҡты. Тәүгеһен ул йыртып ташланы, шул юл менән йәштәрҙең ҡауышыуына аяҡ салды. Әсләм Ҡотлояров ғариза буйынса дәғүәләрҙе кире ҡаҡманы, никах буйынса закондарҙы боҙоуын да таныны, ни өсөн ошо юлға баҫыуын үҙенсә аңлатып бирҙе. Туған булараҡ, үҙенең хаҡлығын иҫбатларға тырышты, әммә шунда бер ыңғайҙан асҡыс мәсьәләһе лә ҡалҡырын һис көтмәгәйне.

Тәфтишселәр ҡарауылсынан да һорау алған. Теге нисектер бурҙың үҙендә асҡыс булыуын, уның ауыл советына үҙе инеүен аңғартҡан. Бында ниндәйҙер хикмәт ята! Енәйәт ҡылынаһы төнгә ҡаршы ағай-эне тағылышып эсеп йөрөгән, шуны кеше күргән. Иҙән йыуыусы ҡатын да туғандарҙың эштән һуң икәүҙән-икәү ултырып ҡалыуын раҫлай. Был нимә? Туғандар икәүләп енәйәт ҡылыусымы? Әсләм Ҡотлояров үҙе үк Фәтиәт ҡустыһына ауыл советына төшөргә булышҡан! Фәтиәт асҡысты нәҡ Әсләмдән алған! Фәтиәт, икәүләшеп эскәс, ағаһының асҡысын урлаған! Ә Әсләм, эшенә яуапһыҙ ҡарап, эсеп йөрөп асҡыһын юғалтҡан!

— Асҡыс миндә бит, тәфтишсе иптәш...

— Асҡыс — һеҙҙә, Ҡотлояров иптәш. Ләкин экспертиза һеҙҙең асҡысығыҙҙа Фәтиәт Ҡотлояровтың да бармаҡ эҙҙәрен тапты. Һеҙ уға асҡысты үҙегеҙ бирҙегеҙме әллә?

— Юҡ.

— Улайһа...

— Нимә ”улайһа”?..

— Улайһа, Фәтиәт Ҡотлояров эскәндә асҡысты һеҙҙең кеҫәгеҙҙән урлаған!..

— Урлағас, асҡыс нишләп минең ҡулда була?

— Кире һеҙгә илткәндер...

— ...

— Һеҙ, ағай-эне, үҙ-ара килешеп эшләнегеҙме?

— Юҡ.

— Ниңә айныҡ саҡта ғына теркәмәнегеҙ йәштәрҙең никахын?

— Мин ҡаршы инем!

— Аңлашылмай.

— Ишекте, бәлки, ҡарауылсы асҡандыр?

— Председатель иптәш, һеҙ ҡарауылсыла асҡыс булмауын бик яҡшы беләһегеҙ бит!

Әсләм Ҡотлояров, нисек кенә ыуаланһа ла, хәҙер терһәген тешләй алмай: Фәтиәт ҡустыһы ҡулға алынған, енәйәт эше асылған, оҙаҡламай

суд булыр. Тормош ҡуласаһы ҡайһылайыраҡ әйләнеп китте, ә?! Ҡайһы яҡтан, ҡайһылай иҫкәрмәҫтән килтереп һуҡты?! Әсләм, Ғәтиәтте хурлыҡтан йолам, шулай ҡотлоярҙарҙы ил алдында мәсхәрәнән ҡотҡарам, атай нигеҙенә гонаһһыҙ бәндәләр генә баҫып йөрөр, тип тырышҡайны бит — донъяны бәләләрҙән ҡурсып, уны үҙе үк бәләгә тарытты, ҡустыһын, мәкерҙән йолам, хурлыҡтан ҡотҡарам, тип үҙе үк мәсхәрә, хурлыҡ бағанаһына бәйләне! Шулмы ҡотлоярҙарҙың татыулығы-берлеге — бер-береһен ярҙан этәләр!

Ул ғәйепле, ул туғанының башына етте.

”Бәддоға, бәддоға һиңә, Әсләм Ҡотлояров — ҡотлоярҙар данын һаҡларға, атай васыятын тоторға маташҡан бәндә! Һин үҙең үк ҡотлоярҙар эшенә хыянат иттең, үҙең үк атай васыятын боҙҙоң! Һин үҙең — ҡотлоярҙар теләген юҡ итеүсе, уларҙы бөлдөрөүсе! Ана, Зөлҡәрнәй ағайыңдан өлгө ал, исмаһам, ул ҡыҫылманы, яуап тотмай; ул киҫәтте генә, хаталарҙан айбанығыҙ, мырҙалар, самаларҙан ашып, дыуамаллыҡ ҡылмағыҙ, яҙа баҫмағыҙ, тип тылҡыны. Өлкән ағайығыҙҙы тыңламағыҙ, ҡыҙыу ҡанлы, еңел Ҡотлояр балалары — яндығыҙ, ҡылығығыҙ — үҙ башығыҙға!” Әсләм Ҡотлояров үҙ-үҙен ҡайыҙланы ғына, әммә бынан берәүгә лә файҙа, бер ниндәй ҙә фәтүә юҡ ине — эш эшләнгән, ҡулдар быҫраҡҡа йоғонған. Эх, хәҙер терһәкте тешләп булһа! Эх, хәҙер ҡустыһын хөкөм ҡулынан йолоп ҡала алһа! Хәҙер Ғәтиәт Ҡотлояровты хөкөм итәсәктәр.

Ғәтиәттең башынан кисергәндәрҙе яңынан уйларға ваҡыты етерлек. Тағы таш ҡапсыҡҡа ҡапты... Теге ваҡытта ла буштан-бушҡа, Нәкиә еңгәһе хөсөтө менән эләккәйне, был юлы ла... Үҙенсә, бер ниндәй ҙә хилафлыҡ ҡылманы бит: кеше туҡмаманы, аҡса урламаны, илгә лә зыяны теймәне. Берәүҙе лә илатманы! Шулай ҙа уны ҡулға алдылар, ҡулына бығау һалдылар. Ни ҡылды ул, ниндәй гонаһ эшләне? Берәү үҙ-үҙе менән әкәмәт бәхәс ҡорҙо.

”Ғәтиәт Ҡотлояров, һин үҙеңә лә, Миңзадаға ла, Әсләм ағайыңа ла этлек кенә эшләнең! Үҙ бәхетеңде үҙең юҡ иттең, Миңзаданың яҙмышын боҙҙоң, бар тормошон арҡыс-торҡос килтерҙең! Ниндәй иблис һине ҡотортто, шул тайғаҡ юлға төшөрҙө? Эскеме? Әсләм ағайың менән ултырғанда аҫҡыҫҡа күҙең төштө. Ағайың, аҫҡысты кире пинжәк кеҫәһенә тығып ҡуйғанда: ”Энем, йоғанма, энем, абай!” — тип әйтергә теләгән... Иҫкәрткән! Йоғанма, уйындан — уймаҡ, сыйыҡтан — ярыҡ! Һин — яндырай. Зөлҡәрнәй менән Камил да, Әсләм дә шулай итмәҫ ине. Алйот һин, Ғәтиәт!”

Хәҙер генә башына барып етте: үтә еңел аҡыллы булған. Бер ҡатлы бала-саға! Шул кенәгә хаҡына башын ашаны, Миңзаданың бәхетен аяҡ аҫтына һалды! Бөркөт һауала үлә, ир-ат башын яуҙа һала, ә һин... Башы әйләнеп китте күп уйлауҙан. Ағалары, ҡотлоярҙар бәләһе хаҡында уйлап оторо йәнен аҡтарып ташланы. Бынан кире ни булыр? Хәтәр: ни ҡылды ул? Үҙ ҡулдары менән Мәғҙәндә власть башынан ағаһын бәреп төшөрҙө! Әлбиттә, был хәлдән һуң да Әсләм Ҡотлояровты Мәғҙән ауыл советы башында ҡалдырмаясаҡтар — быныһы билгеле... Ғәләмәт: ҡотлоярҙар үҙ ҡулдары менән үҙҙәрен түрҙән осороп төшөрә! Бүтән берәү ҙә түгел, ә улар үҙҙәре бер-береһен батыра! Күпкәк Әбхалиҡ та, райком да, райсовет та түгел, ә Ғәтиәт үҙе. Ул ҡотлоярҙар йөҙөнә ҡара яға!

Һуаланды ғына тотҡон, үҙ-үҙен ҡайыҙланы, ҡарғыш яуҙырҙы үҙ башына. Уйлаһаң, уйылып китерлек тәһә: ҡотлоярҙарҙың бәләһе — ҡотлоярҙарҙың үҙҙәрендә! Бүтән бирәү ҙә түгел, бирәү ҙә улар ҡулындағы дилбегәне тартып алмай. Һибәтов та, Әбхалиҡ та яҫҡынмай уларҙың власына... Ә улар үҙҙәре үҙлектәренән серей, үҙҙәренәнүҙҙәре юҡҡа сыға. Почтала эшләй алманы, ферма йөгөн түңкәрҙе... Ирҙәр ут эсенә инә, бөркөттәр ҡая битенә йәнселә. Хәҙер Ғәтиәт Ҡотлояров ҡотлоярҙар сере хаҡында ла ауыҙ аса алмаясаҡ. Үртәлде, үҙ-үҙен ҡәһәрләне ир, терһәген тешләрҙәй, бүреләй, ҡапҡанға ҡыҫылған тәпәйен сәйнәп өҙөрҙәй булды. Ирек тә инде татлы хыял һымаҡ ҡына булып тойолдо... "Тормош ниңә шулай аяныслы икән, аҙағы гел үкенесле була... Иҫләмәй ҙә ҡалаһың — осона сығаһың... Аҡылыңа килгәндә инде һуң була; иҫәүән саҡта эш эшләнгән, ә аҡылға ултырғас, дарман ҡайтҡан була".

Шунда Миңзада килеүен әйттеләр. Тотҡон яралы йыртҡыс хәлендә ине, һөйөнмәне. Был осрашыу ҙа сираттағы бер яза ғына буласаҡ.

— Ғәтиәт! Ғәтиәт, һин мине ишетәһеңме? Бөтәһенә лә мин ғәйепле бит: никахһыҙ ҡушыла алмайым, атайымдар ҡаршы, күрше-күлән көләр тип килдем. Кисер! Нимәгә кәрәк ине беҙгә шул кенәгә? Шунһыҙ ҙа, ата-әсәйҙән башҡа сығып, йәшәп алып китә инек...

— Миңзада, һин ул никах кенәгәһен һаҡла!

— Ғәтиәт, мин ғәйепле бит, ғәйепле! Кенәгәне һаҡлармын, һине...

— Көтөрһөңмө, Миңзада?

— Һис шикһеҙ!

— Һин дә игеҙәгең кеүек... Ул ун биш көндә...

— Һшан, мин — игеҙәгем Миңзифа түгел! — Бисара йәшен ҡойҙо. — Бел, был белмәй, аңламай тип уйлама: мин генә ғәйепле бөтәһе өсөн дә! Мәғҙәнгә ҡайтып башыңды әйләндерҙем, Миңзифа игеҙәгемдән, бел, мин тартып алдым! Ул һинән, һине ун биш көнгә ултыртҡастары, минең өгөт менән баш тартты! Икегеҙ араһын бутауға мин ғәйепле! Мин донъяңды бутаным, бар тормошоңдо баштүбән килтерҙем!

— Миңзада, илама! — Тотҡон һөйөклөһө усына ҡағылды. — Һин тамсы ла ғәйепле түгел.

Йәш бисә аҙарынып ҡараны тотҡонға.

— Ә кем ғәйепле?

— Миңзада, бөтәһенә мөхәббәт ғәйепле. Мин үҙем һиңә... Бергә булғым килде, әле мәктәптә уҡығанда уҡ...

— ...

— Ғәфү ит, Миңзада, был ҡылығым өсөн, бала-саға кеүек... Ниндәй шайтан ҡоторттто?

— Мин!

— Нисек? — Тотҡондоң күҙе аҡайҙы.

— Нәҡиә апай миңә: "Әсләмде эсерегеҙ, ул яҡҡа йомшаҡ кеше, кенәгәһен дә йәһәт тултырып бирер", — тине. Шул уйҙы мин һиңә еткерҙем...

— Тағы шул Нәҡиә еңгә!

— Шул!

— Тыныслан! — Ғәтиәт хәҙер Миңзаданы йыуатырға тотонды.

— Ғәтиәт, әйт әле, миңә нишләргә? Һине нисек ҡотҡарырға?

— Миңзада, һин бер генә нәмә эшләй алаһың...
— Нимә?
— Алда әйткәйнем... әйтә биреп ҡуйғайным да инде... Һин дә... — Тотҡон икеләнде.
— Нимә?
— Мине бер нисә йылға ултыртырҙар...
— Мин көтөрмөн! Аһ, әйтһәм, әйтәйем дә ҡуяйым: Ғәтиәт, мин ауырлы бит!..
— Миңзада!
— Ысын!
— Миңзада, улайһа тыңла: бары шул ғына ҡотҡара ала мине. Шул ғына!
— Ғәтиәт...
Шунда шартлап тимер ишек асылды, осрашыу тамам; тотҡон әйтәһен әйтеп өлгөргәненә ҡыуанды.
— Ваҡыт бөттө.
— Хуш, Миңзада!
— Мин һине көтөрмөн, Ғәтиәт!
Бисараның күҙҙәре йәш, әрнеү менән тулы ине, тотҡондоң да йөрәк башҡайҙарына ҡан һауҙы. Уға был айырылышыу хас та һуңғыһы һымаҡ тойолдо.

## Эпилог урынына

Ғәтиәт Ҡотлояровты өс статья буйынса хөкөм иттеләр: Мәғҙән ауыл советына инеп, никах кенәгәһе урлағаны өсөн; үҙ белдеге менән хөкүмәт документын төҙәткәне һәм сельпо менән ауыл советы ҡарауылсыһы ғүмеренә ҡул һуҙғаны өсөн. Йәмғеһе йыл йыйылды.

Судтан һуң күп тә үтмәй ауыл советы сессияһында Мәғҙән ауыл советы рәйесе Әсләм Ҡотлояровты вазифаһынан бушаттылар. Эше буйынса иҫкәрмәләр менән бергә рәйескә ”никахҡа инергә теләүселәрҙең ғаризаларын ҡарамағаны, улай ғына ла түгел, шул документҡа тиң яҙыуҙарҙы юҡ иткәне өсөн” тигән дәғүә лә бар ине. Әсләм Ҡотлояров, әлбиттә, үҙ бәләһе өсөн бик ныҡ ҡайғырманы, һәр хәлдә был баш бәләһе түгел. Ғәтиәт ҡустыһы өсөн уның йөрәк баштарына ҡан һауа ине.

Бәлә ишһеҙ йөрөмәй, хәсрәт артынан хәсрәт тағылып ала, тиҙәр. Оҙаҡ та үтмәй Биләндән дә күңелһеҙ хәбәрҙәр килде: Камил Ҡотлояровты райком бюроһында тикшергәндәр, ҡаты шелтә сәпәгәндәр. Бына ни өсөн Билән совхозы директоры һуңғы арала Мәғҙәнгә юлды онотоп торҙо, туғандары янына бик һирәк ҡайтты, ағай-эне араһында онотҡанда бер күренде. Эштәре тығыҙайғандыр, тегендә, Биләндә, уның да хәле мөшкөлләнгәндер. Ҡотлоярҙар башына бәлә өҫтөнә бәлә.

Оҙон телдәр тағы ”Мәғҙән колхозы партком секретары Зөлкәрнәй Ҡотлояровтың баш осонда ла болоттар ҡуйыра, был эш тә оҙаҡҡа бармаҫ”, тип юраны. Дөрөҫмө, бушмы, тағы шуныһы хаҡ: Зөлкәрнәй һуңғы ваҡытта ҡыйыш тейәп тә ҡайта икән...

”Әллә был ҡотлоярҙар нәҫеленә үләт төшкәнме, был тоҡомдо әллә Хоҙай үҙе ҡарғағанмы?” тип, Мәғҙәндә тағы аптырашып та бөттөләр.